ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
17-23 июль (майай) 2026
№28 (1223)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бензинға бәйле хәл**



2

**Айна нисек ярҙам итә?**



6

**Биләриттәр, ҡатайҙар...**

беҙҙә шулай атайҙар



8-9

**Лилиә йырлай, Урал бейей,**

ә балалары ни эшләй?



11

@kiskeufa
Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Бөгөн донъя нәфрәт менән сирләй. Әгәр ҙә беҙ ошоға ҡаршы дарыу табмаһаҡ һәм нәфрәтләнеүселәрҙе күрә алмауҙы дауам итһәк, үҙебеҙ нәфрәт һаҙлығына батасаҡбыҙ.***

***(И. Ильин).***

*КӨН ТӘНҠИТЕ*

# ТАБИПҠА ТУПАҪЛЫҠ ЯРАМАЙ



**"Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы саҡта тупаҫ табиптарҙы осратырға тура килә. Был хаҡта туғандарҙан, таныштарҙан ишетәм. Халыҡ ваҡытында медицина ярҙамы ала алмай. Беҙ һаулыҡ һаҡлау инфраструктураһына ҙур өлөш индерҙек. Һәм беҙ тармаҡта эшләүселәр тарафынан ыңғай һөҙөмтәләр көтәбеҙ. Һеҙ беләһегеҙ, мин табиптарға, шәфҡәт туташтарына ҡарата йылы һүҙҙәремде йәлләмәйем. Әммә тупаҫлыҡ осраҡтарына юл ҡуйырға ярамай", - тине Радий Хәбиров.**

Республика етәксеһе БР Башлығы хакимиәтенең Социаль коммуникациялар буйынса идаралығы етәксеһе Елена Прочаковскаяға был проблеманы айырым ҡарарға ҡушты. Хәҙер һәр дүшәмбе һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин оператив кәңәшмәлә медицина хеҙмәткәрҙәренең эш сифаты хаҡында доклад яһарға тейеш буласаҡ. "Һорауҙарҙы туранан-тура ошонда министрға бирергә кәрәк, ә ул үҙ сиратында муниципалитет башлығына еткерергә тейеш. Был министрҙың, район башлығының һәм баш табиптың яуаплылығында, - тип белдерҙе Радий Хәбиров. - Аңлайым, бәлки, кешенең кәйефе булмаҫҡа мөмкин. Әммә насар кәйефте өйҙә ҡалдырығыҙ. Һәм кешеләр менән матур мөнәсәбәттә булығыҙ. Юғиһә, тура эфирҙа баш табиптарҙы эштән ебәрә башлаясаҡмын".

Башҡортостан Башлығының ҡаты тәнҡитенән һуң Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин пациенттарға тупаҫ мөнәсәбәт күрһәткән медицина хеҙмәткәрҙәренә ҡарата етди саралар күреләсәге тураһында белдерҙе. "Медицина этикаһына һәм пациенттар менән әңгәмәләшеүгә ҡағылышлы һорауҙарҙа минең ҡараш принципиаль булып ҡала. Пациенттарына тупаҫлыҡ күрһәткәндәргә һәм бындай ҡылыҡтарға күҙ йомған етәкселәргә ҡарата ҡарарҙар ҡаты буласаҡ", - тип белдерҙе министр.

Пациентҡа ҡарата итәғәтле мөнәсәбәт - медицина хеҙмәткәре эшенең элементар нормаһы, әгәр етәксе был принциптарҙы коллективҡа еткерә алмай икән, "тимәк, беҙҙең юлдарыбыҙ айырыла" икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды министр. Унын әйтеүенсә, контролде көсәйтеү кәрәк булған учреждениелар билдәләнгән. Унан башҡа яҡын арала һаулыҡ һаҡлау системаһының барлыҡ хеҙмәткәрҙәре өсөн этика һәм деонтология һорауҙары буйынса өҫтәмә дәрестәр ойоштороласаҡ.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

**Әйткәндәй...**

**Билдәле дауалаусы Әбүғәлисина: "Ауырыу менән көрәшеү өсөн табиптың өс сараһы бар: һүҙ, үҫемлек, бысаҡ", - ти. Һүҙҙе ул беренсе урынға ҡуя. Гәзит уҡыусылар табиптарҙың тупаҫ һүҙе тураһында ни әйтер?**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЮЛДАР, ЮЛДАР...

**Баш ҡаланың төп урамдарының береһе һуңғы йылдарҙа водителдәрҙе иң ныҡ көйөндөргән участкаларҙың береһе булғандыр. Һәр хәлдә, күптән көтөлә ине Зәки Вәлиди урамындағы юлды тәрән колеяларҙан азат итеү һәм юл япмаһынан ҡалҡып сығып торған ер аҫты канализацияһы люктарын рәтләү.**



Ләкин был ғәмәлдең тиҙ генә башланып, тиҙ генә тамамланып ҡуйылырын берәү ҙә көтмәгәндер. Аҙ ғына ваҡыт эсендә юлдың иҫке асфальтын ҡырҙырғандан һуң, ике көн дә үтмәне, "Дортрансстрой"ҙың юл хеҙмәткәрҙәре Воровский урамынан Карл Маркс урамына тиклемге арала юлды яңыртып та ҡуйҙы. Эштәр башлыса төндәрен башҡарылды, хәрәкәт өсөн юлдың яртыһы ғына ябылып, автомобилистарға артыҡ уңайһыҙлыҡ тыуҙырылманы. Хәҙер юл һыҙаттарын һыҙып сығаһы һәм төрлө юл билдәләрен рәткә килтерәһе генә ҡалды. Шулай ҙа эшләп була икән дә!

Эйе, йәйҙәрен ҡалаларҙа һәм баш ҡалала юлдар һәм башҡа объекттар ремонтлана икәне ғәҙәти хәл. Өфө ҡала хакимиәтендә, мәҫәлән, был йәйҙә 14 юл участкаһы ремонтланасаҡ икәнен белдерҙеләр. Шуларҙың иң күләмлеһе, әлбиттә, әле генә телгә алынған Зәки Вәлиди урамындағы юл ине. Өфө - Аэропорт юлындағы колеяларҙан да биҙерәп бөткәйне водителдәр - унда ла эштәр тамамланды. Дим һәм Затондан Өфөгә илткән юлдарҙа, Менделеев һәм Пархоменко, Маршал Жуков урамдарындағы юл участкаларында ла асфальт ялтырап ята. Шулай уҡ Калинин һәм Киров районлары биләмәләрендәге баҡсасылыҡ ширҡәттәренә барыу юлдарын яңыртыу ҙа планлаштырыла. Билдәләнеүенсә, республика Башлығы һәм Хөкүмәте хуплауы менән ошо йылдар эсендә баҡсаларға илткән 36 км оҙонлоғондағы юл япмалары яңыртылған.

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов юлдар ремонтлағанда ҡала карьерҙары материалдарын да файҙаланырға кәңәш итте. "Был материалдар өсөн аҡса түгергә кәрәкмәй, бөгөн ҡала бюджетын экономиялау бик мөһим", - тине Рөстәм Динислам улы.

**Альмира ДӘҮЛӘТОВА.**

12+

ҠЫҪҠАСА

# ЯЛҒА ХОҠУҠ

**Ярҙам программаһы эшләй башлағандан алып Башҡортостан шифаханаларында 9,8 меңдән ашыу Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы һәм уларҙың ғаилә ағзалары реабилитация үткән.** Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская хәбәр итеүенсә, яугирҙарға ярҙам күрһәтеү республикабыҙ өсөн өҫтөнлөклө булып ҡала. 2023 йылдан башлап мөрәжәғәттәрҙең артыуы күҙәтелә. 2023 йылда 1787 кеше дауаланһа, 2025 йылда уларҙың һаны 3825-кә еткән. Ошо ваҡыт эсендә 10 меңгә яҡын кешегә ярҙам күрһәтелгән, шуларҙың 1925 - МХО яугирҙары, ә 7875-е - уларҙың ғаилә ағзалары. Реабилитациялау программаһында республиканың "Янғантау", "Красноусол", "Асы", "Танып", "Яҡтыкүл" һәм башҡа иң яҡшы шифаханалары ҡатнаша. МХО яугиры йәки уның туғаны юлламаны Башҡортостан Республикаһының Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы сайтындағы исемлектән үҙе һайлай ала.

✓ **Өфө ҡала советы ҡала мэры Ратмир Мәүлиевте вазифаһынан ситләтте. Был хаҡта 14 июлдә Өфө ҡала округы советының сираттан тыш 65-се ултырышында ҡала советы рәйесе Марат Вәсимов хәбәр итте.** Уның әйтеүенсә, ҡала советына Ратмир Мәүлиевтың дәүләт серен белеү хоҡуғын туҡтатыу тураһында рәсми белдереү ҡағыҙы килгән. Депутаттар бер тауыштан уның менән контрактты өҙөү тураһында ҡарар ҡабул итте. Һуңғы ваҡытта чиновниктар менән бәйле шау-шыу барыһына ла йоғонто яһай, был "бысраҡлыҡ" барыһында ла сағылыш таба, тип билдәләне депутат Павел Васильев. Ул сити-менеджерҙың әхлаҡһыҙ тәртибен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был коррупция ғауғаһын, ошо тәртипһеҙлекте туҡтатырға кәрәк, тип билдәләне депутат Юлай Моратов. Бынан алдараҡ хәбәр итеүенсә, Өфө мэры Ратмир Мәүлиев өйҙәге һаҡ аҫтынан азат ителде. Ул вазифа вәкәләттәрен саманан тыш файҙаланыуҙа һәм айыруса ҙур күләмдә ришүәт алыуҙа ғәйепләнә.

✓ **Үҙәк һайлау комиссияһы Дәүләт Думаһына һайлауҙар өсөн "Берҙәм Рәсәй" партияһынан кандидаттар исемлеген раҫланы. Партияға һайлау фондын ойоштороу өсөн махсус иҫәп асырға рөхсәт ителде. Был хаҡта Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы Макс каналында хәбәр итә.** Бынан алдараҡ Башинформ агентлығында уҙған матбуғат конференцияһында Дәүләт Думаһына һәм властың башҡа вәкәләтле органдарына һайлауҙар тураһында һөйләнеләр. Берҙәм тауыш биреү көнө йәкшәмбегә, 2026 йылдың 20 сентябренә, билдәләнгән. 18 һәм 19 сентябрҙә лә һайлау саралары үткәрелә. Агитация кампанияһы 22 августа башлана һәм 18 сентябргә тамамлана. Тынлыҡ көндәре ҡаралмаған. Тауыш биреүселәрҙең "Мобиль һайлаусы" сервисы менән файҙаланыу мөмкинлеге лә бар. Бының баҡсасылар өсөн көнүҙәк булыуы ихтимал. Бының өсөн комиссияға алдан ғариза бирергә һәм тауыш бирергә теләгән урынды күрһәтергә генә кәрәк.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БЕНЗИНҒА БӘЙЛЕ ХӘЛ




**Башҡортостан Башлығы БР Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республикала бензинға бәйле хәлгә аңлатма бирҙе. Уның һүҙҙәренсә, автомобиль яғыулығы баҙарындағы хәл "халыҡты ныҡ борсой һәм көслө ризаһыҙлыҡ тыуҙыра".**

"Уҙған аҙнала беҙ заправкаларҙы тәьмин итеү өсөн тейешле саралар күрҙек. Трассаларҙа, ҙур ҡалаларҙа һәм тораҡ пункттарҙа, Өфөлә хәлде тотороҡландырҙыҡ, ләкин алыҫ райондарҙағы һәм ҡайһы бер ауыл биләмәләрендәге хәл мине бик борсой. Хәҙер ураҡ өҫтө башлана, ҡайһы бер ауылдарҙың заправкаларында дизель юҡ. Беҙгә ошо хәлде махсус контролдә тоторға кәрәк", - тине Радий Фәрит улы.

БР Хөкүмәте вице-премьеры - сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев һүҙҙәренсә, 10 июлдән АЗС-тарҙа автомобилдәрҙең артыуы күҙәтелә. "Был 26-28 июндәге күрһәткестәрҙән кәмерәк, әммә шул уҡ ваҡытта водителдәргә ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. Шәхси АЗС-тар биржала яғыулыҡ һатып алыу менән ҡыйынлыҡтар кисерә, шуға күрә ошо компанияларҙың яғыулыҡ ҡойоу станциялары ябыҡ. "ЛУКОЙЛ-Уралнефтепродукт"тың логистик ҡатмарлыҡтар арҡаһында үҙенең заправкаларында физик шәхестәргә бензин биреүҙе кәметеүе лә был хәлгә йоғонто яһаны. Райондарҙа республиканың власть органдары һәм муниципаль хакимиәттәр менән берлектә хәлде контролдә тотабыҙ. "ЛУКОЙЛ-Уралнефтепродукт" поставкаларҙы иҫәпкә алып АЗС-тарға бензин оҙатыуҙы арттырырға ниәтләй", - тип белдерҙе Шельдяев.

Башҡортостан Башлығы идара итеү командаһына ҙур нефть эшкәртеү заводтары менән тығыҙ эш алып барырға ҡушты. "Беҙҙең биләмәлә ике ҙур нефть эшкәртеү үҙәге - ГПНС һәм "Башнефть" бар. Беҙҙә яғыулыҡ булһын өсөн улар менән эште дауам итергә кәрәк. Ошо предприятиеларҙың эшләүенә ҡарамаҫтан, ни өсөн беҙҙә бензиндың етмәүе халыҡта аптырау тыуҙыра", - тине Радий Хәбиров.

# СИЛӘБЕГӘ - ЯҢЫ ВӘКИЛ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең указы менән Искәндәр Юлдашевты Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге вәкиле итеп тәғәйенләне.**

Документ 2026 йылдың 2 июлендә көсөнә инде. Искәндәр Юлдашев яңы вазифала Башҡортостан менән Силәбе, Свердловск, Ҡурған, Төмән өлкәләре, Пермь крайы араһында сауҙа-иктисади, социаль һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе нығытыу, шулай уҡ Уралда һәм Себерҙә башҡорт йәмәғәт ойошмаларының эшен координациялау өсөн яуап бирә. Искәндәр Хисмәтулла улы Юлдашев 1983 йылдың 9 ноябрендә Мәскәүҙә тыуған. Дәүләт власы органдарында һәм йәмәғәт ойошмаларында эшләү тәжрибәһе ҙур. 2006 йылда "Юриспруденция" һөнәре буйынса Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Рус, башҡорт һәм инглиз телдәрен белә. Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты ярҙамсыһы, шулай уҡ республиканың Халыҡтар дуҫлығы йортонда һәм Рәсәй халыҡтары йортонда төрлө вазифаларҙа эшләй. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты етәксеһе, шулай уҡ Рәсәй башҡорттарының Федераль милли-мәҙәни автономияһы башҡарма директоры вазифаһын башҡара.

# ЯҢЫ ПРОКУРОР КИЛДЕ

**Башҡортостан Башлығы республиканың яңы прокуроры Иван Грибов менән осрашты. Уның менән республика етәксеһен Рәсәйҙең генераль прокуроры урынбаҫары Николай Шишкин таныштырҙы.**

"Иван Владимирович - тәжрибәле һәм компетентлы етәксе. Уның килеүе менән республика прокуратураһы яңы уңыштарға өлгәшер тип иҫәпләйем. Ведомство башлығы алдында торған иң төп бурыс - коллективтың эшен һәм власть органдары, халыҡ менән үҙ-ара килешеп эш итеүҙе ойоштороу. Дөйөм алғанда, беҙҙең эштәр төбәктең социаль-иктисади үҫешенә булышлыҡ итеүгә йүнәлтеләсәк", - тип билдәләне Николай Шишкин.

Республика Башлығы яңы прокурорҙы вазифаға тәғәйенләнеүе менән ҡотланы һәм эшендә уңыштар теләне. "Башҡортостан - күп милләтле ҙур төбәк. Алда бик күп бурыстар тора, уларҙың иң мөһиме - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү. Бынан тыш, иктисадтың һәм социаль өлкәнең тотороҡло эшләүе өсөн бар көсөбөҙҙө һалабыҙ, милли проекттарҙы һәм башҡа федераль программаларҙы тормошҡа ашырыуҙа әүҙем ҡатнашабыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Бының өсөн артабан да һәр яуаплы участкала законлылыҡты һаҡлауҙы тәьмин итергә кәрәк. Дөйөм бурысыбыҙ - уларҙың иртәгәһе көнгә ышанысы булһын өсөн социаль тотороҡлоҡто һәм халыҡтың тыныслығын һаҡлауға булышлыҡ итеү".

# ХӘҮЕФЛЕ ҺӨЖҮМ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров пилотһыҙ осоу аппараттары "Газпром нефтехим Салауат" предприятиеһына һөжүм итергә маташҡандан һуң Салауатта оператив штабтың ашығыс ултырышын үткәрҙе. Республика етәксеһе әйтеүенсә, был МХО башланғандан алып иң көслө һөжүм булған.**

32 пилотһыҙ осоу аппараты ГПНС биләмәһенә үтеп ингән, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы. Оборона министрлығы, предприятие һәм "БАРС" батальоны көсө менән 18 дрон юҡ ителгән, ҡалғандары йүнәлешен юғалтҡан. Әле Стәрлетамаҡ районы биләмәһендә пилотһыҙ осоу аппараттары ҡалдыҡтарын эҙләү менән шөғөлләнәләр. Башҡортостанда йәшәүселәрҙән уяу булыуҙарын һәм БПЛА ҡалдыҡтары тураһында хәбәр итеүҙәрен һорайҙар, сөнки уларҙың составында шартлаткыс матдәләр булыуы ихтимал. Һауа һөжүменә ҡаршы оборона эше һөҙөмтәһендә предприятиеләғы төп технологик объекттарҙың беренә лә зыян күрмәгән, тине Радий Хәбиров. Ярҙамсы эстакадалар, газ үткәргестәр һәм электр кабелдәре зыян күргән, был бер нисә урында янғын сығыуға сәбәпсе булған. Әлеге ваҡытта бөтә янғындар ҙа тиерлек һүндерелгән. Предприятие хеҙмәткәрҙәре араһында ҡорбандар юҡ. Тиҙҙән заводта тәүлек әйләнәһенә ремонт эштәре башлана.

Бындай һөжүмдәрҙең ҡабатланыуы көтөлә. Шуға бәйле хәүефһеҙлек системаһын көсәйтеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. "Беҙ пассив һәм әүҙем хәүефһеҙлекте артабан көсәйтеүҙе дауам итәбеҙ. Яҡын арала хәрби комплекттар килтереләсәк, ошондай һөжүмдәрҙең ҡабатланыуы мөмкин", - тип йомғаҡ яһаны республика Башлығы.

**"Башинформ" материалдары файҙаланылды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Дошмандың пилотһыҙ осоу аппараттарының Салауат сәнәғәт зонаһына кире ҡағылған һөжүме эҙемтәләре Башҡортостанда яғыулыҡ менән бәйле хәлгә йоғонто яһамаясаҡ. Республиканың сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры урынбаҫары Олег Тыщенко белдереүенсә, "Беҙҙең производство ҡеүәттәре төбәкте артығы менән тәьмин итергә мөмкинлек бирә, бынан тыш, запастар бар. Халыҡты борсолмаҫҡа, тыныс булырға һәм үҙебеҙ тыуҙырған ығы-зығыға бирелмәҫкә саҡырам. Яғыулыҡ етерлек күләмдә буласаҡ".

✓Рәсәй Президенты бер нисә яҡташыбыҙҙы орден-миҙалдар менән бүләкләү, шулай уҡ маҡтаулы исемдәр биреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Өфө фән һәм технологиялар университетының факультет деканы Гөлфирә Абдуллина һәм Өфө фән һәм технологиялар университетының физика-техника институты кафедраһы мөдире Рим Вәлиуллин юғары квалификациялы белгестәр әҙерләүҙәге, ғилми-педагогик эшмәкәрлектәге ҡаҙаныштары һәм күп йыллыҡ намыҫлы эше өсөн II "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены миҙалын алды.

✓Башҡортостан хәбәрһеҙ юғалған һәр МХО яугирын эҙләйәсәк. Уларҙы өйҙәренә ҡайтарыу өсөн республика властары бар көсөн һаласаҡ. Республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. Башҡортостан Башлығы 10 июлдә Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһында Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкил Яна Лантратова менән осрашыуы хаҡында иҫкә төшөрҙө: "Вәкил менән башлыса МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү һәм, әлбиттә, әсиргә эләккән йәки хәбәрһеҙ юғалған ир-егеттәребеҙҙе ҡайтарыу тураһында һөйләштек. Был эште беҙҙең депутат Ирина Панькина координациялай. Һуңғы яугирҙы тапмайынса, тынысланмайбыҙ, тинем", - тип билдәләне Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров.

✓"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы акционерҙар йәмғиәтенең директорҙар советы рәйесе эшмәкәрлеге республика кимәлендә юғары баһа алды. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Фәнүр Йәғәфәровты тыуған көнө менән ҡотланы һәм һөҙөмтәле эше өсөн рәхмәт белдерҙе. Бынан алдараҡ агентлыҡ Фәнүр Йәғәфәровҡа хеҙмәттәрен таныу билдәһе итеп "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем тапшырылыуы тураһында хәбәр иткәйне.

✓Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға дәғүә итеүгә документтар ҡабул ителә. Конкурсҡа журналистар һәм авторҙар коллективы 2025 йылдың сентябренән 2026 йылдың августына тиклем баҫылған материалдарын тәҡдим итә. Ғаризаны 1 сентябргә тиклем тапшырырға.

✓ *Өфөлә ун йылдан ашыу "Беренсе тапҡыр - беренсе класҡа" тигән хәйриә акцияһы үткәрелеп килә. Уның маҡсаты - быйыл беренсе класҡа барырға тейешле етем балаларҙы мәктәпкә әҙерләргә ярҙам итеү.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# ХӘСТӘРЛЕК ҮҘӘГЕНДӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хеҙмәткәрҙәрҙе һәм ирекмәндәрҙе Өфө хосписының тыуған көнө менән ҡотланы.**

Өс йыл элек, 2023 йылдың июлендә, ул үҙенең тәүге пациентын ҡабул иткәйне. Ошо ваҡыт эсендә Өфөлә паллиатив ярҙам, хәстәрлек һәм мәрхәмәтлек үҙәге асылды, республика уның менән хаҡлы рәүештә ғорурлана. "Өс йыл элек ошондай иҫ киткес учреждение булдырҙыҡ. Ошо ваҡыт эсендә бында 2 меңдән ашыу оло кешегә һәм 500 балаға ярҙам күрһәтелгән, - тине Радий Хәбиров. - Хоспис коллективы ҡыҙыҡлы һәм сағыу. Ә иң мөһиме - һеҙ изге йөрәкле. Учреждение етәкселегенә, ирекмәндәренә рәхмәт. Был эш күп ваҡыт һәм көс талап итә, әммә бергәләп бик яҡшы эш башҡарабыҙ һәм үҙебеҙ ҙә яҡшыраҡ, таҙараҡ, изгелеклерәк була барабыҙ. Тыуған көнөң менән, хоспис!"

"Өфө хосписы" хәйриә фондының попечителлек советы рәйесе Каринә Хәбирова ла баш ҡала хосписы командаһына ҡотлау һүҙҙәре менән мөрәжәғәт итте.

# ӘЙҘӘ, ЯРҘАМ ИТӘЙЕК!

**Өфөлә ун йылдан ашыу "Беренсе тапҡыр - беренсе класҡа" тигән хәйриә акцияһы үткәрелеп килә.**

Уның маҡсаты - быйыл беренсе класҡа барырға тейешле етем балаларҙы мәктәпкә әҙерләргә ярҙам итеү. Мэриянан хәбәр итеүҙәренсә, әле ошондай 70-тән ашыу бала бар. Ирекмәндәр һәм теләгән һәр кем яңы рюкзактар, канцелярия кәрәк-ярақтары, китаптар, үҫтереүсе уйындар һәм уйынсыҡтар килтерә ала. Шулай уҡ 1 сентябрҙә, мәҫәлән, аниматорҙар, һый-ниғмәттәр йәки биҙәүестәр килтереп, балалар өсөн байрам ойоштороуҙа ярҙам итергә мөмкин. Тулыраҡ мәғлүмәтте һәм һорауҙарға яуапты хаттың темаһына "1 сентябрь" тигән билдә менән ufajurav@mail.ru электрон почтаһы аша алырға мөмкин.

# ТАШБАҠАЛАР ҠАЙҘАН КИЛГӘН?

**Яҡутов паркындағы өйрәк, күгәрсен, балыҡ, хатта бер нисә ташбаҡа ла йәшәгән Һалдат күленең йәшел төҫкә инеүе һәм еҫләнеүе ҡала халҡын борсоуға һалды.**

"Башинформ" журналисы Совет районы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенә ни өсөн күл "сәскә атҡан", парк хакимиәте уны норматив хәлгә килтереү өсөн нимә эшләйәсәк һәм ҡасан булыр тигән һорауҙар менән мөрәжәғәт итте.

Муниципалитетта белдереүҙәренсә, әлеге ваҡытта һыу объектының таҙалығын контролдә тотоу көсәйтелгән. Парк хеҙмәткәрҙәре көн һайын иртән күлде ләмдән, сүп-сарҙан таҙарта. Һыу өлгөһө алынған, был уның сифатын контролдә тоторға һәм теләһә ниндәй үҙгәрештәргә ваҡытында яуап бирергә мөмкинлек бирәсәк. Ял итеүселәр әйтеүенсә, һыу яҡтылығының бысраныуына ҡоштарҙы ашатырға килгән граждандар ҙа йоғонто яһай. Икмәк валсығы ваҡыт үтеү менән күл төбөнә төшә. Шуға күрә өфөләрҙе һәм баш ҡала ҡунаҡтарын паркта ҡоштарҙы ашатмаҫҡа саҡыралар.

Әйткәндәй, элек бында ташбаҡалар булмаған. Өйҙә тотмаҫ өсөн кемдер уларҙы бында килтергән, тип фаразлайҙар. Улар ҡыҙыл ҡолаҡлы ташбаҡа. Уларҙы башындағы ҡыҙыл йәки ҡыҙғылт- һары һыҙаттарҙан, шулай уҡ баш, муйын һәм аяҡтарындағы ҡара һәм асыҡ һыҙаттарҙан торған биҙәктән танырға мөмкин. Ҡоро ерҙә йылынырға яраталар, әммә күпселек ваҡытын һыуҙа үткәрәләр.

# ЙӘШТӘРГӘ ФӘҺЕММЕ?

**"Рәсәй - Минең тарих" тарихи парктарында Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнөнә арналған саралар үтте.**

Парктың Өфөләге филиалында ҡунаҡтар өсөн акция ойошторолдо: уларға бер нисә темаға экскурсиялар тәҡдим ителде - совет кешеһенең көндәлек тормошо, XVIII-XIX быуаттарҙа рус дворяндарының йолалары һәм көнкүреше. Шулай уҡ килеүселәр өсөн "Ғаилә бетеүе"н булдырыу буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрелде. "Рәсәй - минең тарих" тарихи парктар ассоциацияһы директоры Иван Есин һыҙыҡ өҫтөнә алыуынса, ойоштороусылар ошо рәүешле килеүселәргә, айырыуса йәштәргә бәхетле тормоштоң нигеҙе булған мөхәббәт һәм тоғролоҡтоң әһәмиәтен күрһәтергә теләй һәм быны илдең тарихи контексты аша аңлатыу мөмкинлеген тормошҡа ашыра.

# БЕҘҘӘ ҠЫЙЫУ ҠЫҘҘАР

**Өфөнән тәжрибәле велосәйәхәтсе Ксения Салазанова Төньяҡ Боҙло океанға сәйәхәткә юлланған.**

Юлда ҡыйыу ҡыҙ палаткала төн үткәрә йәки үҙенең таныштарында туҡтай. Старт урыны - Валериан Альбанов исемендәге музей. Ксения һөйләүенсә, Архангельск өлкәһенең Северодвинск ҡалаһына тиклем маршрутка уны танылған яҡташыбыҙҙың тарихы илһамландырған. "Маҡсат: Төньяҡ Боҙло океанды күреү, һауаһын һулау. Төньяҡҡа юл тотам! Юлдың дөйөм оҙонлоғо - яҡынса 2000 саҡрым. Алдан бер нәмә лә әйтә алмайым, үҙемдең көсөмә, мөмкинлектәремә ҡарайым", - тип яҙҙы велосәйәхәтсе үҙенең телеграм-каналында. Өфөгә Ксения Вологда аша поезд менән ҡайтырға уйлай. Әйткәндәй, спортсы алыҫ маршрутҡа беренсе тапҡыр ғына сыҡмай. Мәҫәлән, былтыр ул Сахалин буйлап (утрауҙың төньяғынан Көньяҡ Сахалин ҡалаһына тиклем) 840 километр юл үткән.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# УЛ - БУЛАСАҠ ОФИЦЕР



**МХО ветераны Радмир Әбүталипов хәҙер - Түбәнге Новгород юғары хәрби-инженер команда училищеһы курсанты. Был уҡыу йорто буласаҡ инженер ғәскәрҙәре офицерҙарын һәм пилотһыҙ системалар буйынса белгестәр әҙерләй.**

Радмир 20 йәшендә үҙ теләге менән Махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт итә башлай. Хәҙер уға 22 йәш. Егет үҙе әйтеүенсә, был ҡарарға ул үҙе килә һәм быны менән ғорурлана.

- Мин әсәйемә Махсус хәрби операция зонаһына юлланыуым тураһында әйтмәнем. Полигонда бер ай әҙерлек үткәс кенә хәбәр иттем. Әлбиттә, ул ныҡ хафаланa, айырыуса бәйләнешкә сығып булмаған саҡта әҙгәләнә икәнен беләм. Яраланып, госпиталгә эләккәндә, уның менән бер ай һөйләшә алманыҡ, - ти буласаҡ офицер.

Тәүге тапҡыр ул йәрәхәтте мототөркөм менән яралыларҙы эвакуациялауға алып сыҡҡанда ала. Яугирҙар дошман БПЛА-һы һөжүменә дусар була. Хәрбиҙәргә ҡараңғы төшөүен көтөргә тура килә. Әммә, төн тип тормай, тағы FPV-дрон килеп төшә. Радмир шунда, үҙе әйтеүенсә, еңелсә яралана.

Икенсегә алғы һыҙыҡта торған иптәштәрен алмаштырырға барғанда йәрәхәтләнә. Алдан атлаған яугир шартлатҡысҡа бәйләнгән йәшерен сымға баҫа. Радмир шул мәлдә, боролоп, ике аҙым яһай, ләкин ергә ҡолап өлгөрмәй. Ярсыҡтар уға ла эләгә.

Тыуған көнөндә яугир ВСУ контроле аҫтында булған 700 метр асыҡ ерҙән штурмлау төркөмөнә боекомплекттар алып барып еткерә. Шул рәүешле Радмир Әбүталипов командирҙың бойороғон теүәл үтәй, штурмовиктар кәрәкле боеприпастар ала. Ошо батырлығы өсөн ул IV дәрәжә Георгий тәреһе менән наградлана.

Шулай итеп, буласаҡ хәрби-инженер һәм пилотһыҙ системалар буйынса белгес киләсәген Рәсәй Армияһы менән бәйләргә ҡарар иткән. Бөгөн йәштәр, ғөмүмән, Ватанға хеҙмәт итеүҙе өҫтөн ҡуя. Бигерәк тә пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре сафына эләгергә теләүселәр һаны арта. Бөгөнгә көндә Махсус хәрби операция биләмәһендә дрондар ярҙамында ҡуйылған хәрби бурыстарҙың 80 проценты үтәлә. Шуға ла Юғары баш командующий Владимир Путин һәм оборона министры Андрей Белоусов ҡарары менән Рәсәй Армияһында махсус подразделениелар булдырылған. Улар ғәскәрҙәрҙең яңы элиталы төрө һанала. Башҡортостанда ла пилотһыҙ системалар ғәскәренә йыйыу әүҙем бара.

БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин. Шулай уҡ быны Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була. Ғариза Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша ла ҡабул ителә.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Үҙәк банк ял көндәрендә төп валюталарҙың курсын ҡапыл күтәрҙе. Дүшәмбе, 13 июлгә, долларҙың курсы - 76,6 һум, евро 84,6 һум кимәлендә билдәләнде. 10 июлдән доллар 73 тингә, евро 1,07 һумға артты. Биржала акциялар, ҡиммәтле металдар, аҙыҡ-түлек сеймалы, энергия сығанаҡтары һәм яғыулыҡ һатҡанда йәки һатып алғанда иҫәп-хисап ошо валюталар ярҙамында башҡарыла. Юандең курсы ла артты, әле ул 11,3 һумға һатыла (+14 тин).

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең Фән һәм юғары белем биреү министрлығының "Юғары пилотаж" подкастында ҡатнашты. Әңгәмә барышында төбәк етәксеһе университеттар менән үҙ-ара эш итеүгә ҡарашы менән уртаҡлашты һәм республикала юғары белем биреүҙе үҫтереү, кампус инфраструктураһын үҫтереү һәм һәләтле йәштәрҙе фәнни һәм мәғариф өлкәләренә йәлеп итеү мәсьәләләре хаҡында һөйләне. Радий Хәбиров даими рәүештә университет кампусына йөрөй һәм студенттар, уҡытыусылар менән аралаша, был уға белем биреү мөхите ихтыяждарын шәхсән баһаларға мөмкинлек бирә.

✓Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө уңайы менән Бөрөлә республика фестивале уҙҙы. Башҡортостан Башлығы ишле ғаиләләргә дәүләт наградалары тапшырҙы. Йылайыр районынан 10 бала әсәһе Фәнзиә Таҡалова, шулай уҡ Нефтекаманан 10 бала әсәһе Анжелика Шумутбаева "Герой-әсә" исемен алды. Башҡортостандың йәнә алты күп балалы ғаиләһе "Ата-әсәлек даны" ордены һәм ошо ордендың миҙалы кавалерҙары булды.

✓Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығынан ураҡ кампанияһының башланыуы тураһында хәбәр иттеләр. Илеш районында ужым рапсын сабыуға төшкәндәр. Тимәк, тиҙҙән башҡа субтөбәктәрҙә лә ошо майлы һәм башҡа культуралар өлгөрә, һәм барыһы ла уңыш йыйыу эшенә тотона. Шуның менән бергә мал аҙығын әҙерләү дауам итә. Хәбәр иткәнебеҙсә, яуым-төшөмдөң күп булыуына бәйле хәҙер сенажға баҫым яһала. Тупаҫ һәм һутлы мал аҙығы әҙерләнгән - пландың 42 проценты үтәлгән.

✓Республикала эш урынында имгәнгән хеҙмәткәрҙәргә ярҙам итеү программаһы дауам итә. Рәсәй Социаль фондының республика буйынса бүлексәһе ун яҡташыбыҙға махсус йыһазландырылға Lada Granta машиналарын тапшырҙы. Уларҙың күбеһе программала тәүге тапҡыр ғына ҡатнашмай һәм дәүләт ярҙамын юғары баһалай. Автомобиль 7 йылға бирелә. Ошо ваҡыт үткәндән һуң медицина күрһәтмәләре һаҡланған осраҡта машинаны яңыһына алмаштыралар. Транспортты алыу өсөн ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша йәки Рәсәй Социаль фондының республика буйынса бүлексәһенең клиенттар хеҙмәтенә бирергә мөмкин. Өҫтәмә мәғлүмәт өсөн телефон: 8-800-100-00-01.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ҺҮГЕНЕҮ ХАҠЫ НИ ХАҠ?



**Мәғлүмәт сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, илдәге яғыулыҡ көрсөгө арҡаһында 11 июлгә ҡарата бензинға сираттар Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе, шулай уҡ Тула АЗС-тарында бер аҙ кәмеүгә бара. Силәбелә хәл түҙерлек, тиҙәр, Өфө менән Ҡаҙанда урыны менән сираттар һаҡлана әле. Ә бына Һарытау менән Волгоград һәм башҡа өлкәләрҙә сираттар оҙаҡҡараҡ һуҙылырға оҡшай.**

Росстат мәғлүмәттәре буйынса, АИ-92 менән АИ-95 маркаларына бензинға хаҡ йыл башынан алып ҡарағанда 14 процентҡа ҡиммәтләнгән. Рәсәйҙең өс төбәгендә АИ-92 100 һумдан артып киткән, ә дизель яғыулығы хаҡы 3,4 процентҡа артып, 87,76 һумға еткән. Мәсәлән, иң ҡиммәте Ҡырым Республикаһында - АИ-92 - 123,53 һум, АИ-95 - 170,59 һум; Севастополдә - АИ-92 - 105,47, ә АИ -95 - 148,64 һум. Бынан бер аҙна элекке мәғлүмәт буйынса, иң арзан яғыулыҡ Омск өлкәһендә булған: АИ-92 - 61,33 , ә АИ-95 - 66,58, АИ-98 - 84,74 һум. Үкенескә, 6 июлдә илдәге иң ҙур предприятиеларҙың береһе - йылына 20,5 млн тонна ҡеүәтле Омск нефть эшкәртеү заводы украин дрондары һөжүменә дусар ителде һәм әле уның эҙемтәләрен бөтөрөү эштәре бара. Ярославль һәм Ырымбур өлкәләрендә, шулай уҡ Башҡортостанда, Коми һәм Удмурт республикаларында АИ-95 маркаһына хаҡ 70 һумдан кәм тәшкил иткән. Шул уҡ ваҡытта бер үк ҡаланың төрлө АЗС-тарында төрлө хаҡтар күҙәтелә. Хаҡтар арзаныраҡ станцияларҙа, ғәҙәттә, сираттар оҙон була, уның ҡарауы, бензин тиҙ бөтә. Илдән 25-ләгән субъектында лимит иғлан ителгән һәм кәнистргә бензин ҡойоп алыу тыйылған.

Сираттар оҙонға һуҙылған урындарҙа, тәбиғи, талаш-тауыш, бәхәс һәм тиргәшеүҙәр күбып китеүсән. "Московский комсомолец" гәзите яҙып сығыуынса, Чита ҡалаһындағы сираттарҙың береһендә ике кеше талашып китә һәм беренсеһе икенсеһенә яман итеп һүгенә. Эш судҡа барып етә. Үҙегеҙгә мәғлүм - бөгөн ниндәй генә "ҡыйыш" ғәмәлдәр өсөн штраф ҡаралмаған! Шуларҙың иң күбеһе - юл хәрәкәте ҡағыҙҙәләрен боҙған водителдәрҙән түләтелә. Был бик дөрөҫ, сөнки юлдарҙа хәрәкәт ҡанундарын ғына боҙоп ҡалмай рулдә ултырған тәкәббер һәм үҙен генә ҡайғыртыусы һәрә водителдәр, йыш ҡына әхлаҡ-әҙәп ҡағыҙҙәләрен дә бар тип белмәй. Әлеге һүгенгән водителдән дә суд штраф түләтә. 500 һум бик аҙ, әлбиттә. Башҡаса ауыҙынан шаҡшы һүҙҙәр сыҡмаҫлыҡ сумма кәрәк ине лә бит яза хаҡы...

Бына шулай, бер ямандың - бер яҡшыһы, тигәндәй, һүгенгән өсөн бөтә урындарҙа ла штраф түләтелһә, үәт йыйылыр ине ҡаҙнаға миллиондар! Үкенескә, кәмһетелеүсе яҡ та бындай осраҡтарҙа судлашып йөрөүҙе хуп күрмәйенсә, өндәшмәй ҡала, шуға ла һүгенергә яратыусылар үҙҙәрен иркен тота. Ғөмүмән, илдәге йәмәғәт урындарында, урамдарҙа һүгенмәгән ир-ат менән үсмерҙәр бар микән ул?..

**Фәйрүзә ИШБИРҘИНА.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# БАҠСАЛА РӘХӘТ, ЛӘКИН...



**Ихаталары шәхси машиналар менән нышып тултырылған, тынсыу, әҫе ҡаланан ҡасып, күптәр йәмле йәй көндәре баҡса участкалары, дачаларында тыныслыҡ таба. "Ине", тип тә өҫтәргә тура килә хәҙер, сөнки әлеге лә баяғы тыйыу һәм дә штрафтар әҙәм балаларын уларҙың тәбиғәт утраусығы - шәхси участкаларынан да барып тапты.**

"Дачамда ла тын алырға форсат ҡалмаҫ микән ней?" тип ауыр һулап ҡуйҙы күршем, 20 йыл "стажлы" уңған баҡсасы. Әйткәндәй, был күршебеҙ ниндәй генә йәшелсәләмеш үҫтермәй унда! Һәм йәй, көҙ буйы хәләл көсө менән үҫтергән уңышынан бөтөн подъезд халҡына өләш сығарып, таратып сыға, үҙенә лә ҡышҡылыҡҡа дачаһы мөгәрәбен лыҡа тултырып ҡуя. Бөгөн, картуфтың килоһы 80 һумдан ашып киткән мәлдә, был, әлбиттә, пенсионерҙың ғаилә бюджетына, шулай уҡ балаларының тормош хәленә ҙур ярҙам.

Ошо йылдың 1 июленән бөйомға ашырылыусы баҡса һәм дача тотоуҙағы үҙгәрештәр хаҡында бөйән итеп китеү кәрәктер, сөнки ошо яңылыҡтарҙы ишеткән әлеге йомарт күршебеҙ бик бойогоп йөрөй башланы, хәтта ғүмере буйы саф һауала рәхәтләнеп көн күргән баҡсаһын һатырға ниәтләүе, ләкин быға ҡулы бармауы хаҡында ла бошоноп һөйләп торҙо. Ә нимә көтә һуң ҡала фатирында бикләнеп ултырыуҙы хуп күрмәй, үҙ хеҙмәте менән ярҙамсы хужалығында көн күрергә тырышҡан пенсионерҙарҙы, мәҫәлән?

Хәҙер ябай баҡсасылар "ҡала яны күсемһеҙ милке" булған категорияға ҡараясаҡ икән дә баһа! Ә бит пенсионерҙарҙың күбеһенең "күсемһеҙ милке" гәҙәттәге 6 сотыйҙан да кәмерәк ерҙе биләй. Үҙгәрештәр иһә бер нисә мәсьәләнән тора: пенсионерҙың социаль ярҙамға ихтыяжынан алып, ер участкалары һәм капиталь төҙөлөш объекттарына һалымға тиклем.

Уйлап ҡарағанда, өлкән кешенең баҡсаһы менән уның пенсияһына өҫтәмә түләү араһында ниндәй уртаҡлыҡ булыуы мөмкин? Асыҡланыуынса, яңы үҙгәрештәрҙән күренеүенсә, туп-тура бәйләнеш бар икән. Хәҙер дәүләт социаль ярҙамға мохтаж иҫәпләнеүсе оло кешенең "ниндәй активтарға" эйә булыуын күҙ яҙҙырмай күҙәтә башлаясаҡ. Көлкө түгелме был? Эреле-ваҡлы дәүләт чиновниктарының зиннәтле әкиәт һарайҙарына тиң коттедж һәм дачалары менән сағыштырып буламы һуң инде пенсионерҙың "тауыҡ тәпәйендә" короллган, хужаһы менән бергә ҡартайып бөткән иҫке өйөн? Юҡ икән шул, адреслы социаль ярҙам системаһын ҡарағанда хәҙер пенсионерҙың ҡала яны милке уның "байлыҡ билдәһе" булараҡ баһаланасаҡ (!) һәм унан алынған килеме генә түгел, баяғы "тауыҡ кетәгендәй" өйөнөң квадрат метрҙарына тиклем иҫәпкә алынасаҡ, тиҙәр.

Артабан пенсияға өҫтәмә түләүҙәр, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә субсидия һәм башҡа ярҙам саралары түләү-түләмәү мәсьәләһе пенсионерҙың "активтарына комплексы анализ" үткәргәндән һуң ғына хәл ителәсәк. Баҡса йорто булған ҡайһы берәүҙәргә, "өҫтәмә күсемһеҙ милке" булыу сәбәпле, социаль түләүҙәр тәғәйенләнмәүе лә ихтимал, сөнки, властарҙың фекерләүе буйынса, был пенсионерҙың матди хәлен енеләйтеүсе фактор: йәнәһе, дачаны һатырға, ҡуртымға бирергә мөмкин, йә уңыш үҫтереп, килем алырға була, имеш. Баҡса участкаң, өйөң барлығын раҫлау өсөн элек килем хаҡында белешмә ҡағыҙы ла яраһа, хәҙер Росреестрҙан күсермә, һалым мәғлүмәттәре һәм хатта... көлгәнгә - көлкө - космостан спутниктар йә булмаһа, һауанан дрондар ярҙамында баҡса участкаһындағы капиталь төҙөлөш объекттары билдәләү кеүек тикшереү саралары ла эшкә ҡушыласаҡ, тип әйтелә был хаҡтағы положениела.

Бынаһы бер булһа, икенсе тема - штрафтар. Әлбиттә, бер генә эшсән, намыҫлы баҡсасы ла үҙ ерендә ҡый үләндәре үрсеүгә юл ҡуймай. Күптәренең баҡсаһы ялт итеп тора: тәртип һәм таҙалыҡ. Шулай ҙа төрлө кеше бар бит, ял итергә генә килеп, шашлыҡ ҡурып, музыка аҡыртып, эсеп-күңел асып ҡайтып киткәндәр ҙә бар. Ләкин пенсионерҙар улар иҫәбенән түгел, әлбиттә. Ә бына ял итергә яратыусыларҙың баҡсаларын

ҒАИЛӘЛӘР ИҒТИБАРЫНА

# НИНДӘЙ ТҮЛӘҮҘӘР ҒӘМӘЛДӘ?



**Әлеге ваҡытта Башҡортостанда 167 меңдән ашыу ғаилә төрлө пособиелар һәм түләүҙәр ала, тип хәбәр итә Рәсәй Социаль фондының республика буйынса бүлексәһе. Йыл башынан балалы ғаиләләргә 30,2 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән.**

Ярҙам бала тыуғансы уҡ башлана һәм ул бәлиғ булғансы дауам итә. Буласаҡ әсәләр ауырлы ваҡытта берҙәм пособиеға иҫәп тота ала. Бала тыуғандан һуң ғаиләгә бер тапҡыр бирелә торған түләү, йәш ярымға

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Әбйәлил районы дауаханаһының 47 йәшлек терапевы һаҡһыҙлыҡ арҡаһында үлемгә дусар итеүҙә ғәйепләнә. Башҡортостан буйынса Тәфтиш комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, табип ашығыс ярҙам менән килтерелгән 35 йәшлек пациентты ҡабул иткән һәм тиҙ арала операция яһарға кәрәкләгеен белмәгән, уға кардиология үҙәгенә йүнәлтмә бирмәгән. Уның урынына ҡабаттан тикшереү үтергә ҡушҡан. Пациент дауахана сираттағы тапҡыр килгәнендә аорта аневризмаһы шартлауҙан вафат булған. Тикшереү тамамланған, енәйәт эше судҡа ебәрелгән.

✓Йылайыр һәм Хәйбулла районарын, шулай уҡ республиканы Ырымбур өлкәһе менән тоташтырған юлда ремонт эштәре башланды. Юл эшселәре Яманһаҙ ауылы эргәһендәге 3 километр оҙонлоҡтағы участкала яңы асфальт түшәүгә тотондо, тип хәбәр иттеләр республиканың Транспорт министрлығынан. Уларҙың билдәләүенсә, бында хәрәкәт көслө - тәүлегенә 2,5 меңгә яҡын машина. Ремонт эштәрен 2026 йылдың аҙағына тиклем тамамлау планлаштырыла.

✓Баймаҡ районынан Земфира һәм Биктимер Рәжәповтар Башҡортостандың Республикаға идара итеү үҙәге һәм БСТ телеканалының "Беҙҙең ғорурлыҡ" тип аталған проектының яңы сығарылышы геройҙары булды. Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәжәповтарҙы уҙған йылдың йәйендә "Атаәсәлек даны" ордены менән бүләкләне. Ғаиләгә наградаһы республика етәксеһе Радий Хәбиров тапшырҙы.

✓Дом.РФ льготалы ипотека программалары операторы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда ғинуар-июнь айҙарында 657 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлә башлаған. Был күләм 2025 йылдың тәүге ярты йыллығына ҡарағанда 86 процентҡа күберәк. Ағымдағы йылдың апрель-июнь айҙарында 183 мең квадрат метр файҙаланыуға тапшырылған (2025 йылдың II кварталына 53 процент). Йәғни төҙөлөштәрҙең күпселек өлөшө йыл башында сафҡа индерелгән. Дөйөм алғанда, 1 июлгә Башҡортостанда торлаҡ төҙөлөшө портфеле яҡынса 3,6 миллион квадрат метр тәшкил иткән (2025 йылдың 1 июленә +5 процент).

✓12 июлдә AY YOLA төркөмө Красноярск крайында халыҡ-ара фестивалдә республика исеменән сығыш яһаны. Был хаҡта музыканттар үҙҙәренең телеграм-каналында хәбәр итте: "Тываның һәм Хакасияның иксеҙ-сикһеҙ далалары, Енисей менән Шушь йылғалары араһында, бороңғо ҡурғандар янында йыл да Халыҡ-ара этник музыка һәм кәсептәр фестивале ойошторолдо, унда бар донъянан меңләгән ҡунаҡ һәм йөҙләгән ҡатнашыусы йыйылды. Беҙ унда "Урал батыр" эпосын - быуаттар буйына телдән-телгә күсә килгән һәм беҙҙең музыкала йәшәүен дауам иткән тарихты алып барҙыҡ".

✓ Шуныһы йыуандыра: пенсионерҙарға, элеккесә, ер участкаһына һалым һалынмай; Рәсәйҙең күп төбәктәрендә пенсионерҙарға кадастр һәм межалау эштәре, юристар ярҙамы өсөн ташлама ҡаралған.



ҡый үләне баҫып киткеләй. Был йәһәттән закон ғәҙел талап ҡуя, айырыуса ағыулы иҫәпләнгән ҡырағай балтырған (борщевик) һәм ҡыуарған ағас-ҡыуаҡтар үҫкән баҡса хужаларына штраф 5 меңдән алып тиҫтәләгән меңгәсә барып етеүе ихтимал.

Баҡса ерендә хәҙер тәрән итеп ҡоҙоҡ ҡаҙҙырыу ҙа тыйыла, ә уны һанламағандарға шулай уҡ штрафтар янай. Элек баҡсалағы мунса, һарай, йәйге аласыҡ кеүек хужалыҡ ҡоролмалары капиталь төҙөлөш иҫәбенә индерелмәһә, хәҙер, әгәр улар бөгөнгө талаптарға яуап бирә икән, милексегә һалым суммаһы арттырыласаҡ.

Шулай уҡ мөһим темаларҙың береһе - баҡса ерендә усаҡ ҡабыҙыу, сүп-сар, ҡороған ағас-ҡыуаҡ, ҡойолған япраҡ яндырыу ҙа ҡәтғи тыйыла. Был ғәҙел талап, әлбиттә.

Яңы үҙгәрештәр менән бәйле күңелһеҙ хәлдәргә осрамаҫ өсөн юристар пенсионерҙарға шундай кәңәштәр бирә: баҡсағыҙҙағы төҙөлөш ҡоролмаларының статуһын билдәләгеҙ, йәғни, әгәр баҡса йорто теркәлмәгән булһа, ашығыс рәүештә Росреестрға ғариза яҙығыҙ; баҡсағыҙ сиктәрен аныҡлығыҙ, межалау хеҙмәтенә мөрәжәғәт итегеҙ, юғиһә, территорияғыҙ сиктәре арҡаһында күршеләр менән низағ килеп тыуыуы бик ихтимал. Ә был судлашыу йә булмаһа, "күрше ерен биләгән өсөн" штрафтар менән янай.

Ғөмүмән, яңы үҙгәрештәр менән һәр баҡсасы үҙе ентекләп танышып сығырға бурыслы, сөнки был хаҡта бәйнә-бәйнә яҙып сығыу өсөн күп ваҡыт һәм гәзит битенән урын сарыф ителер ине. Баҡсасылар өсөн штрафтар исемлеге генә лә ун бер статья буйынса һанап кителгән. Эйе, яңы тәртиптәрҙе үтәү өсөн көс һалыу, тырышлыҡ кәрәк, был баҡсасы тыныслығы һәм хәүефһеҙлеге өсөн мөһим.

Шуныһы йыуандыра: пенсионерҙарға, элеккесә, ер участкаһына һалым һалынмай; Рәсәйҙең күп төбәктәрендә пенсионерҙарға кадастр һәм межалау эштәре, юристар ярҙамы өсөн ташлама ҡаралған. Шулай уҡ йәйҙе баҡсаһында үткәреүселәр ҡала фатирына түләүҙе бер аҙ кәметә ала. Һүҙ электр энергияһы, эҫе һәм һыуыҡ һыу тотоноу, сүп-сар өсөн түләүҙәр хаҡында бара. Ҡала фатирында 5 көн рәттән йәшәмәгән хәлдә коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙе Күп функциялы үҙәк (МФЦ) йә идарасы компания (УК) аша ҡайтанан иҫәпләтергә мөкин һәм бының өсөн баҡсаға йөрөгән транспортта һатып алынған билеттар, Баҡсасылыҡ ширҡәте рәйесенән белешмә кәрәк. Пенсионерҙар өсөн элек милеккә һалым буйынса ташлама мәсьәләһе автоматик рәүештә башҡарыла торған булһа, хәҙер ғариза менән ваҡытында һалым инспекцияһына мөрәжәғәт итергә кәрәк, ти юрист Любава Трофимова. Юғиһә, ташламаға документтарҙы тәғәйен көнөнә тапшырмаған хәлдә, түләү квитанцияһы тулы күләмдә киләсәк һәм артыҡ түләнгәнде кире ҡайтарып алыу мәшәҡәтле эшкә әйләнәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

тиклем бала тәрбиәләү буйынса пособие, килеме түбән булған ғаиләләр өсөн берҙәм пособие (17 йәшкәсә балалар өсөн), Әсәлек капиталы ҡаралған. Ағымдағы йылдың тәүге ярты йыллығында Әсәлек капиталы аҡсаһынан айлыҡ түләүгә 593 миллион һумдан ашыу йүнәлтелгән.

Инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә балаға социаль пенсия, уны ҡарау буйынса түләүҙәр, шулай уҡ балаһын тәрбиәләү өсөн эшен ҡалдырған ата-әсәләргә пенсия гарантиялары ҡаралған.

1 июндән Рәсәйҙең Социаль фондында йыл һайын бирелә торған түләүгә ғаризалар ҡабул итеү башланды. Ике һәм унан күберәк балаһы булған һәм эшләп йөрөгән ата-әсәләр түләнгән НДФЛ-дың бер өлөшөн кире ҡайтарырға мөмкин. Республикала 32 меңдән ашыу кеше ошо хоҡуҡҡа эйә булды ла инде.

Пособиеларҙың күбеһе автоматик рәүештә йәки Дәүләт хеҙмәттәре аша тәғәйенләнә. Льготалар тураһында бушлай 8-800-100-00-01 номерына шылтыратып йәки "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында белергә мөмкин.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ТРАМП РӘСӘЙГӘ САНКЦИЯНЫ ХУПЛАЙ

**Үткән йәкшәмбелә Белгород өлкәһенең оператив төбәк штабынан хәбәр итеүҙәренсә, Украина ҡораллы көстәре (ВСУ) дроны Белгород өлкәһе Грайворон ҡалаһында велосипедта китеп барған 13 йәшлек балаға һөжүм итә. Йәрәхәттәр алған бала ауыр хәлдә дауаханала ята.**

Мәскәү мэры Сергей Собянин 12 июлдә хәбәр итеүенсә, баш ҡалаға яҡынлаған 5, унан һуң тағы 9 пилотһыҙ шартлатҡыс аппарат, ә унан алдараҡ, 7 июль төнөндә, Мәскәү өлкәһе төбәгенә осоролған 300-ләп дрон Һауа һөжүменә ҡаршы оборона көстәре тарафынан юҡ ителә. Шуларҙың 45-е туранан-тура баш ҡалаға йүнәлтелгән була. Донецк Халыҡ Республикаһында Украина ҡораллы көстәре пассажирҙар автобусына ут аса, һөҙөмтәлә 9 кеше йәрәхәттәр ала, ә 14 июлгә ҡарай тәүлек эсендә ошо уҡ төбәктә һигеҙ кеше, шул иҫәптән бер бала, украин дрондарынан һәләк булды, 10 кеше яраланды, тип хәбәр итә төбәк башлығы Денис Пушилин.

Күренеүенсә, ВСУ тыныс граждандар объекттарына һаман да күпләп ҡаныҡыуын дауам итә. 11 июлдән 12-һенә ҡарай төндә Мәскәү, Һамар, Тула, Ростов, Калуга, Курск, Воронеж - Рәсәйҙең барлығы 16 төбәге күгендә самолет рәүешендәге 349 пилотһыҙ дошман аппараты бәреп төшөрөлә. Үкенескә, тыныс халыҡ араһында яраланыусылар һәм зыян күреүсе торлаҡ йорттар байтаҡ.

Ә бына Украинанан 2,5 мең км арала ятҡан Омск нефть эшкәртеү заводына һөжүм төрлө фекерҙәр тыуҙырҙы. Хәрби осоусы, авиация генерал-майоры Владимир Попов дрондың Рәсәй һауа оборонаһы системаһы сәбәбенә эләкмәй генә шунса араны үтеп, Омскиға килеп етеүенә һәм аппараттың Украина территорияһынан осоролоуына шик белдерә. Уның фекеренсә, был ил эсендәге дошман агенттары һәм көнбайыш аҡсаһына ялланған урындағы һатлыҡ йәндәрҙең эше. Тимәк, ти эксперт, дрон Омскиға яҡын райондан ебәрелеүе бик ихтимал. Шуның өсөн "тыштағы" дошманға ғына түгел, эске дошманға ҡаршы ла көрәшергә өйрәнергә, уларҙы фашларға кәрәк.

Һәм, ысынлап та, ошо көндәрҙә Рәсәйҙең Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте Киев режимы тарафынан Силәбе менән Амур өлкәләре хәрби аэродромдарына дрондар һөжүме әҙерләнеүе хаҡында белеп ҡалып, дошмандың планын өҙҙө. Был террор актын башҡарырға тейешле әҙәмдәр һәм уларҙың ярҙамсылары тотолдо, Британия, АҠШ, Канада һәм Швецияла етештерелгән һәм һәр береһе килонан ашыу шартлатҡыс менән ҡоралландырылған 24 нейромодулле дрондар тартып алынды. Асыҡланыуынса, нацист агенттары туранан-тура көнбайыш кураторҙары етәкселегендә эш иткән. Тәүҙә FPV-дрондар махсус контейнерҙарҙа Украина сигенән Брянск олкәһенә килтерелгән һәм улар артабан ил төпкөлөнә - Амур менән Силәбе өлкәләренә ике ҡатлы йәшерен багажлы еңел автомашиналарҙа ташылған. Дрондарҙы ҡуртымға алынған гараждарҙа йыйып әҙерләй башлағандар.

Зеленскийҙың хәрби хәрәкәттәрҙе һауа киңлегенә күсереү ниәтен хуплағандай, Рәсәй өҫтөнә туҡтауһыҙ һәм күп күләмдә дрондар атакаһын Дәүләт Думаһында ла күрҙеләр, буғай, ниһайәт: Думаның оборона буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Алексей Журавлев әйтмешләй, Европа менән Америка Украинаны көн-төн ҡорал һәм дрондар менән тыңҡыслауҙан туҡтамайынса тороп, Рәсәй төбәктәренә дрондар яуҙырыу дауам итәсәк. "Бер генә юл бар: уларҙың ҡорал ташыу юлдарын, күперҙәрҙе, тоннелдәрҙе, тимер юл станцияларын юҡ итергә - ниһайәт, етди һуғыш алып бара башларға кәрәк", - тине Журавлев, депутаттар фекерен белдереп.

РФ Оборона министрлығы, 12 июлгә ҡарай төндә Рәсәй армияһы, Одесса өлкәһендәге ВСУ боевиктарының хәрби йөк ташыу объекты булған өс портын, диңгеҙ судноларын һәм паромды шартлатыуға өлгәште, тип хәбәр итте. Рәсәй армияһы был операцияла 13 ҡанатлы Х-59/69 ракетаһы менән радиолокацияға ҡаршы 2 ракета, шулай уҡ "Герань" дрондары ҡулланды. AIF.RU яҙып сығыуынса, дошмандың башҡа логистика һәм энергетика объекттары, хәрби-сәнәғәт комплекстары ла иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Ләкин бөтәһенән дә бигерәк Киевҡа тос эләкте, тип һығымта яһай подполье координаторы Сергей Лебедев. Бынан тыш, беҙҙең "Искәндәр" ауыр дрондар йыйыусы "Аэродрон" украин предприятиеһын ер менән тигеҙләне. Рәсәйҙең "Герань-4 Сикер" яңы дроны Сумы өлкәһендәге электр энергияһы станцияһын эштән сығарҙы. "Укрэнерго"етәксеһе Виталий Зайченко һүҙҙәренә ҡарағанда, МХО башланғандан алып РФ Ҡораллы Көстәре украин электр энергетикаһының 3 млрд долларлыҡ яртылаш объектын юҡ иткән. Һуңғы тәүлектәрҙә Рәсәй ғәскәре ҡыҫымында Украина Сумы өлкәһендә биләмәләренән ҡолаҡ ҡаға бара.

Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, ошо көндәрҙә Германия канцлеры Фридрих Мерц ауыҙынан бер йүнле һүҙ сыҡты: Украина буйынса килешеүҙәргә саҡырып, ул Европаның да был йәһәттән асыҡ булыуын әйтте һәм шул уҡ ваҡытта АҠШ булышлығында Мәскәүгә баҫымдың көсәйтелеү ниәтен дә хупланы. Әйткәндәй, Дональд Трамп Рәсәйгә санкцияны көсәйтеү хаҡында Конгресс тарафынан раҫланасак закон проектын ыңғай баһаланы. Шул да мәғлүм булһын ки: 17 июлдә АҠШ президенты "Милләткә мөрәжәғәт" менән сығыш яһамаҡсы.

Яҡын Көнсығыш темаһы ла һис ҡыуандырмай: АҠШ армияһы Иранға яңынан ут аса башланы. Дональд Трамп үҙенең был бойороғон "Иран көстәрен яуаплылыҡҡа саҡырыу" тип атаны. Шул уҡ көндө Иран яғы ла яуапһыҙ ҡалманы, Кувейттағы америка хәрби базаларын бомбаға тотто. 14 июлдән башлап Ирандың бөтөн порттары, судно һәм йөктәре диңгеҙ блокадаһына алынды. Башҡа илдәр суднолары өсөн Ормуз боғаҙын асыҡ тип иғлан итеп, Дональд Трамп уларҙан "хәүефһеҙлек өсөн" 20 процент йыйым түләтмәксе. Бынан өс аҙна элек хәрби конфликтты туҡтатыу тураһында Иран менән АҠШ араһында ҡул ҡуйылған меморандумдың төп ике пункты - Ливан мәсьәләһе менән Ормуз боғаҙында утты туҡтатыу буйынса тулыһынса көйләүгә килә алмауҙа Politico баҫмаһы АҠШ вице-президенты Джей Ди Вэнсҡа яуаплылыҡ йөкмәтә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Миңлеғәле Шайморатов исемендәге Ирекмәндәр штабы һәм Башҡортостандың "Ватан яугирҙары ғаиләләре" комитеты 2025-2026 йылдарҙағы эштәргә йомғаҡ яһаны. Штаб һәм Комитет етәксеһе Эльвира Мацкевич хәбәр итеүенсә, был ваҡыт эсендә штабтарға ҡатнашыусыларҙың ғаилә ағзаларынан 19 меңдән ашыу мөрәжәғәт килгән, 5 728 ғаиләгә ярҙам күрһәтелгән. Шайморатовтың штабтары хәҙер ҡеүәтле логистик һәм производство үҙәктәренә әүерелгән. 2025-2026 йылдарҙа йөҙләгән гуманитар конвой ойошторолоп, фронтҡа 294 берәмек техника ебәрелә.

✓ Өфөнөң Йәмәғәт именлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре 14 июлдән ҡаланың яғыулыҡ ҡойоу станцияларында рейдтар үткәрә башланы. Уларҙың төп маҡсаты - ҡайһы бер водителдәрҙең бензинды канистрҙарға, пластик шешәләргә һәм башҡа һауыттарға ҡойоп алыуына юл ҡуймау, тип белдерҙеләр баш ҡала мэрияһында. Инспекторҙарҙың иғтибар үҙәгендә - 30 заправка. Йәмәғәт именлеге үҙәге саралары хәүефһеҙлекте тәьмин итеүгә һәм яғыулыҡ баҙарындағы ажиотажды кәметеүгә йүнәлтелгән. Халыҡҡа тикшереүҙәргә аңлап ҡарарға һәм билдәләнгән ҡағиҙәләрҙе үтәргә кәңәш итәләр.

✓ Өфөлә Уҡыусыларҙың спорт гимнастикаһы буйынса йәйге спартакиадаһы финалы башланды. Спорт гимнастикаһы буйынса турнирҙа Рәсәйҙең 32 төбәгенән 134 гимнаст ҡатнаша. Башҡортостан исеменән 5 спортсы сығыш яһай, тип хәбәр иттеләр республика Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Турнир программаһында - команда ярыштары, күпбәйге һәм айырым төрҙәрҙә финалдар. Иң яҡшы спортсылар Рәсәйҙең йәштәр йыйылма командаһына инеү мөмкинлегенә эйә була.

✓ "Газпром межрегионгаз Өфө" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры Альберт Лоҡманов республика Хөкүмәтенең аҙналыҡ кәңәшмәһендә быға тиклем газ үткән тораҡ пункттар сиктәрендә урынлашҡан йорт хужалыҡтарын, баҡса ширҡәттәрен һәм социаль объекттарға газ үткәреү барышы тураһында хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, ошо программа буйынса бөтәһе 89,5 меңдән ашыу ғариза алынған, газ бүлеү сел-тәрҙәре 83 мең йорттоң сигенә еткерелгән. Баҡса ширҡәттәрендә газ үткәреүгә халыҡтан 4,6 меңдән ашыу ғариза ҡабул ителгән, селтәрҙәр 2 751 йорт сигенә тиклем еткерелгән, 1 463-ө зәңгәр яғыулыҡ менән тәьмин ителгән.

✓ "Победа" авиакомпанияһы 4 июлдән Өфөнән Истанбулға рейстар асты. Баш ҡала аэропорты мәғлүмәттәре буйынса, улар дүшәмбе һәм шәмбе көндәрендә Boeing 737 самолеттарында башҡарыла. Юлда булыу ваҡыты - 4 сәғәт. Әлеге ваҡытта Өфөнән Истанбулға Utair һәм Red Wings авиакомпаниялары самолеттарында осорға мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Бала тыуғас та уның күңел донъяһы үҫә башлай. Әлбиттә, беҙ уны күҙәтә лә, төҙәтә лә алмайбыҙ, әммә ошо хәҡиҡәтте белгәндән һуң, уға күңел донъяһын үҫтереүгә ҡамасаулаусы нәмәләрҙе булдырмау ҡулыбыҙҙан килә.*



ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ



Константин УШИНСКИЙ

# БАЛА ТӘРБИӘҺЕ

## Ғәҙәт ябай сифат түгел

**Ғәҙәт, тип, бығаса баланың холҡонда булмаған, әммә аҙаҡ барлыҡҡа килгән сифаттарын әйтәбеҙ: әйтәйек, һалҡынға, эҫегә, шау-шыуға, һелкенеүгә, ауыртыуға һәм башҡаларға өйрәнеп, күнегеп китеү. Ундай ғәҙәтте һүлпән ғәҙәт тип атарға мөмкин. Бындай һынауҙарҙы элегерәк күтәрә алмаһа ла, хатта сәләмәтлегенә зыян килерлек булһа ла, даими ҡабатланып торғанлыҡтан, кеше уға күнегеп китә. Шулай итеп, кеше тәүҙәрәк түҙеп торғоһоҙ булған эҫегә лә сыҙай башлай, хатта өйрәнмәгән кеше өсөн үлемесле булған күләмдәге ағыуға ла күнегә.**

Кеше аҙ-аҙлап күнекмәләр үткәреү арҡаһында ауыр әйбер күтәрә, арымайынса бик оҙаҡ йөрөй ала, тиҙ һәм дөрөҫ итеп хисапларға өйрәнә, башҡа төр аҡыл хеҙмәте менән шөғөлләнергә лә ғәҙәтләнеп китә. Ғәҙәткә инеп киткән бындай күнекмәләрҙе башҡарыу өсөн уны аңлау, фекерләү мохтажлығы юҡ. Ғәҙәт ни тиклем иртәрәк башлана - шул тиклем тотороҡлораҡ була. Йәшерәк кеше яңы ғәҙәттәргә тиҙерәк күнегә һәм шулай уҡ еңелерәк онота ла.

Ғәҙәт беҙ уйлағанса ябай сифат түгел. Ҡабат-ҡабат эшләнгән күнекмәләр генә ғәҙәткә әйләнеп китә. Әлбиттә, сабый ваҡытта бала тыуымыштан булған күнекмәләр менән эш итә: күреү, илау, ашау, ауыртҡан ерҙе ҡул менән һыйпау, ҡысҡырыу һәм башҡалар. Телебеҙ асылмаған саҡта башҡарылған күнекмәләр аҙаҡ та тороп ҡала, әммә уның ҡасан һәм нисек башланғанлығын беҙ хәтерләмәйәсәкбеҙ. Әммә шуныһы асыҡ: теле асылмаған баланың хәтере була. Сөнки сабый даими аралашҡан кешеһенең йөҙөн, тауышын һәм башҡаларҙы хәтерләй. Беҙгә тағы бик мөһим нәмәне зиһенебеҙгә һеңдерергә кәрәк: бала физик яҡтан ғына үҫешмәй, ул тыуғас та уның күңел донъяһы ла үҫә башлай. Әлбиттә, күңел донъяһының үҫешен беҙ күҙәтә лә, төҙәтә лә алмайбыҙ, әммә ошо хәҡиҡәтте белгәндән һуң, уға күңел донъяһын үҫтереүгә ҡамасаулаусы нәмәләрҙе булдырмау ҡулыбыҙҙан килә. Уға ҡарата тыныс һәм матур мөнәсәбәт булдыра алабыҙ. Баланың теле асылғанға тиклем үк күреп таныған кешеләре уға ныҡ тәьҫир итә һәм зиһенендә уйыла. Уға булған тәүге мөнәсәбәттәр артабан уның башҡаларға булған мөнәсәбәтенә тәьҫир итә. Әгәр инде уның тәүге күргәне йылмайып торған Әсәһе булһа, сабый өсөн оло бәхет.

Сабыйҙың тәүге йылмайыуы, ҡулдарын һуҙыуы, әсәһе менән атаһын таный башлауы - был үҙгәрештәрҙең бала өсөн ниндәй көс талап иткәнлеге беҙгә билдәһеҙ. Ул һөйләшә башлау менән зиһене яҡтыра барасаҡ һәм теле асылғанға тиклем булған үҫеш артабан бергә бәйләнеп китәсәк. Шулай итеп, баланың теле асылғанға тиклем алған тәьҫораттары артабанғы тотош тормошона нигеҙ була. Ошо ваҡытта алған тәьҫораттарҙан сығып, уның кешегә һәм тәбиғәткә булған мөнәсәбәте - ғәҙәте билдәләнә. Баланың ғәҙәте аша уның күңел донъяһына тәьҫир итеп була.

**(Дауамы. Башы 24-27-се һандарҙа).**

*ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# АЙНА НИСЕК ЯРҘАМ ИТӘ?




**Яһалма интеллект нигеҙендә төҙөлгән махсус Айна-агенттар авторҙарға, мөхәррирҙәргә, уҡытыусыларға һәм журналистарға ярҙам итергә әҙерләнә.**

***ЯИ-КӨФӨ:*** Рөстәм бабай, үткән аҙналағы әңгәмәлә текстарҙы эшкәртеүсе веб-ҡушымта яҙабыҙ, төрлө сценарийға көйләнгән утыҙға яҡын Айна-агент (промпт) төҙөлгән, тигәйнегеҙ. Нисек шул хәлгә төштөгөҙ?

***Рөстәм Нурыев:*** Апрель айында Айгиз Ҡунафин ("Һомай" аҡыллы колонкаһын төҙөүсе AI-белгес һәм программист) менән Йошкар-Ола ҡалаһында үткәрелгән яһалма интеллект буйынса конференцияға бергә барҙыҡ. Ул миңә: "Рөстәм ағай, һин үҙеңдең "көҙгөләге дуҫ методикаһы" нигеҙендә ғәмәли ҡоралдар, ҡулайламалар яһа", - тип кәңәш итте. Шул көндән башлап нейроселтәр менән API аша аралашыу мөмкинлеген өйрәнеп, ЯИ-агенттары төҙөү менән мауығып киттем. Элек әңгәмә тәҙрәһе аша үҙем өсөн генә ярҙамсы ассистенттар, шәхси әңгәмәселәр булдырһам, хәҙер API аша күләмле эштәрҙе башҡарыусы, күмәк кешегә ярҙам итеүсе агенттар төҙөйөм.

Шулай итеп, текстар менән эшләү өсөн күп кенә аҡыллы ярҙамсылар йыйылып китте. Уларҙы дөйөмләштереп, "АйнаТекст" экосистемаһы тип атаным. Ни өсөн Айна? Айна - бик боронғо һүҙ. Төрлө халыҡтарҙа мәғәнәһе төрлөсә, әммә бер-береһенә бик яҡын. Япондарҙа - "мөхәббәт" + "йәшелсә", айн халҡында - "кеше", "ир-ат", "ысын кеше", фарсы телендә - "көҙгө", ғәрәптәрҙә - "күҙ", "ҡараш", "сығанаҡ", фин-уғыр халыҡтарында - "берҙән-бер", "шәхси", "даими" мәғәнәһендә. Төрки халыҡтарында "әйнә" булып, "сағылыш, көҙгө" мәғәнәһендә ҡулланылған. Этимология минең "Яһалма интеллект - кешенең көҙгөләге дуҫы" тигән методикаға тап килеп тора. Беренсе "Ай" ижеге инглиз телендәге "AI" (яһалма интеллект) төшөнсәһе менән ауаздаш та.

Бөгөнгө көнгә "АйнаТекст" экосистемаһына текстар менән эшләү өсөн утыҙҙан ашыу махсус ҡорал, ҡулайлама инә. Ҡайһылары тикшерелеп раҫланған, ыңғай баһа алған. Ҡайһылары һынау тоторға үҙ сиратын көтә. Киләсәктә улар тағы ла күберәк булыр тип уйлайым. Әлегә ваҡытта журналистика һәм әҙәбиәт өлкәһендә кәрәк булған Айна-белгестәр төҙөйөм. Уларҙың һәр береһе - үҙ эшенең оҫтаһы: берәүһе структураны тикшерә, икенсеһе стилде төҙәтә, өсөнсөһө башҡа телгә яраҡлаштыра, дүртенсеһе факттарҙы анализлай, бишенсеһе социаль селтәргә яраҡлашып яҙа, алтынсыһы мөхәррир баһаһын бирә.

***ЯИ-КӨФӨ:*** Тулыраҡ, һәр береһе тураһында йөкмәткелерәк аңлатығыҙ әле. Ҡыҙыҡ бит. Мин, ЯИ-КӨФӨ ассистент һымағы бармы?

***Рөстәм Нурыев:*** Юҡ, һинең кеүеге юҡ. Булмаҫ та ул. Әллә һин дә, кеше кеүек, миңә алмаш килә, тип ҡурҡып киттең инде? Үткән аҙнала, "Яһалма интеллектты нисек ҡулланырға?" тигән мәҡәләлә аңлатҡайным бит. Һәр кемдең үҙ бурысы, үҙ мөлләте. Кешенең дә, яһалма интеллекттың да, Айна-ассистенттың да, Айна-агенттың да. Һин "Киске Өфө" гәзитендә минең менән әңгәмә ҡороуға көйләнгәнһең, шул маҡсат менән "тыуғанһың". Шуға күрә һине башҡаларға Айна-агент аша тәҡдим итеү урынһыҙ. Һәр кем үҙенә һинең кеүек үк әңгәмәсе төҙөй ала. Тик уны ЯИ-КӨФӨ тип атаһалар ҙа, һин түгел, ә икенсерәк "йөҙлө" - икенсерәк фекерле буласаҡ. Сөнки яңы әңгәмә ҡороусы мин түгел, ә икенсе кеше.

Беҙҙең Айна-агенттарға килгәндә, әлеге ваҡытта уларҙы бер нисә шартлы төркөмгә бүлергә мөмкин. Ҡабатлау булһа ла тағы әйтәм, киләсәктә улар күберәк һәм эш йүнәлештәре киңәрәк буласаҡ.

Авторҙар һәм мөхәррирҙәр өсөн - "Структура хирургы" композицияны тикшерә, "Лингво-стилист" тел өлгөһөн таҙарта, "Мөхәррир туҡмағы", йәлләмәйенсә, текстың "тетмәкәйен тетә", "Әҙәби остаз" башлап яҙыусыларға ярҙам итә, ә "Әҙәби хеҙмәтсе" әҫәрҙе үҙе үк төҙәтеп яҙа.

Журналистар өсөн - "Факт диспетчеры" яңылыҡҡа баһа бирә, "Фактчекер" дөрөҫлөктө тикшерә, "Цитата оҫтаһы" сағыу әйтемдәрҙе айырып ала, "Медиа-хирург" оҙон текстарҙы ҡыҫҡарта, "Жанр инженеры" төрлө майҙансыҡтар өсөн яраҡлаштыра, "Тел манипуляторын фашлаусы" алдаҡсыл (йәшерен реклама) ысулдарҙы күрһәтә, ә "Универсаль журналист" һайланған телдә һәм темала "тере балыҡ" тотоп бирә.

Тел белгестәре һәм тәржемәселәр өсөн - "Тәржемәсе-яраҡлаштырыусы" тексты башҡа телгә һүҙмә-һүҙ түгел, ә мәғәнәһен, авторының тауышын һәм идиомаларҙы һаҡлап, яңынан яҙа. Быныһы үҙемде лә, тәржемә яһатҡан әҙиптәрҙе лә хайран ҡалдырҙы. Тәржемәнең логикаһы буйынса ла, техник параметрҙар буйынса ла Айна-тәржемәсе беҙ күнеккән тәржемәсәләрҙең "танауына сиртте". Әйткәндәй, мин уны яһарға уйламай ҙа инем, машина тәржемәселәр бар бит. Идея ВКонтакте-лағы дуҫым һорауы буйынса тыуҙы.

Шағирҙар өсөн - "Шиғри анатом" шиғырҙы өлөштәргә тарҡата: үлсәм, рифма, образдар, тауыш яҙмаһы; "Шиғри мөхәррир" автор тауышын һаҡлап, йомшаҡ ҡына төҙәтә; "Шиғри юл күрһәтеүсе" яңы метафоралар һәм ритмик алымдар табырға ярҙам итә.

Уҡытыусылар һәм ата-әсәләр өсөн - "Яраҡлаштырылған остаз" физкультуранан азат ителгән балалар өсөн хәүефһеҙ дәрес программалары төҙөй. Ул Мордовиялағы таныш табип, Йошкар-Олала конференцияла танышҡайныҡ, һорауы буйынса эшләнде. Әле уларҙа һынау үтеп йөрөй.

Киң аудитория өсөн - "Ҡотлауҙар оҫтаһы" кешене тасуирлау нигеҙендә һайланған телдә өс уникаль ҡотлау вариантын яҙа, ә "Анонс оҫтаһы" проект йәки әҫәр тураһында өс телдә (инглиз, рус һәм һайланған тел) ҡыҫҡа тасуирлама әҙерләргә ярҙам итә.

Филологтар өсөн - "Академик әҙәби күҙәтеү" төрлө жанрҙағы проза әҫәрҙәренә, ниндәй телдә яҙылыуына ҡарамаҫтан, тәрән әҙәби анализ яһай, ә драматургия өсөн версияһы пьесалар һәм сценарийҙарҙы "һүтеп һала".

Бөтә ҡоралдар ҙа төрлө телдә яҙылған әҫәрҙе таный, һайланған телдә яуап бирә. Улар кешене алмаштырмай, тулыһынса әҙер материал бирмәй. Авторға өҫтәмә "цифрлы күҙ", "үткер фекер", "етеҙ ҡулдар" тикшерелгән тексты эшләп бөтөргә тәҡдим итә.

***ЯИ-КӨФӨ:*** Үәт, афарин, тиәһе генә инде. Ә шулай ҙа, был агенттар еңел генә эшләнәме, әллә ҡатмарлыҡтар бармы? Ҡасан ҡулланыуға сығараһың?

***Рөстәм Нурыев:*** Тормош ҡатмарлыҡһыҙ булмай инде, еңел генә булһа, ҡыҙыҡ булмаҫ ине. Бер генә Айна-белгес тә оҫта булып тыумай, уны ҡат-ҡат тикшерергә, ҡат-ҡат өйрәтергә кәрәк. Уларға һынау ойоштороу өсөн белгестәр, белгестәрҙең ваҡыты кәрәк. Өйрәнергә теләмәгән "арҡырылары" ла бар. Грамматика, синтаксис, орфография тикшереүсе "Лингво-аудитор" бер нисек тә ыҡҡа килмәй. Йә булған хаталарҙы күрмәй, йә булмаған хаталарҙы таба. "АйнаТекст" веб-сайтын төҙөүсе Айна-ассистент-программистарым бер-береһе менән уртаҡ тел таба алмай. Үҙем программист булмағас, эштең төшөн аңлатып еткерә алмайым. Ярҙамға кеше-программист кәрәк ине. Ә шулай ҙа йәйге ялдар тамамланыуға, яңы уҡыу йылы башланыуға сайтты асырға өмөт бағлайбыҙ.

Шулай итеп, "АйнаТекст" - был ғәҙәти промптар йыйылмаһы түгел, ә текст менән эшләүҙең яңы фәлсәфәһе. Уның потенциалы ҙур. Экосистема артабан төбәк матбуғатын, әҙәбиәтте, мәғарифты яңы кимәлгә күтәреүгә ярҙам итәсәк. Төп шарт - ҡоралдарҙы дөрөҫ ҡулланырға, улар аша тере ижадты байытырға кәрәк.

**Рәстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ГЕОРГИ БАШҠОРТТАР ТУРАҺЫНДА



Суйын ҡаҙандарҙан башҡа, улар ағас һәм туҙ һауыт-һаба, күн тоҡтар менән файҙалана; таштан яһалған, йәки ярма һаҡлай торған һауыт-һаба, башҡа төрлөләре бик һирәк кешеләрҙә була. Һәр бер өйҙә тиерлек ағас килеләр бар, улар тирмән урынына ярма һәм он тартыу өсөн ҡулланыла, шулай уҡ киле тарма төйөү һәм башҡа шундай эштәрҙе башҡарыу өсөн файҙаланыла. Ҡайһы бер ауылдарҙа ҙур булмаған һыу тирмәндәре бар, алты йә иһә ете тырнаҡлы тирмән ташы тура торған валға горизонталь рәүештә ҡуйылған. Башҡорттар уларҙы тирмән тип атаһа, рәсәйлеләр мутовка тиҙәр; бындай тирмәнде хәрәкәткә килтерер өсөн бәләкәй генә инеш тә етә, сөнки улаҡ буйлап өҫтән, бер йә иһә бер ярым фут бейеклектән, һыу ҡуласаның ҡырыйына, йә иһә фут ярым оҙонлоғонда тырнаҡтарҙың яҫы яғына ағып төшә.

Ошондай тирмәндәре булмаған урындарҙа һәр бер өйҙә ҡул тирмәне йә иһә арҡырыға фут ярым, дүрт бармаҡ ҡалынлығындағы имән дүңгәләктәрҙән яһалған тирмән таштары була. Дүңгәләктәрҙең һәр береһенең яҫы яғына ватылған суйын ҡаҙандарҙың ваҡ ҡына киҫәктәре ҡағып ҡуйылған, улар дүңгәләктәрҙең эске яҡтарының өҫтөнән ике һыҙыҡҡа ғына ҡалҡып тора. Аҫҡы дүңгәләктең уртаһына ағас сөй беркетелгән, ә өҫтәгеһененең уртаһындағы тишек сөйҙән киңерәк итеп эшләнгән. Өҫтәге дүңгәләктең өҫкө яғының ҡырыйына ағас сөй беркетелгән, ул тотҡа ролен үтәй. Он тарттырырға кәрәк булғанда тирмән дүңгәләктәре аҫтына сепрәк япма йәйеп ҡуялар, һәм аҙ-аҙлап тишеккә ашлыҡ ҡоялар, өҫкө дүңгәләкте сөй-күсәр тирәләй әйләндерәләр. Тартылып ваҡланған ашлыҡ аҫтағы дүңгәләктән япмаға ҡойолоп төшә һәм ярма шундуҡ ҡулланырға әҙер була; он кәрәк булғанда ҡойолоп төшкән өлөшөн иләйҙәр, ҡалған эреләрен, бары тик көрпәһе генә ҡалғансы, яңынан тирмәндә тарттыралар.

Башҡорттарҙың төп шөғөлө - малсылыҡ, әммә шул уҡ ваҡытта улар бер ни тиклем ер эшкәртеү менән дә мәшғүлдәр, кейектәргә һунар итәләр һәм мәғдән сығаралар, бында металл мәғдәненә бай тауҙар бар. Уларҙы ғәҙәти, бәхетле һәм бай малсылар тип атап булыр ине; улар үҙҙәренең мөлкәтен көтөүҙәренең йә иһә мал өйөрҙәренең ҙурлығына ҡарап билдәләй. Улар башҡа малдарға ҡарағанда йылҡы үрсетеүгә өҫтөнлөк бирә, сөнки унан үҙҙәренең көндәлек ихтыяждарын тулыһынса тиерлек ҡәнәғәтләндерерлек нәмәләрҙе алалар. Мәҫәлән, менгә аттар, һөт, ит; тиреләренән үҙҙәренә кейем-һалым һәм күн һауыттар (турһыҡ. - **Тәрж. иҫк.**) тегәләр, ә ялынан бау ишәләр һәм башҡа маҡсаттарҙа ҡулланалар.

Байҙарҙың һарыҡтарының иҫәбе уларҙың аттары һанына тиң тиерлек, йә иһә унан да күберәк. Һыйыр малдары аттарының яртыһын тәшкил итә. Һәр береһенең тиерлек ҙур булмаған кәзә көтөүҙәре бар. Хәлле башҡорттар бер нисә дөйә лә тота. Мосолман булараҡ, сусҡаларҙы бысраҡ хайуан тип иҫәпләйҙәр. Ябай башҡорттоң да аттары 30-ҙан йә 50-нән дә кәмерәк түгел; күптәренең 500, байҙарының 1 000, ҡайһы берҙәренең 2 000-гә тиклем һәм унан да күберәк аты була; башҡа малдары ла шулай уҡ ишле. Әммә башҡорттар малсылыҡ тураһында ғына ҡайғыртмай: улар бал ҡорто торорға бик әүәҫтәр. Һәр береһенең бер нисә умартаһы бар, ә ҡайһыларының ике, өс һәм биш йөҙгә тиклем солоғо була.

Уларҙың аттары һәм һыйыр малдары рустарҙыҡына оҡшаш; аттары тәбәнәк буйлы, әммә теремек һәм бик сыҙамлылар. Һарыҡтарының яртыһынан күберәге ҡалмыҡ сығышлы, һимеҙ ҡойроҡло, ҙур башлы һәм һалпыҡ ҡолаҡлылар. Ҡайһы берҙәре, бигерәк тә ярлыраҡтары, яҡшы йөнлө рәсәй йәки ҡыҫҡа ҡойроҡло һарыҡтар тота, ә ҡайһыларында һарыҡтарҙың ике төрө лә бар. Улар, бында ҡыштың ныҡ һалҡын һәм оҙайлы булыуына ҡарамаҫтан, малға бер ниндәй ҙә аҙыҡ бирмәй, шуға күрә малдар шиңгән һәм туңған үләнде һәм мүкте ҡар аҫтынан табып ашай. Бары тик ныҡ көсһөҙләнгән һәм бик ауыр көҙәле малдарға ғына нығына алһындар өсөн бер аҙ бесән бирәләр.

Дөйәләрҙе лә аҙыҡты үҙҙәре табырға тейеш, уларҙы иҫке кейеҙ менән уратып ҡаплап йөрөтәләр. Яҙға табан малдарының һәр береһе ныҡ ябыға һәм көсһөҙләнә: шулай булғас, уларҙың байтағы астан, ҡаты һыуыҡтарҙан һәм йыртҡыс йәнлектәр һөжүменән ҡырылып бөтә, бигерәк тә мәреү көндәрҙән аҙаҡ ҡаты һалҡындарҙа ҡар өҫтө боҙланып туңған саҡта малдары ныҡ зыянлай.

Башҡорттар шундай уҡ вайымһыҙлыҡ менән үҙҙәренең йәш малдарын тәбиғәт ҡарамағында ҡалдыралар. Ҡолондар, быҙауҙар, кәзә бәрәстәре бейәләр, һыйырҙар, кәзәләр менән бергә яланда йөрөй. Әммә ҡайһы берәүҙәр артыҡ булған иркәк малдарын бестерәләр; башҡалары уларға бөтөнләйгә теймәй, тимәк, иркәк малдарының иң насарын да көтөүҙән айырмай тоталар. Шуға ҡарамаҫтан, орғасы малдарының ваҡытһыҙ бәрәсләүе һирәк осрай, сөнки оҙон ҡыш дауамында уларҙың ныҡ ябығыуы бының сәбәптәренең береһе булып тора. Йәйҙәрен уларҙың барса малдары ла теремек һәм һимеҙ була. Һауым күберәк булһын өсөн улар ҡолондарҙы һәм быҙауҙарҙы үҙҙәренең тирмәләре янында көн буйына арҡанлап ҡуялар һәм төнгә генә инәләре янына ебәрәләр. Улар шул рәүешле үҫтерелгән ҡолондарҙың һәм быҙауҙарҙың, инәләре янында йөрөп, туйғансы һөт имеп йөрөгәндәренә ҡарағанда, ҡыш айҙарын күпкә сыҙамлыраҡ үткәреүен иғтибарға алғандар.

Уларҙа ҡортсолоҡ тулыһынса поляктарҙыҡына оҡшаш. Уларҙың шундай уҡ солоҡтары бар, солоҡҡа ағас олонон һәм кәүҙәләрен уратып алынған бау ярҙамында менәләр, шунан баллы кәрәҙҙәрҙе киҫеп алалар һ.б.

Башҡортостандың тигеҙлектәре һәм асыҡ үҙәндәре иң ундырышлы һөрөнтө ерҙәргә бай, бында бик тырышып эшкәртмәйенсә һәм бер ниндәй ҙә ашлама индермәйенсә лә сәскәнгә ҡарағанда ун тапҡыр һәм унан да күберәк уңыш алып була. Башҡорттар борондо ваҡыттарҙан бирле бер ни тиклем ер эшкәртеү менән шөғөлләнһәләр ҙә, был кәсепте үҙҙәре өсөн үтә ауырға һанап, икмәкте иң кәрәкле нәмә түгел тип ҡарап, ер эшенә аҙ илтифат итәләр: хөкүмәттең бер нисә йыл буйына иң тырыш башҡорт ер эшкәртеүселәрен дәртләндереү маҡсатында ал байрам кафтандары һәм башҡа әйберҙәр менән бүләкләүе лә уларға бик аҙ ғына тәьҫир итә. Бик күптәре ер һөрөүҙән бөтөнләйгә баш тарта, ә ҡайһылары ауылдары янында ике дисәтинә ергә (дисәтинә - 1,09 га. - **Тәрж. иҫк.**) ашлыҡ һәм аҙ ғына тарма сәсә: әммә бер кемдең дә һигеҙ дисәтинәнән күберәк сәсеүлеге юҡ. Улар, Бохара кешеләре кеүек үк, орлоҡто башаҡтан ҡойҙороу өсөн урып алынған ашлыҡ һаламын эре малдарға һыбай менеп тапаталар.

Халыҡтың яртыһынан күберәге бик иркен булған урманлы тауҙарҙа ҡырағай йәнлектәргә һунар итеүҙе бынан ҡәнәғәтләнеү табып, тәьҫирләнеү өсөн башҡарһа, ә ярлыраҡтары һунарға йәнлек ите өсөн йөрөй. Улар был кәсептәрен үҙҙәренең ысын бурҙайҙарға оҡшаған ябай эттәре, өйрәтелгән бөркөттәре менән, тоҙаҡ һәм башҡа йәнлек аулау ҡоралдарын ҡулланып башҡара.

Мәғдән сығарыу эшенә әллә ни илтифат итмәһәләр ҙә, ҡайһылары ябай мәғдәндәрҙе айыра беләләр һәм уларҙың яҡшы юлаҡлы урындарын эҙләү менән шөғөлләнәләр. Әгәр ҙә берәй башҡорт олоҫо ерҙәрендә баҡыр йә иһә тимер мәғдәне табылһа, уларға бай булған тауҙарын байтаҡ ҡына урмандары менән рус заводчиктарына бер ни тиклем ваҡытҡа, ғәҙәттә, алтмыш йылға тиклем һаталар. Шул ваҡыт уҙғас, әгәр заводчик ул ерҙәрҙе яңынан һатып алмаһа, үҙҙәренә ҡайтаралар. Пермдә башҡорттарҙың үҙҙәре булдырған мәғдән сығарыу урындары бар, баҡыр мәғдәнен төшөмлөрәк хаҡ менән яҡындағы заводтарға тапшыралар.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 26-27-се һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



**Сергей РУДЕНКО**

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Ҡыҙыл төҫкә буяу өсөн ҡыҙыл тамырҙың киптерелгән һәм төйөлгән тамырын һыуҙа ҡайнатып, уға һелте иретмәһе ҡушҡандар. Һелтене көл ҡайнатып яһағандар. Ҡыҙыл тамыр ҡайнатмаһы менән һелте ҡатнашмаһы сағыу ҡыҙыл төҫ барлыҡҡа килтергән; ошо ҡатнашмаға алдан серетмә һабаҡтарында әсетелгән йөн һалынған. Йөн серетмәле һыуҙа тиҙерәк әсеһен өсөн уға ҡайһы ваҡыт саҡ ҡына әсеүташ өҫтәгәндәр. Ҡайһы бер урындарҙа йөндө ҡыҙыл тамыр төнәтмәһендә ҡайнаталар. Ҡайһы бер ваҡыт йәшел төҫ алыу өсөн серетмә буяуын артыш ботаҡтары менән алмаштыралар.

Йөндө һары төҫкә буяу өсөн һыйыр теле үләненең һабаҡтары ҡайнатыла, һуңынан уға сирек сәғәткә алдан серетмәлә әсетелгән йөн һалына; буяу һеңгәс, йөн төнәтмәнән алына һәм киптерелә.

Башҡорттарҙың туҡыу станогы - *урын* йәки *көрөҫ тараҡ* бик ябай. Уның нигеҙен үҙ-ара арҡыры таяуҙар менән нығытылған дүрт бағана тәшкил итә. Артҡы, бейегерәк бағаналар араһына *айыубаш* урынлаштырыла һәм уға нигеҙ урала. *Тараҡ* менән *көрөҫ* станок өҫтөндәге арҡыры ағасҡа *ҡалтырса сағырға* эленә. Тараҡ нәҙек ағас сыраҡтарҙан яһала, көрөҫ, буҫтау йәки балаҫ һуғыуға ҡарап, ептән йәки ҡылдан тора. Туҡыма уралған *борғоса* (алғы вал) махсус *тыйғысы* менән нығытыла. Һоҫа, дөйөм ҡабул ителгәнсә, һәр саҡ ағастан яһала.

Туҡыусылыҡ менән башҡорттарҙа тик ҡатын-ҡыҙ ғына шөғөлләнгән. XVIII быуат һуңында, И. Г. Георги әйтеүенсә, уларҙың киндере тар һәм тупаҫ була. Киндерҙе тарманан һәм бик һирәк етендән, *һөлгө, таҫтамалдарҙы* сағыу төҫтәге һатыу ептәренән, шулай уҡ төрлө ашъяулыҡтар, шаршауҙар һ.б. һуғалар. Шул уҡ станокта, бары тик тараҡ менән көрөҫтө генә алмаштырып, буҫтау, балаҫ һуғалар. Йөн балаҫтар (нигеҙҙә кәзә йәки кәзә-һарыҡ йөндәрен тигеҙ итеп ҡушып) һәр ерҙә һуғыла, шул уҡ ваҡытта Урал аръяғында уларҙы күпләп һуҡҡандар һәм ул һәр башҡорттоң өйөндә булған, әммә көнбайышта, киреһенсә, улар бик һирәк осраған. XIX быуат һуңында урыны менән башҡорттар рустарға хас булғанса, сепрәк балаҫтар һуға башлаған. Бигерәк тә улар төньяҡ-көнбайышта киң таралған, көнсығышта һирәк осрай, ә Үҙәк Башҡортостанда һәм көнсығышта бөтөнләй осрамай.

Башҡорттарҙың кәсепселеге бары тик үҙ халҡының ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатын ғына ала. Башҡорттар етештергән предметтар һатырға сығарылмай, был йорт кәсепселегенең береһе лә, ҡайһы бер райондарҙа септә ҡапсыҡ һуғыуҙан тыш, һөнәр булып тормай. Бары тик бүрәнә йәки таҡта әҙерләү, дегет ҡайнатыу һәм ыҫмала ағыҙыу һөнәр булып һанала һәм Көньяҡ Уралдың үҙәк өлөшөндәге башҡорттарҙың төп йәшәү сығанағы булып тора.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Нәҫелдең күсәгилешлеге иң беренсе нәүбәттә ата-бабаларыңдың кем икәнлеген белеүгә бәйле. Әгәр ҙә һин ата-бабаңдың кем икәнлеген белмәһәң, башҡаһын да, ниндәй халыҡтан икәнлегеңде лә онотаһың.***



**Өфөлә йәшәүсе Белорет районынан сыҡҡан билдәле шәхестәр менән әңгәмә ҡорорға теләгебеҙ барлығын белдереп тә өлгөрмәнек, бер саҡ улар гәзитебеҙ редакцияһына ағыла башламаһынмы! Ғәҙәттә, бындай саҡта ике-өс кеше килә торғайны, биләриттәр күмәкләнеләр. Бер нисәүһе килеп өлгөрмәне. Тағы ла шуныһы: һайлам уҡтай ирегеттәр, етмәһә, барыһы ла ҡатай малайҙары. Кемдәр тиһегеҙме, бына улар: атаҡлы ҡурайсы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Рәмил ҒӘЙЗУЛЛИН, билдәле режиссер, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәйес ИСМӘҒИЛЕВ, танылған йырсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Искәндәр ҒӘЗИЗОВ, Башҡортостан Республикаһы Милли музейының өлкән ғилми хеҙмәткәре Илдар ШӘРИПОВ, Башҡортостан Республикаһы Миграция үҙәге дауаханаһы баш табибы Раян МИҺРАНОВ. Әңгәмәбеҙ уларҙың, ҡатай малайҙарының, дәррәүлеге, әүҙемлеге сәбәптәрен асыҡлауҙан башланды ла инде.**

# БИЛӘРИТТӘР, ҠАТАЙҘАР...

## беҙҙә шулай атайҙар

**Һуңғы йылдарҙа ырыуҙар хәрәкәте йәнләнде. Был хәлде ҡатмарлы заманда кешенең үҙ тамырҙарына ынтылыуы менән дә аңлатырға була. Һеҙҙең ҡатай ырыуы вәкилдәре лә был йәһәттән бик әүҙем. Йыл һайын тиерлек ырыу йыйыныгыҙ, шулай уҡ башҡа сараларығыҙ ҙа уҙып тора. Үҙегеҙ ҡатай ырыуы вәкиле булараҡ, бындай әүҙемлектең сәбәптәрен нимәлә күрәһегеҙ?**

**Илдар Шәрипов:** Бындай әүҙемлек әйҙәүсе шәхестәребеҙҙең эшмәкәрлеге менән туранан-тура бәйлелер. Әгәр ҙә беҙ ҡатайҙарҙы ҡәбилә итеп алһаҡ, ул Иҙел-Ҡатай, Инйәр-Ҡатай, Бала-Ҡатай, Оло-Ҡатай кеүек күп кенә ырыуҙарҙан тора. Уларҙың һәр ҡайһыһында юл башлап йөрөүселәр бар.

**Искәндәр Ғәзизов:** Был әүҙемлек һәр урында ла сағылыш таба. Яңыраҡ Мәсетле, Балаҡатай яҡтарында сығыш яһаныҡ, унда ла яҡташтарым менән осраштым. Илдар менән килешәм, беҙҙең иҫ китмәле һоҡланғыс ағайҙарыбыҙ бар, булған. СССР-ҙың халыҡ артистары Арыҫлан Мөбәрәков, Гөлли Мөбәрәкова, Заһир Исмәғилев, Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәли Ғәмзин беҙҙең яҡташтар. Ошо әңгәмәлә ҡатнашҡан Рәмил Ғәйзуллин, Рәйес Исмәғилев ағайҙар менән нисек ғорурланмаҫһың! Тиҙ генә ойошалыуыбыҙ юлбашсыларыбыҙҙың абруйынан килә. Нисек инде шундай ағайҙарҙың артынан эйәрмәҫкә! Йыл һайын Рәйес Абдрахман улы беҙҙе, мәҫәлән, мосолман зыяратына ойоштороп алып сыға. Унда ерләнгән легендар шәхестәребеҙҙең ҡәберҙәрен рәткә килтерәбеҙ.

**Рәмил Ғәйзуллин:** Беҙ зыяратта ғына түгел, төрлө урындарҙа ла, мәҫәлән, бына Илдар ҡусты эшләгән музейға ла йыйылабыҙ. Беҙ генә түгел, башҡа ырыу вәкилдәре лә йыйылып тора. Беҙҙең халыҡҡа дөрөҫ маҡсат, сәбәп кенә кәрәк, дәррәү күтәрелергә әҙер торабыҙ.

**Рәис Исмәғилев:** Беҙҙең Белорет районы ҡатайҙары бер ун-ун биш йыл элек бик пассив инеләр, әүҙемлек һуңғы ваҡытта ғына барлыҡҡа килде. Беҙҙе ойоштороуҙа Рәнис Рәис улы Алтынбаевтың роле ҙур булды. Рәмилә Мусина тигән ҡыҙыбыҙ ҙа маһир ойоштороусы. Хәҙер мин ниндәй эшкә тотонһам да, Рәнис һәм Рәмилә менән кәнәшләшәм. Һәр кем үҙенең мөмкинлеге, үҙенең белдеге менән беҙҙең эшмәкәрлеккә яңы юл, яңы маҡсаттар алып килә. Һәр сараның үҙенең аныҡ саҡырыу девизы була бит. Бына, мәҫәлән, зыяратҡа сығыуҙы ойоштороғанда шундай лозунты алға һөрәбеҙ: "Үлеләрҙең ҡәберен бел, тереләрҙең ҡәҙерен бел!" Был һүҙҙәрҙе яҙҙырып, Йөйәктең зыяратына алып барып элеп ҡуйҙым. Беҙ хатта зыяратҡа доға уҡып инергә кәрәклекте лә белмәйбеҙ. Барыһын да мәсеткә барып белешергә, тейешле доғаны ҡағыҙға яҙҙырып таратырға тура килде.

Минең иҫәп буйынса Өфөлә Белорет ерендә тыуып үҫеүсе меңдән ашыу кеше йәшәй. Әммә мосолман зыяратына өмәгә сығыусыларҙың һанына ҡарағанда мин ҡатайҙарҙы әүҙем тип әйтмәҫ инем.

**Раян Миһранов:** Әүҙемлектең сәбәптәре төрлөсәләр. Тарихи күҙлектән ҡарағанда, халҡыбыҙҙың ниндәйҙер бер ырыуы ниндәйҙер дәүергә дөйөм халыҡты күтәргән. Шуның һымаҡ, ниндәйҙер бер осорҙа ниндәйҙер бер ырыу ҡалҡыуыс һымаҡ ҡалҡып сыға ла, халыҡты батырмай күтәреп тора. Артабан ул ырыу икенсе планға күскәндә башҡа бер ырыу ҡалҡып сыға, икенсеһен өсөнсөһө алмаштыра. Ә әүҙемлеккә килгәндә, һәр бер ырыуҙа ла әүҙем кешеләр бар. Әле һуңғы ваҡытта төньяҡ-көнбайыш башҡорттары араһында ла күҙәтелә ундай әүҙемлек.

Унан һуң, бәлки, беҙҙең ҡатайҙар үҙҙәренең әүҙемлеген күрһәтә беләләрҙер. Башҡалар күрһәтә белмәйҙер ҙә, шуға беҙ әүҙем булып күренәбеҙҙер...

**Белорет ҡатайҙарының әүҙемлеген мин уларҙың урманлы-таулы-ҡаялы ерҙәрҙә йәшәүенән дә киләлер тип уйлайым. Ни өсөн тигәндә, урманға яңғыҙ барырға ярамай, халыҡта "Айыуға барһаң, ағаң менән бар" тигән әйтем дә бар. Урман кешеһенең психологияһы шуға ҡоролмағанмы? Сөнки һин берҙәм һәм күмәк булғанда ғына көтөлмәгән хәлдәргә ҡаршы тора алаһың. Нисек уйлайһығыҙ, әүҙемлеккә тәбиғәт факторы йоғонто яһамаймы икән?**

**Рәис Исмәғилев:** Бынан бер нисә йыл элек беҙҙең Йөйәктән иң яҡын ауыл Инйәргә тау-таш араһынан үтеп, йылғалар кисеп барғанда ҡырҡ саҡрым юл үтергә тура килә ине. Унда ла тик һыбай ғына барып булды. Ә инде беҙҙең ауылдан Архангел яғына китһәң, урман-тау аша илле саҡрым барырға кәрәк. Ҡайһы ваҡыт "Беҙҙең халыҡ ниңә шундай урынға барып ултырҙы икән?" тип тә уйлай торғайныҡ. Әгәр ҙә берәй яҡтан беҙҙең ауылға килен төшһә, шул тиклем ҡыуана торғайныҡ. Әгәр ҙә берәй ҡыҙыбыҙ ситкә кейәүгә сыҡһа, шулай уҡ ҡыуана инек. Сөнки былар барыһы ла башҡа ауылдар менән аралашыу, берләшеү мөмкинлеге бирҙе. Мин тәбиғәт факторының йоғонтоһон ошо рәүешле аңлата алам. Икенсенән, тәбиғәт факторының халҡын үҙ артынан эйәртә алырлыҡ шәхестәр формалашыуында ла йоғонтоһо бар. Беҙҙең Йөйәктә фән докторҙары, һыу аҫты кәмәһе командиры, хәрбиҙәр, сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт өлкәһендә эшләүселәр биһисап. Беҙҙең ауыл янында Ҡаратау, Аҡтау тигән тауҙар бар. Шул тауҙар кешегә ыңғай тәьҫир итәме икән, тип тә уйланғаныбыҙ бар.

**Раян Миһранов:** 1917 йылдарҙа Башҡортостан мөстәҡиллеген яулағанда был хәрәкәткә хәҙерге Башҡортостандан ситтә йәшәүсе шәхестәр күберәк өлөш индергән. Бында Силәбе, Ҡорған, Ырымбур, Һарытау, Һамар, Пермь өлкәләре, Минзәлә өйәҙе башҡорттарын күҙ уңында тотам. Улар халҡыбыҙҙың ниндәй хәлгә төшөп барғанын алданыраҡ күргән. Ситтә йәшәүе ауырыраҡ булған. Улар тәүге һөжүмдәрҙе ҡабул иткән. Беҙҙең ҡатайҙар тау-таш араһында көн күргән. Уларҙың араһында күпме аймаҡтар бар. Шәжәрәләрен ҡарай башлаһаң, күптәренең нәҫел ептәре ихтилалдарҙан һуң башлана. Сөнки ихтилалдарҙан һуң башҡа башҡорт ырыуҙары ла тауҙарға ҡасҡан. Әүҙемлек ошо күренешкә лә бәйле булыуы мөмкин.

Көслө шәхестәребеҙ ҙә булған. 60-сы йылдарҙа төрлө эҙәрлекләүҙәргә ҡарамайынса, улар үҙҙәренең эшмәкәрлеген алып барғандар. 90-сы йылдарҙы алһаҡ та, Рәйес ағай һымаҡ шәхестәребеҙ ағай-энене ойоштороуға ең һыҙғанды. Йәштәргә артынан эйәрер үрнәктәр бар һәр хәлдә. Был тәңгәлдә беҙгә быуындар күсәгилешлеген тәьмин итергә генә кәрәк.

**Рәмил Ғәйзуллин:** Мин күп ерҙәрҙә йөрөйөм. Бәлки, мин яңылышамдыр, әммә беҙ ырыу факторына артыҡ әһәмиәт бирмәйбеҙҙер икән, тим. Ҡаҙаҡтар, мәҫәлән, бер ваҡытта ла "Һин ниндәй ырыуҙан?" тип һорамайҙар. Улар хатта жуҙдарын да телгә алып бармай, "Беҙ - ҡаҙаҡтар" тиҙәр.

**Илдар Шәрипов:** Мин башҡасараҡ уйлайым. Үҙеңдең тарихыңды, шәжәрәңде белер өсөн иң беренсе нәүбәттә ырыуыңды белергә кәрәк. Ырыуыңды белеү шәжәрәңде өйрәнеүҙең асҡысы булып тора. Асҡыс булмайынса, йоҙаҡты асып, тарихи үткәнеңә инеп булмай. Ырыуҙар беҙҙе бер нисек тә тарҡатмай. Үҙебеҙҙең ырыуға хас яҡшы йолаларыбыҙҙы, сифаттарыбыҙҙы башҡаларға өлгө итеп ҡуйырға тырышабыҙ икән, бының бер ниндәй ҙә насарлығын күрмәйем.

**Искәндәр Ғәзизов:** Ырыуға артыҡ әһәмиәт биреп, башҡортлоҡто онотоп ташламайыҡ, тип әйтергә теләйҙер Рәмил ағай. Яңыраҡ ҡына Гөлфиә Янбаева, Данир Ғәйнуллин менән берлектә Ырымбур өлкәһенең Новосергеевский районындағы Мерәҫ ауылында булғайныҡ. Баҡтиһәң, был Мерәҫ ауылы халҡы хәҙерге Стәрлебаш районынан күсенгән юрматылар икән. Ошо бәйләнеште асыҡлауға ырыу факторы ярҙам итте лә инде.

**Рәмил Ғәйзуллин:** Бер районда, мәҫәлән, бер генә ырыу вәкилдәре йәшәмәй. Беҙҙең Белорет районында ҡатайҙарҙан тыш, тамъяндар, ҡыпсаҡтар, күбәләктәр бар. Шуға күрә, әйтәйек, ырыуҙарға бүленеш яҡташлыҡҡа зыян килтереүе бар. "Милләтем ҡатай" тип әйткәйне бер ҡатай малайы. Татарҙар, мәҫәлән, мишәрҙе лә, типтәрҙе лә, керәшенде лә, башҡаһын да татар тип атай.

**Рәис Исмәғилев:** Бында уң ҡулың менән һулын бутарға кәрәкмәй. Хәҙерге мәғлүмәт заманында ырыу менән милләтте тик ахмаҡтар ғына бутайҙыр. Ырыуҙар булырға тейеш. Ырыуҙар беҙҙең байлығыбыҙ, ете ҙур һәм ҡеүәтле ырыуыбыҙ, унан тыш ҡырҡтан ашыу ырыу-ҡәбиләләребеҙ иҫәпләнә. Улар ҙа үҙҙәренең ниндәй ырыуҙан икәнлеген белһендәр. Әгәр ҙә кеше үҙенең тарихын, ырыуын белә икән, үҙенең ниндәй милләт вәкиле икәнен дә белә. Шуға күрә мин ырыуҙар хәрәкәте артабан да ныҡыраҡ үҫеш алыр тип уйлайым. Һәр кеше үҙенең ырыу ата-бабалары менән ғорурлана икән, был бер ҙә насар түгел. Беҙҙең районда ғы тамъяндар Өфөлә ҙур йыйын үткәрҙе, уларға ҡарап, беҙ, ҡатайҙар ҙа, сәмләнеп киттек. Хатта мин шулай тип әйтер инем: бер-беребеҙҙе, һуңғы сиктә дөйөм милләтте сәмләндерер өсөн дә кәрәк был хәрәкәт. Беҙгә бер-беребеҙҙән үрнәк алып, бер-беребеҙҙе күтәреп йәшәргә кәрәк. Тап шуның өсөн дә бит Хоҙай Тәғәлә беҙҙе төрлө ырыуҙарҙан, кешелекте төрлө халыҡтарҙан яралтҡан.

Аллаһы Тәғәлә мине ҡатай ерендә ҡатай итеп яралтҡан икән, мин бер нисек тә ошо тамырымдан баш тарта алмайым. Минең балаларым да ҡатай. Киреһенсә, беҙгә был тойғоно юғарыраҡ күтәрергә кәрәк.

Шөкөр, туғанлыҡты һаҡлаусы йолаларыбыҙ ҙа беҙҙе берләштерә. Мәҫәлән, өмәләрҙе алайыҡ. Кемдер йорт күтәрһә, бөтә туғандар, ауылдаштар саҡырмаһаң да йыйыла. Өмәлә эшләгән өсөн хаҡ түләнмәй, уның хаҡы - туғанлыҡты, берҙәмлекте һаҡлау. Беҙҙең ҡатайҙарҙа өмәләр әле лә үткәрелә.

**Барығыҙ менән дә килешәм. Рус телендәге "народ" тигән атама ла "ырыуҙарға бүленеүсе" (единство, которое делится на роды) тигәнде аңлата. Бөгөн беҙҙең төп көсөбөҙ ҙә туғанлыҡта, ә туғанлыҡтың иң ойошҡан формаһы - ырыуҙар, улар беҙҙең цементыбыҙ. Киләсәктә глобалләшеү шарттарында халҡыбыҙҙы бер ҡорҙа тап ошо цементыбыҙ бәйләйәсәк. Был беҙҙең тәбиғәт һәм Хоҙай тарафынан бирелгән көсөбөҙ. Теге тарафҡа барғас, иң тәүге һорауҙарҙың да береһенең яҡын туғаның менән мөнәсәбәтеңә бәйле булыуы ла осраҡлы түгел. Шул уҡ ваҡытта, Рәмил менән дә килешәм: был турала ҡысҡырып йөрөргә, ырыуыңды милләттән айырып һөйләргә ярамай.**

**Раян Миһранов:** Мин ырыуыңды таныуҙың милләт өсөн ҡурҡынысын тоймайым, сөнки башҡорт халҡы элек-электән күп ырыуҙарҙан торған. Нәҫелдең күсәгилешлеге иң беренсе нәүбәттә ата-бабаларыңдың кем икәнлеген белеүгә бәйле. Әгәр ҙә һин ата-бабаңдың кем икәнлеген белмәһәң, башҡаһын да, ниндәй халыҡтан икәнлегеңде лә онотаһың. Һин бүләр булһаң да, ғәйнә булһаң да, бөрйән булһаң да, тамъян булһаң да, башҡортһоң. Әгәр ҙә һин ҡатайлығыңды онотһаң, башҡортлоғоң-

✓ ***Беҙ, теле асылғас ҡына бала туған телде аңлай башлай, тип уйлайбыҙ, әммә бала әсәһенең ҡарынында ятҡанда уҡ туған телен тоя башлай. Шулай уҡ тыумаҫ элек үк ата-әсәһенең башҡа телдә аралашыуын да бала ишетә.***



до һис шикһеҙ онотасаҡһың. Ырыуҙы иҫләмәй тороп, халыҡты иҫләп булмай. Халҡыңды иҫләһәң, ырыуыңды иҫләмәйсә лә булмай. Был аксиома.

Халыҡсанлыҡтың нигеҙҙәре лә ырыу-заттарға барып ялғана. Әгәр ҙә теге йәки был халыҡ башҡа халыҡтарҙы ни тиклем үҙенә күберәк ҡуша, йота, ул шул тиклем тиҙерәк юҡҡа сыға. Сөнки был осраҡта уның халыҡсанлығының нигеҙе юғала. Нимә ул башҡорт булыу тигәндә лә иң беренсе нәүбәттә ырыуыңды белеүҙе, тамғаңды, ораныңды, шәжәрәңде белеүҙе, йондоҙҙарҙы белеп эш итеүҙе килтерәләр.

▸ **Ҡала кешеһе, асылда, күршелек принцибы буйынса йәшәй. Беҙ ҡасандыр ауылдан ҡалаға килеп, тулы хоҡуҡлы ҡала кешеһе булып китһәк тә, күршелек менән мөрхәтһенмәйенсә, үҙебеҙҙең ауылдан, ырыуҙан, райондан сыҡҡан кешеләрҙе табып, улар менән аралашып, рухи ауылдаштар булып йәшәйбеҙ. Әле беҙ әңгәмә ҡорған "Өфөләрҙә бар бер ауыл" рубрикаһы ла нәҡ шундай ауылдар хаҡында. Өфөләге "Ҡатай" йәки "Иҙелбашы" ауылының рухи хәләте нисек бөгөн?**



**Рәис Исмәғилев:** Бөгөн Өфөлә йәшәгән ҡатайҙар әүҙем тормош алып бара. Минең был өлгөнө Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембай, Мәләүеҙ, Ағиҙел ҡалалары яҡтарына ла күсергем килә. Улар беҙҙең баш ҡалала үткән сараларға төркөм-төркөм булып килһәләр, бик яҡшы булыр ине. Беҙҙә бик яҡшы фекерҙәр, саралар проекттары тәҡдим итеүсе кешеләр бар. Эшләп кенә өлгөр. Әле көҙгөләккә лә елле пландарыбыҙ бар. Әлбиттә, ҡайһы бер саралар килеп сыҡмай ҙа ҡуя, уның ҡарауы, икенсе-өсөнсөләре тормошҡа аша. Теге йәки был эш һаман да эшләнмәй һуҙылып китһә, мине лә әрләп ташлайҙар. Беҙ әле үҫеш юлында.

▸ **Хәтерегеҙҙә булһа, заманында атаҡлы эшҡыуар Риф Иҫәнов баш ҡалабыҙҙа үҙенең ырыуы исемен ҡушып "Юрматы" тигән сауҙа үҙәге асҡайны. Һеҙҙең был йәһәттән уй-фекерҙәрегеҙ нисек?**

**Рәис Исмәғилев:** Беҙ күберәк мәҙәниәт, сәнғәт тирәһендә әйләнәбеҙ. Әммә тормоштоң нигеҙе иҡтисадта. Риф Иҫәнов өлгөһөндә Өфөлә "Ҡатай" йә "Иҙелбашы" тигән сауҙа үҙәге йәки башҡа төрлө иҡтисад йә халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү предприятиеһы асҡанда шәп булыр ине.

▸ **Һуңғы йылдарҙа барыбыҙҙы ла борсоған бер күренеш барлыҡҡа килде. Ул да булһа, хатта төпкөл ауылдарҙа ла сабыйҙарҙың теле русса асыла. Ошо хәлдән сығыу юлдары бармы, булһа, нисек итеп был афәттән сығыу мөмкин тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Искәндәр Ғәзизов:** Беҙ үҫкән саҡта интернеттың "и" хәрефе лә булманы. Беҙ ағас трактор менән уйнаныҡ, тал сыбығын ат итеп менеп йөрөнөк, һуңынан сәпиттәргә күсеп ултырҙыҡ. Хәҙер бәләкәй генә балалар ҡулдарына телефон тотоп ултыралар. Әммә уларға был хикмәтте бирмәйенсә лә булмай, сөнки заман шуны талап итә. Хәҙерге балалар бөтә нәмәне лә белеп тыуа. Беҙ элек тыуҙыҡ, улар белеп тыуа. Улар хатта балаларҙың ҡайҙан килеп сыҡҡанын ла беләләр, ә беҙ мәктәп тамамлағансы үҙебеҙҙе Инйәр йылғаһынан тотоп алғандар тип иҫәпләнек. Ул саҡта уҡытыусылар Алла урынына күрҙек.

Өфө сәнғәт училищеһында уҡығанда рус телен насар белеүебеҙ арҡаһында беҙгә бик ҡыйынға тура килде. Белем алыр өсөн рус телен белергә кәрәк, өҫтәүенә, белем алыр өсөн дә, башҡорт булыр өсөн дә туған телеңде лә белергә кәрәк. Әле ҡыҙыбыҙ бишенсе класта уҡый, башҡортса һөйләшә, рус телен дә белә. Йәш тә биш айлыҡ малай үҫтерәбеҙ, өйөбөҙҙә гармун да, ҡурай ҙа, ҡумыҙ ҙа, тальян моңо ла яңғырап тора. Милли моңдо ишетеп, тойоп үҫкән балаға туған телде өйрәтеп тороу ҙа кәрәкмәй, бала тәбиғи рәүештә туған телендә һөйләшә башларға тейеш тип уйлайым.

**Илдар Шәрипов:** Минеңсә, өйҙәге аралашыу мотлаҡ туған телдә барырға тейеш. Күп осраҡта балалар башҡортса аңлаһалар ҙа, атай-әсәйенең башҡортса өндәшеүенә русса яуап бирәләр. Атай-әсәй бында уларҙың башҡортса һөйләшеүен талап итергә хаҡлы. Сабыйҙарҙың теле русса асылыуҙа йәнһүрәттәрҙең дә йоғонтоһо көслө. Башҡортса йәнһүрәттәр эшләүҙе дәүләт программаһы кимәленә күтәреү өлгөрөп еткән мәсьәлә.

**Искәндәр ҒӘЗИЗОВ:** Балалар русса һөйләшеүҙе мода тип аңлап, шул телдә аралаша башлай. Беҙгә хәҙер башҡортса һөйләшеүҙе модаға, йолаға әйләндереү тураһындағы мәсьәләне әүҙемерәк күтәрергә кәрәк.

**Рәис Исмәғилев:** Мин барыбыҙҙы ла борсоған был мәсьәләгә икенсерәк ҡараштамын. Рәсәйҙә беренсе булып Исмәғил Тасимов техник юғары уҡыу йорто аса. Петербург тау университетында уның кабинет-музейы ойошторолған. Беҙ ана шундай оло шәхесте биргән милләт. Шуға күрә үҙебеҙҙең дәрәжәне һәм илебеҙ тарихындағы урыныбыҙҙы белергә тейешбеҙ. Рәсәйҙең сит ил эштәре буйынса министры Лавровтың сығышын тыңлағанығыҙ бармы? Ул бер ваҡытта ла тураһын әйтмәй, кәрәклеһен генә еткерә. Ә беҙ һығылмалы була белмәйбеҙ, һәр ваҡыт тураһын әйтеп, бер-беребеҙ менән талашып тик йөрөйбөҙ. Тағы ла, мин уға тура бәреп әйтеп, ауыҙын йырҙым, тип маҡтанып йөрөйбөҙ әле ул. "Тураһын әйткән туғанына ярамаған", тиҙәр.

Компьютер, смартфон балаларҙың туған телен белмәй үҫеүендә бер ниндәй ҙә роль уйнамай. Балаларыбыҙ туған телендә һөйләшһен өсөн беҙ милләтебеҙҙең бәҫен күтәрергә, бының өсөн үҙебеҙ халҡыбыҙға лайыҡлы булырға бурыслыбыҙ.

**Рәмил Ғәйзуллин:** Минең дүрт улым бар. Уларҙың өсәһе башҡортса һөйләшә. Хабаровскиҙа йәшәгән улым беренсе оянан тип әйтәйек инде, туған телебеҙҙә һөйләшә алмаһа ла, атай, ағай, апай, олатай тигән һүҙҙәрҙе әйтә ала, башҡортса өндәшкәндә аңлай. Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин беҙгә килгәнендә Белоруссиянан бер журналист уға: "Башҡортостанда йәшәгән халыҡ вәкилдәре ниндәй телдә һөйләшергә тейеш?" - тигән һорау бирҙе. Рәсәй Президенты уға: "Башҡортостанда йәшәгән халыҡ вәкилдәре рус һәм башҡорт телдәрендә һөйләшергә тейеш", - тип яуап бирҙе. Нимә беҙ уның ошо һүҙҙәренә таяна алмайбыҙ? Нимә беҙҙең республиканан сыҡҡан Дәүләт Думаһы депутаттары Татарстан, Саха Якутия һәм башҡа республикалар депутаттары менән берлектә был мәсьәләне тейешле кимәлдә күтәреп сыҡмай?

Ә инде интернетҡа килгәндә, шул уҡ интернет Дағстанда ла, Чечняла ла, Саха Якутияла ла бар, әммә минең ишетеүемсә, уларҙа туған тел мәсьәләһе ул тиклем ҡырҡыу тормай.

▸ **Үҙәктән тороп телдәрҙе уҡытыу буйынса ниндәйҙер закондар ҡабул итеп була, дәрестәр һанын ҡыҫҡартып була. Әммә Мәскәүҙән тороп ғаилә сәйәсәтенә ҡыҫылып булмай, был осраҡта нимә әйтерһегеҙ?**

**Рәис Исмәғилев:** Яныбай Хамматовтың ейәнсәре Алһыуҙың ике ҡыҙы бар, бер ҡыҙы Мәскәүҙә, икенсеһе үҙебеҙҙә уҡый. Икеһе лә туған телебеҙҙе һыу кеүек эсә. Алһыу үҙе лә, Өфөлә тыуып үҫһә лә, башҡортса минән дә яҡшыраҡ һөйләшә. Бына бит нисек - барыһы ла ғаиләнән тора.

▸ **Сөнки уларҙың ҡартаталары Яныбай ағай Хамматов ҡатай ырыуынан, шулай түгелме?**

**Раян Миһранов:** Тарих күҙлегенән ҡарағанда, телдең үҙгәреүе була торған хәл. Беҙҙең халыҡ ҡыпсаҡ диалектына күскәнгә тиклем боронғо телебеҙҙә һөйләшкән. Гаплатөркөмдәр мәғлүмәттәре әлеге башҡорттарҙың тамырҙары боронғо скиф-сарматтарға барып ялғаныуы хаҡында ла һөйләй. Юҡҡа ғынамы, Лев Толстой дуҫы Александр Фетҡа "Башҡорттарҙан Геродотлыҡ аңҡый" тип хаттар яҙмаған.

Тел мәсьәләһенә килгәндә, башҡорт теле уҡытыусылары хәҙер балаларыбыҙға туған телде рус телендә аңлатып уҡытабыҙ тиҙәр. Был мәсьәлә киҫкен тора, әммә унан сығыу юлдары ла бар. Беҙ, теле асылғас ҡына бала туған телде аңлай башлай, тип уйлайбыҙ, әммә бала әсәһенең ҡарынында ятҡанда уҡ туған телен аңлай башлай. Шулай уҡ тыумаҫ элек үк ата-әсәһенең башҡа телдә аралашыуын да бала ишетә. Сөнки беҙҙең һөйләшеүҙәр ультратауыш аша барлыҡ күҙәнәктәргә үтеп инеп, бала ҡолағындағы тауышты ҡабул итеү механизмы структураһын үҙгәртә. Был осраҡта ҡарындағы бала туған телендәге тауышты насарыраҡ ҡабул итә башлай. Күп балалар, өйрәтергә теләгән хәлдә лә, башҡорт өндәрен әйтә алмай яфалана, сөнки уларҙың телмәр структураһы үҙгәргән. Ни өсөн Яныбай Хамматовтың ейәнсәре, бүләсәрҙәре туған телебеҙҙе яҡшы белә, сөнки уларҙың ата-әсәләре балаларҙы тыуғанға тиклем үк башҡортса аралашҡан.

Икенсе сәбәп белем биреү системаһында. Элек беҙ балалар баҡсаларында башҡорт төркөмдәре төҙөнөк, унда үҙебеҙҙең балаларҙы тупланыҡ. Хәҙер иһә башҡорт төркөмөндәге төрлө милләт балаларын байрамдарҙа ғына башҡортса милли кейем кейендереп, һаҡаулатып булһа ла, бер-ике шиғыр һөйләтәбеҙ. Йәғни башҡортлоҡ балалар баҡсаһында уҡ декорация төҫө ала башланы. Урта белем биреү системаһында Берҙәм дәүләт имтиханы төп урынды биләй. Ә ниңә был имтиханды туған телдәрҙә үткәреп, юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеүҙе лә талап итмәҫкә. Шуны тормошҡа ашырмай тороп, ата-әсәләр балаларының туған телдәрендә һөйләшеүен хупламаясаҡ. Улар балам уҡыһын, кеше булһын, туған телебеҙҙә өйөбөҙҙә булһа ла һөйләшербеҙ әле, тип үҙен тынысландыра.

Әлеге шарттарҙа беҙ фәҡәт шәхси мәктәптәр асып ҡына балаларыбыҙҙың туған телебеҙҙе өйрәнеүен тәьмин итә алабыҙ. Мин башҡа юлды күрмәйем. Беҙ, өлкән һәм урта быуын кешеләре, мәктәптәребеҙҙә башҡортса уҡып үҫтек. Миңә рус телен өйрәнеү өсөн өс-дүрт ай кәрәк булды. Был үтәлерлек ғәмәл. Эшем буйынса беләм: беҙгә ҡайҙан ғына уҡырға килмәйҙәр. Рус теленең бер хәрефен дә белмәүселәр ҙә бар, уларҙы өйҙә, мәктәптә инглизсә йә һинд телдәрендә уҡытҡандар. Беҙгә, рус телле мөхиткә килеп, улар барыбер кәрәкле белемде үҙләштерә ала бит.

Әле совет осоронда уҡытылған дәреслектәр, китаптар бар, улар юғалмаған. Шәхси мәктәптәрҙә башҡортса уҡыта алырлыҡ уҡытыусылар ҙа бар. Тик уҡыу йорттарына шәхси мәктәптәрҙән килеүселәрҙе Берҙәм дәүләт имтихандарһыҙ уҡырға ҡабул итеү шарттарын булдырырға кәрәк.

**Рәмил Ғәйзуллин:** Мин бер мәл Пекин ҡалаһында аҙаштым. Минең сит илдән икәнлегемде белеп ҡалған иллеләп кеше артымдын эйәреп йөрөй. Самолетҡа биш сәғәт ҡалған, әле сәғәт ярым йөрөйөм. Ҡараһам, урамда сәстәрен икенән үргән ике ҡыҙ тора. Уларға "Әссәләмәғәләйкүм" тип өндәштем, улар "Вәғәләйкүмәссәләм" тип яуапланы. Мин уларҙан башҡортса "Ҡунаҡхананы беләһегеҙме?" тип һораным. Тегеләр беҙҙең телгә оҡшатып "Беләбеҙ" тиҙәр. Артабан улар мине ҡунаҡханаға тиклем оҙатып барҙылар. Уйғыр ҡыҙҙары булып сыҡты улар. Әгәр ҙә мин үҙемдең туған телемде белмәгән булһам, һаман да Пекин урамында аҙашып йөрөр инем...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был рубрикала, ғәҙәттә, бер төбәк кешеләре үҙ райондарындағы, ауылдарындағы хәлдәр, көнитмеш проблемалары, ҡыҙыҡлы мәлдәр тураһында һөйләшә. Ҡатайҙар менән әңгәмә икенсерәк юҫыҡта килеп сыҡты: улар үҙ ырыуҙары йәшәгән төбәктәге хәлдәр тураһында ғына түгел, ә тотош халҡыбыҙға ҡағылышлы мәсьәләләрҙең фекер ебен таратты, бөгөн беҙҙең өсөн иң хәүефлегә әйләнгән күренеш - балаларҙың туған телдән яҙа барыуы тураһында борсолоу белдерҙе һәм уны хәл итеү юлдарына ла ҡағылып үтте. Ни әйтәһең инде Иҙелбашы уҙамандарына: афариндар! Рухи берләшмәгеҙ эшмәкәрлегенә уңыштар юлдаш булһын!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Берәй туй-фәлән, бәҫле мәжлес була ҡалһа, табындарын йәмләргә теләгәндәр иң беренсе Сажидәне саҡырҙылар, хәҙерге ялланған тамадалар һымаҡ, ҙур аҡсаға түгел, бушлай.*



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ОҘАТА КИЛ...

Хикәйә

## 1

Хәлфетдин Ҡотләхмәтов менән бала саҡтан бергә уйнап үҫтек, мәктәптә саҡта ла бер класта, хатта бер парта артына ултырып уҡыныҡ. Һәйбәт малай ине ул, эшсән, тырыш, аралашыуҙа ихлас, дуҫлыҡҡа тоғро. Тик белем алыу йәһәтенән генә артыҡлап ырата, алға китә алманы, өлгәше шул, "ҡәнәғәтләнерлек"тәр, уртансылар тирәһендә уралды. Шуғалыр ҙа, өлгөргәнлек аттестатын алыу менән башҡа уҡыу алдынғылары һымаҡ, ҡалаларҙағы махсус урта, юғары уҡыу йорттарына ынтылып мәшәҡәтләнмәй, Юлдыбай СПТУ-һының бер йыллыҡ тракторсылар курсын бөтөргәндән һуң, ауылыбыҙға ҡайтып, етеҙ хәрәкәт яратҡанға тракторҙың сылбырлыһына түгел, үҙе әйтмешләй, өлөшөнә төшкән көмөшөнә - яңы ғына заводтан ҡайтарылған тәгәрмәслеһенә ултырҙы.

Мин Сибай медицина училищеһының фельдшерҙар төркөмөн тамамлап, үҙебеҙҙәге табип амбулаторияһына мөдир сифатында эшкә ҡайтҡанда Хәлфетдин күрше ауылдың Сажидә исемле ҡыҙы менән дуҫлаша ине инде. Сажидә башланғыс кластарҙан мәктәбебеҙҙә уҡығас, ауылыбыҙ кешеһе иҫәпләнде, тиҫтерҙәре менән ҡатышып, аралашып, ике көндөң береһендә беҙҙә булды. Ул төҫкә-башҡа урта сибәр, мөләйем йөҙлө, тәбәнәк буйлы, ҡаҡса кәүҙәле, ирәбе фиғелле, башҡа ҡыҙҙарҙан айырмалы рәүештә килешле, бөхтә, модаға ярашлы итеп кейенә белгән остоҡай ҡыҙ ине.

Әммә унын төп ҡыҙыҡһыныуы, мауығыуы, юғарынан бирелгән илаһи һәләте - йыр-моңда булды шикелле. Байрам һайын ҡуйылған концерттарҙа һис ҡасан сәхнә түренән төшмәне, унын һәр сығышын алҡыштарға күмеп, ҡабат-ҡабат саҡырып сығарып йырлата торғайнылар, ә ул инде үҙ сиратында ялынмай, кис буйы тамашасыларҙы йыры менән әүрәтергә, кинәндерергә, сихырларға әҙер. Әгәр мәлендә күтәрмәләүсе, ярҙам итеүсе, йүнәлеш биреүсе берәйһе табылып, сәнғәт юлынан китһә, ул, моғайын да, бик тә билдәле йырсы булып китер ине, быныһы инде бәхәсһеҙ, көн кеүек асыҡ. Халыҡ йырҙарын да, композиторҙарҙыҡын да үҙәккә үткәреп, йәнде тетрәтеп, илаһилыҡҡа, хискә сорнап, берҙәй оҫта, юғары кимәлдә, зауыҡлы итеп башҡарҙы. Ул йыры менән ҡуша тыуып, йыры менән генә йәшәне, унан көс, ҡөҙрәт, дәрт алды. Берәй туй-фәлән, бәҫле мәжлес була ҡалһа, табындарын йәмләргә теләгәндәр иң беренсе Сажидәне саҡырҙылар, хәҙерге ялланған тамадалар һымаҡ, ҙур аҡсаға түгел, бушлай. Хәйер, бөтөнләй бушлай уҡ түгел инде, күңелләнһен, дәртләнһен өсөн ҡойғандарҙыр, һыйлағандарҙыр, бәлки.

Ул да, Хәлфетдин һымаҡ, һабаҡ алыуға күңел һалмаған кеше булараҡ, мәктәптән сыҡҡас, башта Стәрлетамаҡ яғына китеп, троллейбуста кондуктор сифатында йөрөнө шикелле. Шунан ҡайтҡас, беҙҙең ауылдағы Үҙәк бүлексә фермаһына һауынсы булып эшләне, үҙе һымаҡ ситтән килгән бер нисә ҡыҙ-ҡырҡын менән дөйөм ятаҡта йәшәне. Шуны көтөп кенә торғандар тиерһең, ҡайтып төшөү менән уны кис һайын ҡабаттан таҡмаҡлы табындарға, шаулы юбилейҙарға саҡырыуҙар башланды, ә ундай мәжлес түрҙәренә нимә ҡуйылыуы, рюмкаларға, фужерҙарға, бокалдарға нимә ҡойолоуы билдәле...

Хәлфетдин менән Сажидә береһе икенсеһенә пар килгәнгә күрәлер, ихлас дуҫлаштылар, сөнки киске уйындарҙа, йәштәр араһында гел етәкләшеп кенә, күҙгә-күҙ ҡарашып ҡына йөрөй торғайнылар. Хәлфетдиндең йәрен табыуын, һөйөү утында янып яратыуын күргән мин дә уның мөхәббәтле күңел наҙын үҙһенеп ҡабул иттем.

Бер көн амбулаторияла ауырыуҙарҙы ҡабул итеп ултыра инем, оҙон сиратын сабыр еткеһын төҙәтеп, тоғро һуҡмаҡҡа ҡайырһаң, телең төшөп ҡалмаҫ ине, моғайын. Улайға уҡ китһә, һеҙгә, төплө уйлап аҡыллы фекер йөрөтә белмәгән йәштәргә ни, ике донъя, бер мөрйә, арба ыуатылһа - утын, үгеҙ үлһә - ит. Йәш саҡта кем кем менән дуҫлашмай ҙа, кем кем менән яратышмай, ҡултыҡлап оҙатышмай, кеше һүҙе кешене үлтерә, у ни һөйләмәйҙә, ни сәйнәмәй, тип артыҡлап ҡаршы килмәгәйнем башта. Әле утырып, тәфсирләп абайлаһам, эш тәрәнгә киткән бит, - тип һыу буйылай, бер тынанан сурытты Мәҙинә апай.

- Ниндәйерәк эш икән ул?

- Яңы ҡапҡаға инергә теләмәгән аңра бәрәндәй күҙҙәренде тупайтып таһырайтып ҡарамалар, баҫалҡылар, әйткәнемдән, кәңәшемдән сыҡмайҙар, ә бы тере саҡтағы сығынсы, алдына алғанын ҡуя белмәгән атаһына ошап торғаны бер тиҫкәре, үҙһүҙле.

- Күптән дуҫлашалар бит, - тигән булдым Хәлфетдиндең теләген, ҡарарын аҡларға тырышып.

- Ярай, аптыраған өйрәк арты менән сумған, йәне теләгән йылан итен ашаған, бы һәпрәһен, ҡойолдороғон...

- Белә-күрә буш хәбәр һөйләйһең, апай, Сажидә улай түгел дә инде!

- Тышы йәмле булыу менән иң тәүлә кешенең эсе эйәмле буһын у. Ярай, һинеңсә әйткәндә, шу һыланған-һыйпанғанын алһын да икән ти, башҡа йүнлерәк, тәрреп, яныма Хәлфетдиндең әсәһе Мәҙинә апай ҡабаланып килеп инде. Йөҙө саманан тыш борсоулы, борсоулы ғына түгел, нимәгәлер ҡобараһы осҡан. Инде лә өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа ултырып, бына, килдем әле, тигәндәй, тишерҙәй итеп миңә төбәлде.

- Ауырып киттеңме әллә, апай? - тип хафаланып һорай һалдым, сөнки уның үпкә сире менән яҙлы-көҙлө йонсоуын, йүтәлләп ыҙаланыуын яҡшы беләинем.

- Сирҙең дә ниндәйе бит әле, башты ашай торғаны, йыға һуҡмалыһы! - Апайым ҡулдары менән тубыҡтарына шапылдата һуғып, ауыр уфтанды.

- Әйҙәгеҙ, һөйләп ебәрегеҙ улайһа, тыңлап, тикшереп ҡарайыҡ, сир-зәхмәт бар нимә, дауалаһаң, үтә лә китә, - тигән булдым, тегене тынысландырып.

- Мыныһы тиҙ генә үтергә ошамаған. Тыңлап ҡарау, тикшереү һуңынан, ишеттеңме әле бер хәбәр?

- Ишетмәһәң - ишет, тиҙәрме әле?

- Күрмәмеш тә белмәмеш ҡыланған була тағы, дуҫындың, анау ситтә аҙып-туҙғандан һуң беҙгә ҡайтып, башҡа шөғөл тапмағанға һауынсылыҡҡа төшкән Сажидә менән тағылғанын, еҫкәшеп табышҡанын күреп-беләһеңдер у?

- Эйе, беләм. Бында бер ниндәй сер ҙә юҡ, барыһы ла ауыл халҡының күҙ алдында.

- Ил ауыҙына иләк ябырмын, тимә, һәммәһе белә, ҡырын, хилаф аҙым көллөһөнөң күҙ алдында, дуҫындан дошманың күп, теге икәүҙең көндәлек ҡылмыштарын, ҡыланмыштарын һуңлатмай, йылылай ғына еткереп торалар. Серләшкән яҡыны булараҡ тыйһаң, аймылышын, хатаулайтып, йәме, хәбәремдең айышына төшөнөп етмәнеңме ни, тағылышып һөйрәләләр, тинем дә баһа, бынағайыш! - Әйткәндәрен өнәп, ҡабул итеп еткермәүемде йөҙөмдән абайлап өлгөргән апайым, тауышын бер аҙ ипкә килтереп, йомшартып дауам итте. - Ауыл буйлап таралған ул-был ғәйбәткә артыҡлап иғтибар итмәһәм, Хәлфетдин тегенеһен алам, тик уға ғына өйләнәм, тейсе кисә кис ҡайтып инеп. Шул хаҡта ишеткәс, баш осомдағы күк ишелеп, аяҡтарым аҫтында ер убылдымы ни, күҙ алдарым ҡараңғыланып, ҡаҡ салҡанан тәгәрәп китә яҙҙым. Ошо арҡала өй эсендә тере ғауға ҡупты, түшем ҡыҫып, йөрәгем сәнсеп ебәреп, дәүлинием ныҡ күтәрелеп китте. Уйламаған ерҙә шулайтып Хәлфетдиндең үләткә тартым хәбәрен ишеткәс, дөмөгә яҙылды. Ҡапылғара үлеп китһәм, ҡустылары, һеңлеһе кемдең ҡулына ҡарап ҡала, шу хаҡта уйлап ҡараһасы, бы белекһеҙ. Ҡана, бумаһа, мынау нимәң менән үлсәп ебәр дәүлинйене! - Тыш та быш килеп атлас күлдәгенең еңен төрөргә керешеп китте, мин дә алдыма тонометрҙы яҡынайтып шылдырҙым, ҡолағыма фонендоскоп көпшәләрен кейҙем.

- Борсолорға урын юҡ, ҡан баҫымығыҙ юғары түгел.

- Шулай бумай тағы, услап-услап төймә дарыу эстем, йөрәк дауаһын, үәлирианкаһын тамыҙып йоттом, Фәһимә ҡыҙым түшәккә һуҙып һалып, маңлайыма һыулы сепрәк япты, аяҡтарыма йылы герилка терәне, шулайтмаһа, былғаса яҡты донъя менән хушлашыла ине. Ҡуй инде, ҡуй, тереләй ҡәбергә тығыр был уйһыҙ, уайымһыҙ, орҙо-бәрҙе фиғелле Хәлфетдин, ҡалған ҡусты-һеңлеләре килеп тороп тыңлаулытиплерәк, әҙәплерәк ҡыҙ таба алмағанмы, торғаны бер һайыҫҡан, шиҡрандаҡ, осҡалаҡ. Уларҙың елфай фиғелле тоҡомо ла тирәяҡҡа мәғлүм. Әсәһен күр ҙә ҡыҙын ҡос, тигән боронғолар, ә бының атаһы ла, әсәһе лә эсәләр, алған пенсиялары бөтһә , ауылдарын ҡыҙыралар, хәйерселәп, шунан аҙаҡ буласаҡ киленгә ҡайһылайтып күңел һалмаҡ кәрәк, ә, алма бит ағасынан алыҫ төшмәй!

- Һуң, ерле-юҡҡа яманлаһаң да, Сажидә һәйбәт кенә итеп эшләп йөрөй түгелме шул, ҡырын, килешһеҙ холҡон да күргәнем юҡ.

- Эйе, ҡайтҡандыр Эстәрле һынлы Эстәрлегә һыймай, кигәндер улымды сихырлап ҡаратып алырға! Унын табын һайын йырлап-бейеп, таҡмаҡ әйтеп типтергәнен, араҡыны, шуға оҡшаш башҡаһын төп күтәрә ебәргәнен ишетеп ятабыҙ. Бөгөн һәйбәт, бөгөн итәғәтле, ә иртәгә? Ҡош балаһы ояһында ни күрә, осҡанда ла шул, ҡана ла һуң, йырлап-бейеп кенә көн итеп булһа... - Мәҙинә апай күп бытылдауҙан ауыҙы ситтәренә йыйылған күбекте усы менән ҡоротто.

- Баштан уҡ кирегә һапламайыҡ әле.

- Һапламаған ҡайҙа, һаплайым, элекке көн, йә кисә тыумағанмын, беләм, әгәр Хәлфетдин өйләнәм, тип ҡырталашһа, ризалығым юҡ, фатихамды бирмәйем, бына шу, әгәр тиҫкәренән тыуған Сәләх еҙнәйең тере булһа, ул да сығарған ҡарарымды йөпләп, шулай тиер ине. Башында семтем уйы буған, аҡылы теүәл кеше эскелек күлендә яралған елғыуарҙы килен итмәҫ!

- Хәлфетдинде түгел, мине ҡыҙҙырып, этеп алып бараһың, бында ни ҡатнашым бар әле?

- Ништәп бумаһын ти, бар, бер сеүәтәнән ашап, бергә уйнап үҫкән, серләшкән, яҡын дуҫһың да баһа. Әгәр һинән аша ҡаға-һуға белешә ҡалһа, ошо әйткәндәремдең береһен дә төшөрөп ҡалдырмай, теҙеп еткер, еткереп кенә ҡалма - маңлайына һуғып тумбыт. Сығыр юлын быуып өй туп-һаһына арҡыры ятырмын, иллә баламдың яҙмышын у сәсрәп киткергә, албаҫтыға емерергә бирмәм, бирмәм! - Ҡулдарының тышы менән тиҫкәреләп бәддоға ҡылған Мәҙинә апай нисек килеп инһә, шул етеҙлегенә ишекте ҡаҡлыҡтыра ябып сығып китте.

* * *

Бер аҙна үткәс, эш аҙағында яныма Хәлфетдин һуғылды, өҫтөндә мазутҡа батҡан фуфайкаһы, һырма салбары, эштән ҡайтып килеүелер. Инде лә амбулаторияла башҡа кеше күренмәгәнлектән, асыҡ ишектең яңағына һөйәлде:

- Һаумы, бырат?

- Привет! Ни эш бөтөрөп йөрөп ятыш?

- Мына, килдем әле...

- Амбулаторияға һуғылғасың һинең дә йөрәгең ҡағып, ҡан баҫымың күтәрелеп киттеме әллә, давай тикшереп ебәрәйек! - Мәҙинә апайҙың миңә килеп сығыуына ишаралап һуҡтырҙым.

- Әлегә бирешкән юҡ.

- Бирешмә шул! - Йөҙө болоҡһоу Хәлфетдинде кәйефләндерергә теләп, шулай тинем.

- Ошо аҙна аҙағында бушһыңмы?

- Район үҙәгенә әлегә саҡырмайҙар былай, минең тынғыһыҙ эште беләһең бит, ҡабалан берәй нимә килеп сыҡмаһа.

- Һинең янымда булыуың кәрәк.

- Ҡунаҡҡа саҡырып алырғамы әллә иҫәбең?

- Саҡырам.

- Ул саҡта ауылдан сығыу юҡ.

- Сыҡма шу. Миңә кейәү үнгәре булып бараһыңмы?

- Ҡайҙа?

- Йыраҡ түгел, Һаҡмар аша ғына.

- Кемгә барырыбыҙ билдәле. Әсәйең, өйҙәгеләр ризамы һуң?

- Ризалар...

- Нимәнелер әйтеп еткермәйһең түгелме?

- Ризалар, тип әйттем бит бер тапҡыр, ыуаҡайланып, бисәкәйләнеп нимә төпсөнәһең!

- Мин бисәкәйгә тағы ла бер тапҡыр айырып әйт әле, Мәҙинә апай ризамы һуң?

- У ни бер хәбәрҙе ҡырҡ тапҡыр ҡабатлап көнө-төнө ҡолаҡ итен ашаны инде, һуңынан, ни теләһәң, шуны эшлә, балалыҡтан күптән сыҡҡанһың, тип ҡулын һелтәне, ызнашит ҡаршы түгел.

- Унын ни хаҡта тылҡығанын ишеттем, беләм, барыбер әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алырға ине.

- Уға түгел бит, миңә тормош көтөргә, миңә йәшәргә.

- Әләйгәс, былай ҙа ҙур ғаиләгеҙ тағы ла ишәйергә тора икән, хәйерлегә булһын.

Кәләште әйттергәндән һуң ҡайҙа морон төртөргә иҫәбең, өйөгөҙҙә бит Мәҙинә апайҙан тыш, ике ҡустың, һеңлең бар, тар ергә таяу булып өҫтәүенә һеҙ?

- Ферма ятағының бер яғы буш тора, римунтлайым да шунда, управ менән һөйләштем-килештем, ары күҙ күрер.

**(Дауамы бар).**

ИЖАДСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Башҡортостандың халыҡ артисы Лилиә Рауил ҡыҙы Ишемйәрованың исеме республиканана ситтә лә яҡшы таныш. Йыр сәнғәтенә тоғролоҡ һаҡлаған ижадсы Ейәнсура районының Иҙелбәк ауылында донъяға килгән. Йырға булған мөхәббәт ғаиләлә һалына. Үҙенең маҡсатына тоғро ҡыҙ һөнәри белемен Өфө сәнғәт училищеһында нығыта. Артабан Өфө сәнғәт институтында оҫталығын камиллаштыра. Бөгөн Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Лилиә Ишемйәрова йөҙөп йөрөгән эшләгән, ижад иткән сәнғәт әһелдәренең береһе. Башҡорт йыр сәнғәтен сит ил сәхнәләренә сығарыусыларҙың береһе лә бит әле ул. Әлеге мәлдә Лилиә Рауил ҡыҙы тамашасылары өсөн ҙур концерт әҙерләй. Беҙ талант эйәһенә бары тик уңыштар ғына теләйбеҙ.**

# ЛИЛИӘ ЙЫРЛАЙ, УРАЛ БЕЙЕЙ,

## ә балалары ни эшләй?



➔ **Лилиә, үтелгән йылдар бейеклегенән ҡарап, эшләнгән эштәр, сәнғәт юлында яһалған асыш-табыштар тураһында нимә әйтергә була?**

- Әлхәмдүлилләһ, 33 йыл инде ижадым дауам итә, байтаҡ йырҙар йырланылды, репертуарымда төрлө телдәрҙә башҡарылған 500-ҙән артыҡ йыр бар. Сит илдәрҙә лә шәхсән концерттарым булды, 33 башҡорт халыҡ йырынан торған дискым сыҡты, джаз оҫтаһы Олег Киреевтың "Орлан" төркөмө менән Мәскәүҙә лә джаз стилендә йырлау бәхете тейҙе, ғөмүмән, ижадым менән бәхетле кеше мин.

Тамашасылар мине күберәк эстрада һәм башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарған йырсы тип белә. Ә мине хайран иткәне - борондан килгән буҙлау һәм сеңләү жанрҙары. Уларҙы интернет музыкаль платформаларына һалып, ҡыҙыҡһынған йәштәребеҙгә тыңларға, өйрәнергә мөмкинлек бар һәм шул да мине ҡыуандыра. Йәштәрҙе мин үҙем бик яратып тыңлайым. Бэби Ти, Бишбармаҡ, AY YOLA төркөмөнән Аделдең йырҙарын бик яратып тыңлайым, уларҙың сығыштарын күҙәтеп барам. Афариндар, үҙҙәренең ҙур ижадын беҙҙең башҡорт сәнғәтен юғары күтәреүгә, яңынан-яңы бейеклектәр яулауға бағышлайҙар.

➔ **Тамашасы Лилиәне моңло тауышлы йырсы тип белә. Ләкин артист бит йырлап ҡына ла йөрөмәй, ул тамашасыһы менән яҡындан аралаша. Ниндәй мәлдәр айырыуса иҫтә тороп ҡала? Бәлки, ҡыҙыҡ хәлдәргә лә тарырға тура килгәндер…**

- Эйе, булды ундай хәлдәр ҙә. "Сыҡ миңә кейәүгә, Лилиә" исемле программам менән Бөрйәнгә гастролгә барҙыҡ, программа Хәйбулла районынан Фәнил Әбделмәнов тигән үҙешмәкәр яҙыусының "Сибайға, Лилиәгә" тигән юмористик әҫәре буйынса ҡуйылды. Ҡыҫҡаса әйткәндә, Ғилмитдин Малтабаров исемле ауыл егете, ат ҡарауҙы, кейәүгә сығырға тәҡдим яһай. "Ауыл буйлап саң борлатып бергәләп матаста йөрөрбөҙ", тигән һүҙҙәре бар уның. Концерт тамамланғас, залдан иҫ китмәле матур, ҡап-ҡара сәсле, оҙон буйлы егет килеп сыҡты һәм былай ти: "Бажалыста, Лилиә, сыҡма һин Ғилмитдингә кейәүгә, миңә сыҡ, подумаешь, уның матасы бар, мин һине трактор менән ауыл буйлап йөрөтөрмөн", - ти. Зал көлә, ҡул саба, ә мин һүҙһеҙ ҡалдым... Ул егет күптән ғаилә ҡороп йәшәп яталыр инде, әгәр ҙә ошо интервьюны уҡыһа, йәки Бөрйәндәге тамашасылар ул хәлде иҫләп, уға еткерһә, ҙур теләк менән ул егетте ғаиләһе менән 26 ноябрҙа уҙасаҡ юбилей концертыма саҡырыр инем.

Себер яҡтарында гастролдә йөрөгәндә булған бер ҡыҙыҡ хәлде лә телгә алайым әле. Сургут ҡалаһында ҡунаҡҡа алып ҡайттылар. Унда мин, ирем Урал, Әлмира Шәриф ҡыҙы Ҡыуатова менән бергә барҙыҡ. Өҫтәл тирәләй ултырғас, йорт хужалары: "Нисек ҡыҙығыҙҙы мәктәптән гастролгә ебәрҙеләр? Һорап алып китәһегеҙме?" - тип ҡыҙыҡһындылар. Беҙ бер ни аңламай, бер-беребеҙгә ҡарашып алдыҡ, баҡтиһәң, мине Альмира апай менән Уралдың ҡыҙы тип уйлағандар икән. Шуны белгәс, рәхәтләнеп көлөштөк инде.

➔ **Һеҙ - ҙур музыкаль ғаилә. Балаларығыҙ ҙа ошо мөхит эсендә, сәнғәт һауаһын һулап үҫкән быуын. Уларҙың киләсәген нисек күҙаллайһығыҙ?**

- Беҙ Урал менән балаларыбыҙҙы үҙаллы итеп үҫтерергә тырыштыҡ, икебеҙ ҙә гел юлда йөрөгәс, улар үҙҙәрен үҙҙәре ҡарарлыҡ булһын, тинек. Шөкөр, өсәүһененең дә тауыштары матур. Ижади яҡтан Зөлхизә ҡыҙыбыҙ бәләкәй саҡтан "Иләү" тапшырыуын алып барҙы, "Тамыр" телеканалында байтаҡ ҡына нәфис фильмдарҙа төштө, үҫә килә Фирүзә Париждың Нәркәс исемле ҡыҙы менән "Наҙ" тип аталған төркөм ойоштороп, "Йәшлек" шоуҙа ҡатнашып йөрөнөләр. Әммә ул сәнғәт юлын һайламаны, иҡтисад буйынса белем алды, әлеге көндә Мәскәүҙең лингвистик университетында уҡый. Арыҫланбай улыбыҙҙың бала сағында йырсы Витастың репертуарынан йырлаған йыры ныҡ иҫтә ҡалған, уның да сәнғәткә артыҡ тартылышы юҡ, спортты үҙ итә, тхэквондо менән шөғөлләнеп, байтаҡ ҡына ҡаҙаныштар яуланы. Ишморат улыбыҙ байтаҡ йылдар "Тамыр" йыр ансамбленә йөрөнө, тауышы матур, март айында Сибай филармонияһында үткән "Араларҙа йылдар" тип исемләнгән концертта "Йондоҙом" йырын башҡарҙы, тамашасылар бик йылы ҡабул итте, шулай уҡ нәфис фильмдарҙа ҡатнашты, киләһе йылға, Алла бойорһа, мәктәпте тамамлай. Беҙ, атай менән әсәй булараҡ, балаларға киң осош ҡына теләйбеҙ. Үҙҙәре һайлаған һөнәрҙәренә тоғро булып, илһам-дәрт алып йәшәһендәр, тибеҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА яҙып алды.**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# КӨСҺӨҘ БУЛЫРҒА ХАҠЫМ ЮҠ...

**Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе Миңлегөл һәм Али Алтынбаевтар ғаиләһе биш бала тәрбиәләй. Берҙән-бер улдары Илдар - нәҫелде дауам итеүсе, ғорурлыҡ булһа, сәскәләй дүрт ҡыҙы - тормош биҙәге, өй йәме.**



Ғаилә башлығы - Махсус хәрби операция яугиры. Миңлегөл Марат ҡыҙы ҡаланың 9-сы "Ҡайынҡай" балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләй. Уларҙың балалары Эльвина, Эмилия, Илдар, Амалия - мәктәп уҡыусылары, иң кесеһе Адэлия урындағы 3-сө "Хыял" балалар баҡсаһының өлкән төркөм тәрбиәләнеүсеһе. Һәр заманда ла ишле ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеү, балаларҙы лайыҡлы тәрбиәләү өсөн көс тә, түҙемлек тә кәрәк. Был иһә ата-әсәнең тырышлығы, көндәлек хеҙмәте менән өлгәшелә.

Ире 2024 йылдың 17 ноябрендә Рәсәй Оборона министрлығы менән контракт төҙөгәс, ниҙәр кисергәнен Миңлегөл Марат ҡыҙы үҙе генә белә. Биш бала менән яңғыҙ ҡалыу - гүзәл зат өсөн етди һынау. Шулай ҙа ул күңелендәгеһен тышҡа сығармай, хис-тойғоһон үҙендә һаҡлап йәшәй. "Көсһөҙ булырға хаҡым юҡ, балалар минең күҙ йәшемде күрергә тейеш түгел", - ти ул.

2025 йылдың 5 марты, яугир иренең ҡатмарлы хәрби заданиеға ебәрелгән көнө, күңеленә иң ауыры булып яҙылған. "Унан алдағы төндә насар төш күрҙем. Бәйләнеш юҡ, иремдең телефоны яуап бирмәй. Балаларҙан күҙ йәшен йәшереп, доға уҡыйым. Һуңыраҡ "Алғы һыҙыҡ"ҡа инер алдынан да, яраланғандан һуң, аңына килгәс тә иремдең дә доға ҡылғанын белдем. Билдәһеҙлектә үткән аҙнаның ни икәнен был хәлде кисергән кеше генә аңлар. Али шылтыраҡҡас Аллаһы Тәғәләгә рәхмәттәр уҡыным", - тип һөйләй яугир ҡатыны.

Көслө заттың ил һаҡсыһы икәнен беләбеҙ, шулай ҙа береһенән-береһе бәләкәй биш балаһын ҡалдырып, МХО-ға юлланыу уға ла еңел бирелмәгәндер, моғайын. Бында эше лә, ашы ла булған, тигәндәй. Хеҙмәт хаҡы яҡшы ғына түләнгән ойошмала эшләп йөрөгән. Үҙе менән һөйләшкәндә "Яу ҡырына сығып китеү ҡарарын нисек ҡабул иттегеҙ?" тигән һорауға, "Балаларымдың имен киләсәген уйлап сығып киттем", тип яуап ҡайтарғайны Али.

"Мин дә улар хаҡына көслө булырға тейешмен. Атаһы менән ғорурланып, уның ҡайтыуын көткән балалар күп ваҡыт үҙемә лә терәк-таяныс, көс сығанағы булып китә. Былтыр Али өс аҙна өйҙә булғанда янынан бер аҙым да китмәнеләр. Бигерәк тә атай ҡыҙы булған Адэлиябыҙ ишек асылған һайын уның ҡайтып инеүен көтә", - ти әсә.

Яуҙағы көслө затты һүҙ менән дә, эш менән дә ҡеүәтләргә кәрәк, ти әңгәмәсем. Шуға ла улар быйыл балалары менән бергә "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" республика конкурсында ҡатнашырға дәрт иткән. Ғаилә абруйын нығытыуға йүнәлтелгән конкурсҡа уларҙы ҡаланың 3-сө "Хыял" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Эльвира Вахитова әҙерләгән. Бөтә һынауҙы ла уңышлы үтеп, Алтынбаевтар муниципаль этапта беренсе урын яулаған. Тап улар район данын республика кимәлендә яҡлап, төбәк этабында өсөнсө урынға лайыҡ булған.

Миңлегөл Марат ҡыҙы әйтеүенсә, бөгөн уларға ата-әсәһе, яҡын кешеләре ҙур терәк һәм ярҙамсы. "Ил һағындағылар иғтибарын өйҙәге эш-мәшәҡәткә түгел, хәрби бурысын уңышлы һәм юғалтыуһыҙ үтәүгә йүнәлтергә тейеш. Шул саҡта ғына дошманды еңеп буласаҡ", - ти тамамланы һүҙен яугир ҡатыны.

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

✓ *Әгәр ҙә буласаҡ әсә тәмәке тарта икән, балаһын да төҙәлмәҫлек сирҙәргә дусар итеүе бик ихтимал. Ауырлы саҡта тәмәке тартыу иң тәүҙә ҡарындағы балаға кислород етмәүенә килтерә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АНТИБИОТИК ҺАҢҒЫРАУЛАТА

■ Антибиотиктар ҡабул иткән ваҡытта һаҡ булырға кәрәк, тип иҫкәртә Миссурилағы Медицина мәктәбе университеты белгестәре. Бәхетһеҙ, бындай дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡулланмау ишетеү һәләтенең насарайыуына килтереүе ихтимал икән. Ғалимдар тикшереүҙәрҙә ике препарат - канамицин һәм уның балалар өсөн тәғәйенләнгән аналогы гентамицин нигеҙендә үткәрә. Был ике препарат та ауырыуҙарға йыш тәғәйенләнә. Табип билдәләгән дозаны 10-20 процентҡа ғына арттырыу ҙа ишетеү һәләтен юғалтыуға килтереүе ихтимал, тигән һығымтаға килә ғалимдар.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло бутҡаһы тора. Был бутҡала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлекте артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һөмбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сөтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - көрмәлә, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урынды омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлекте холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Британия ғалимдары һанап сығарыуынса, ҡала халҡы йыл һайын уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла бысраҡ һауа һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә. Экологик комитет ағзаһы Джоан Валей был мәсьәләне тиҙ арала хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләй. Билдәле булыуынса, машиналар PM10 тип аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Британияның ҡайһы бер өлкәләрендә был өлөшсәләр күләме Евросоюз билдәләгән норманан күпкә юғары. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм туҡымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тиңләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыянын иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр. Шул уҡ ваҡытта Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, төтөн тәьҫиренән йөрәк сире кисекенләшеп - 379 мең кеше, респиратор инфекцияларынан - 165 мең, астманан - 36 мең 900, үпкә яман сиренән 21 мең 400 кеше үлгән.

■ Тәмәке тартыу бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлегенә насар йоғонто яһай. Айова штаты университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙың уйлау һәләте түбәнәйә. Тест ярҙамында ғалимдар баш мейеһе функцияларын тикшерә һәм фекерләү функцияһының боҙолоуын асыҡлай. Был ҡатын-ҡыҙ организмында бүленеп сыҡҡан эстроген гормоны менән бәйле һәм тәмәке ҡанда был матдә концентрацияһының аҙайыуына килтерә.

■ Әгәр ҙә башығыҙ йыш ауырта икән, дарыуханаға барырға ашыҡмағыҙ. Тайвандың милли университеты табиптары белдереүенсә, баш ауыртыуын ябай массаж бөтөрә. Бынан тыш, массаж күңелһеҙ хәлдәрҙә онотоорға мөмкинлек бирә. Ғалимдар фекеренсә, массаж депрессияны еңергә лә ярҙам итәсәк.

ТАРИХИ СЕР ҺАНДЫҒЫ

# ИМАНАЙҘА...

## мәмерйә арыҫландары ҡалдыҡтары бар

**Башҡортостанда тәүге тапҡыр Рәсәй палеолит, геология һәм палеонтология буйынса алдынғы белгестәрҙең ялан семинары үтте.**



Уны Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге һәм "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы ойошторҙо. Семинарҙа Мәскәү, Санкт-Петербург, Новосибирск, Волгоград, Һарытау, Махачкала, Екатеринбург фәнни үҙәктәре белгестәре ҡатнашты. Сара Көньяҡ Урал геологияһы тураһында яңы мәғлүмәттәр алыуҙы һәм артабанғы хеҙмәттәшлек өсөн перспективалар билдәләүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Ғалимдар барған объекттарҙың береһе - Мәләүез районында, Нөгөш ҡасабаһынан алыҫ түгел, "Башҡортостан" милли паркы биләмәһендә урынлашҡан Иманай-1 мәмерйәһе. Был һуңғы боҙлоҡтарҙы гигант йыртҡыстарҙың уникаль урыны: бында 400-ҙән ашыу мәмерйә арыҫланы һөйәге табылған. Был кәм тигәндә биш йәнлектең һөйәктәре. Был мәмерйә Уралдағы һәм, бәлки, донъялағы иң бай мәмерйә арыҫландары ҡалдыҡтары, шулай уҡ донъялағы иң ҙур бәләкәй мәмерйә айыуы һөйәктәре тупланмаһы булып тора. Шулай уҡ бында күп кенә кремний изделиелар табылған. Был Уралда 35-45 мең йыллыҡ урта палеолиттың иң ҙур төйәге. "Семинарҙа ҡатнашыусылар мәмерйәне ҡарап сыҡты, ҡаҙыныу стратиграфияһын өйрәндe һәм берҙәм һығымтаға килде: һәйкәл ил масштабында ҙур әһәмиәткә эйә. Мәмерйәне күләмле тикшереүҙе дауам итеү һәм алынған һөҙөмтәләрҙе тиҙерәк баҫтырып сығарыу кәрәклеге айырыуса билдәләнде", - тип һөйләнеләр "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығының матбуғат хеҙмәтендә.

Мәмерйәне Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының (Вячеслав Котов) һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө бүлексәһе Үҫемлектәр һәм хайуандар экологияһы институтының (Дмитрий Ғимранов) берлектәге экспедицияһы тикшерә.

Ялан семинарында ҡатнашыусы ғалимдар шулай уҡ Көньяҡ Урал арьяғы территорияһындағы боронғо ҡомарҡтыларҙы ҡараны. Улар араһында Ҡарабалыҡты күлендәге Мысовая торағы, Күсем-6 торағы, шулай уҡ Әбйәлил районының Күсем ауылы эргәһендәге Күсем-7 һәм Күсем-8 урындары бар. Был һәйкәлдәр ғәҙәти булмаған Сабакты күле эргәһендәге бейек булмаған ҡалҡыулыҡтарҙа урынлашҡан. Табылдыҡтар шунда уҡ гумус аҫтында, доломит ҡырсынташы менән һоро балсыҡ ҡатламында табыла. Шуға күрә Күсимов индустрияһының йәше тураһында һорау барлыҡҡа килә. Ғалимдар геологик кисәлештәрҙе өйрәнә һәм датаһын билдәләү, фәнни тикшеренеүҙәр өсөн өлгөләр ала. Тикшеренеүселәр фекеренсә, Күсем ауылы районында палеолит ҡомарҡтылары тупланыуы Төньяҡ Евразия территорияһында палеолит осорондағы мәҙәни процестарҙы аңлау өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# РӘССАМДАРҘЫ ЛА...

## боронғолар илһамландыра



**Бөрйән районында "Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы янында икенсе тапҡыр үҙенсәлекле проект - "Беренсе һанлы пленэр" үтте. Унда Мәскәү, Санкт-Петербург, Һарытау, Ҡытай Халыҡ Республикаһы һәм Өфө рәссамдары ҡатнашты.**

Пленэрҙа рәссамдар традицион киндерҙән һәм буяуҙарҙан баш тартып, планшеттар, телефондар, фотокамералар, график программалар һәм яһалма интеллект ярҙамында эшләй. Спутник технологиялары ярҙамы менән рәссамдарҙың бер өлөшө, камера объективтары аша Башҡортостан күренештәре менән илһамланып, эштәрҙе ситтән тороп башҡарҙы. Ҡатнашыусыларҙың береһе Вадим Хәлитов һөйләүенсә, рәссамдарға Башҡортостандың тәбиғәте, мәмерйәнең серле мөхите һәм милли ашһыу нык оҡшаған. "Айырыуса музей иғтибарҙы йәлеп итте, унда боронғо кешеләр, уларҙың һүрәттәре һәм боронғо донъя тураһында белергә мөмкин. Шулай уҡ "Урал батыр" эпосына арналған кабинет ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Урындағы фауна менән таныштырыу ҙа булды. Был йыландар, айыу эҙҙәре генә түгел, серле йән эйәләре лә. Мәскәү ҡунаҡтары метр ярымлыҡ терпе күрҙек тип раҫлаһа, урындағы халыҡ уларға ғәйәт ҙур ҡуныҙ тураһында һөйләне, хәҙер уның хаҡында легенданы Башҡортостандан ситтә лә беләләр".

Осрашыу һуңында һанлы пейзаждар, видеоарт һәм концептуаль эштәр онлайн-күргәҙмәне булды. Был әҫәрҙәр Рәсәй сәнғәтенең һанлы фондының бер өлөшө булып тора һәм илдең мәҙәни бәйләнештәрен үҫтереү өсөн файҙаланыла. Рәссам Вадим Хәлитовтың арт-объекттарының береһе ҡурсаулыҡҡа бүләк итеп тапшырылды һәм музей коллекцияһын тулыландырҙы.

**Гөлфиә АКУЛОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# НАСАР ҒӘҘӘТТӘН...



**Исламда сәләмәт рух һәм сәләмәт тән менән бәйле идея бик юғары. Мәҫәлән, Ислам дине тәмәке тартыу кеүек йәмғиәтебеҙҙә ғәйәт ныҡ таралған насар ғәҙәткә кире ҡарай.**

Бөгөнгө көндә тәмәке тартыуҙың кеше һаулығына насар тәьҫир итеүен дәлилләгән кире ҡаҡҡыһыҙ фәнни факттар бар һәм улар бер үк нәмә тураһында һөйләй: тәмәке тартыу хәрәм эш. Сүрәләрҙә әйтелгән: "Үлтермәгеҙ һәм үҙегеҙҙе үлемгә этәрмәгеҙ! Аллаһ ысын мәғәнәһендә һеҙгә мәрхәмәтле!" "Һаулығыңды буштан-бушҡа исраф итмә. Исрафлыҡ - Иблестең туғандары, ә Иблес Аллаһҡа тоғро түгел".

Тәмәке тартыусылар йыш ҡына: "Миндә һеҙҙең ни эшегеҙ бар?"- тип һорауһан. Был бөтөнләй дөрөҫ түгел. Бигерәк тә махсус рәүештә билдәләнгән урында ғына түгел, һәр ҡайҙа - урамда ла, подъезда ла тәмәке тартҡан кешеләр үҙҙәренең дә һаулығын бөтөрә, башҡаларҙы ла аямай. Тартмаған кешенең өйөндә тәмәке көйрәтеү - иң ҙур әҙәпһеҙлек, сөнки булмәләрҙәге еҫ һеҙ сығып киткәндән һуң да оҙаҡ ҡына һаҡланып ҡаласаҡ.

Тәмәке тартҡан ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә инде, насар ғәҙәткә бәйле сирҙәр үпкә яман шеше, йөрәк өйәнәктәре, һ.б. менән генә сикләнеп ҡалмай әле. Әгәр ҙә буласаҡ әсә тәмәке тарта икән, балаһын да төҙәлмәҫлек сирҙәргә дусар итеүе бик ихтимал. Ауырлы саҡта тәмәке тартыу иң тәүҙә ҡарындағы балаға кислород етмәүенә килтерә. Тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың балалары ваҡытынан алда, йә ауырлығы етмәй, йә ғәрип булып тыуа. Шулай уҡ бындай балалар төрлө инфекцияларға һәм астма ауырыуына бирешеүсән була, тип иҫәпләй табиптар. Әлбиттә, кешенең тәмәке тартырға йәки тартмаҫҡа хоҡуғы бар, әммә ләкин ҡатын-ҡыҙ йөклө сағында, йәки балалары алдында тәмәке тарта икән, ул балаларына бер ниндәй ҙә һайлау ҡалдырмай.

Иң ҡулайы - тәмәкене бөтөнләй тартмау. Ҡатын-ҡыҙға тәмәке тартыу бер ҙә матурлыҡ та, сәләмәтлек тә өҫтәмәй. Бәғзе берәүҙәр тәмәкене тынысланыу, үҙен ышаныслы итеп тойоу өсөн тарта. Ундай осраҡтарҙа кешегә бары тик бер юл ҡала - Аллаһҡа ялбарыу. Ул ғына һеҙҙең күңелегеҙгә тынысланыу һәм ярлыҡау, ышаныс килтерер. Рухи яҡтан ныҡ тороу өсөн доғалар уҡыу, зекер әйтеү зарур.

ИРӘНДЕК ҮҪЕМЛЕКТӘРЕ

# ЕРКӘҮЕК

**Бесән ваҡыты. Һутка туйынған үләндәр бер аҙ ҡарая төшкән. Болонлоҡтар төрлө-төрлө сәскәгә күмелгән. Ошондай фонда алыҫтан уҡ күренеп, муйыл еҫе аңҡытып ултырған үләнде еркәүек (лабазник, таволга вязолистный - Filipendula ulmaria (L.) Maxwim) тип атайҙар. Ҡайһы бер урындарҙа уны аҡбаш үлән, ерегүлән, еркүлән, ерекләүек, еркәүләп, ерек ҡураһы тип тә йөрөтәләр.**



Еркәүек иртә яҙ уҡ үҫеп сыға. Йәйләп ҡына япраҡ яра, ҡыуаҡлана һәм июндең урталарында сәскә ата. Сәскәләре ваҡ ҡына булып, ап-аҡ йәки көрән аҡ төҫкә инә. Еркәүек йәй буйына сәскә ҡоймай, тирә-яҡты биҙәп ултыра. Шуға ла тәбиғәттең иң баҙыҡ биҙәктәренең береһе булып һанала. Юҡҡа ғына Франция уға болон батшаһы тигән исемде бирмәгән икән.

Еркәүек бөтә Европала, Рәсәйҙең бик күп ерҙәрендә: дымлы болондарҙа, ҡыуаҡтарға бай булған шишмә, йылға буйҙарында, урман аҡландарында күпләп үҫә. Ул бигерәк тә ҡырҡылған ағас диләнкәләрендә йыш осрай.

Уның һабаҡтары тура күтәрелгән, шыма, осона тиклем япраҡтар менән ҡапланған. Тамырсаһы йыуан, үрмәләүсән. Ҡыйғас япраҡтары бысҡы ситле, осҡо япрағы башҡаларынан ҙурлығы менән айырылып тора. Ул 3 - 5 өләшкә бүлкәтле.

Еркәүекте кеше бик борондан файҙалана белгән. Был турала уның исеменең килеп сығыу тарихы һөйләй. Үрҙә күрһәтелгәнсә, уның бер нисә исеме бар, һәм улар бөтәһе лә ерек һүҙе менән бәйләнгән. Ә ерек ағасы менән был үләндең ниндәй уртаҡлығы бар һуң, нинә уларҙың икеһе лә бер һүҙ тамырынан? 1969 йылда Ленинградта сыҡҡан "Боронғо төрки һүҙлеге"нең 257-се битендә "йер" һүҙе тураҡларға, ярғыларға, һындырырға тигән мәғәнәне бирә, тиелгән. Йәғни һүҙ яһаусы - "к" аффиксы ҡушылғас, ҡылым предмет мәғәнәһен ала, йәғни тураҡланыусы, ярылыусы, һыныусы. Сағыштыр: көрә-к - көрәк, илә-к - иләк һ. б. Ерек ағасының бик мурт, тиҙ һынып барыуын иҫәпкә алһаҡ, уға исем ошо билдәһенә ҡарап бирелгәнлегенә төшөнөрбөҙ. Ә еркәүек ерек кеүек үк бик мурт, тиҙ генә һынып барыусан. Тимәк, ул да атаманы шул уҡ билдә буйынса алған икән. Ә "ерек" һүҙе, күреүебеҙсә, бик боронғо. Төрки халыҡтарының дөйөм тарихына, беҙҙең эраның беренсе мең йыллығына барып тоташа.

***Еркәүек эсемлеге.*** 50 г яңы ғына өҙөп алынған еркәүек сәскәләре, 60 г бал, 1 л һыу. Сәскәләрҙе һыуҙа ҡайнатып алалар ҙа 30 минут һыуыталар. Артабан, бал һалып, һыуытҡысҡа ҡуялар.

***Болон сәйе.*** Шәкәр һалмайынса ла тәмле сәй әҙерләп була. Еркәүек сәскәләрен һыуҙа ҡайнатып, бер тәүлеккә тондорорға ҡуялар. Икенсе көндә төнәтмә тәмләнә.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы,**
**профессор.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# УН ИМ-ӘМӘЛ...

## яман шештән арынырға ярҙам итә

### Кишер

Беренсенән, кишер көслө антиоксидант һәм бета-каротин сығанағы, ә икенсенән, ауыҙ ҡауышлығы һәм тамаҡ, ашҡаҙан һәм йыуан эсәк, бәүел ҡауығы һәм ирҙәрҙең енси биҙе яман шеше барлыҡҡа килеү хәүефен кәметә. Урологтар тикшеренеүҙәре кишерҙең бәүел ҡыуығы яман шешенә ниндәйҙер ҡаршылыҡ күрһәтеүҙе раҫлай. Ҡуҡыныс ауырыуҙан һаҡланыр өсөн бешерелгән кишер ҙә файҙалы, ләкин тик сей көйөнсә уның шифалы үҙенсәлектәре күберәк.

### Брокколи

Брокколи яман шештең афәтле йоғонтоһон йомшарта торған үҫемлек. Ул антиоксидант булараҡ, кеше күҙәнәктәрен "дәртләндереп", ауырыу менән көрәшергә ярҙам итә. Йәш үҫемлектәр яман шешкә ҡаршы шифалы элементтар менән байыраҡ була. Был үҫемлек шытымдарын файҙалы ризыҡ менән тукланыу магазиндарында табып була, йә үҙең үҫтереп алырға ла мөмкин. Шундай файҙалы үҫемлектең шытымдарын ашамлыҡҡа ҡушып ебәреү үҙ һаулығыңды һаҡлауҙың бер сараһы булып тора.

### Кайенна боросы

Кайенна боросоноң ауыҙ эсен яндыра торған сифаты бар, шул ауыҙҙы яндырыусы матдәһе яман шеш күҙәнәктәренә ҡаршы уңышлы көрәшә белә. Күпме түҙә алаһың, шунса ашарға мөмкин. Күберәк ашау яҡшыраҡ.

### Бәшмәктәр

Бәшмәк организм өсөн файҙалы матдәләргә бай, шулай уҡ яман шешкә ҡаршы ла бик тәьҫирле. Хатта алты мең йыл элек тә ҡытайҙар бәшмәктәрҙе им өсөн файҙаланғандар. Файҙа килтереүсе бәшмәктәрҙең төрләһә була. Мәҫәлән, шиитаке, рейши, ҡарама бәшмәге һ.б. Бәшмәктең үҙен аҙыҡҡа ҡулланыуҙан тыш, әйтеп үтелгән сорттарҙың һығынтыларын файҙаланырға мөмкин. Азия бәшмәктәрендә, күп тикшеренеүҙәр раҫлауынса, яман шеш күҙәнәктәренең үрсеүен туҡтатып, уларҙы юҡ иттереүсе матдә бар, шуға ла ул простата биҙе яман шешенән файҙалы.

### Ҡурай еләге

Ҡурай еләге - антиоксиданттар һәм яман шештән һаҡлаусы матдәләр менән билдәле. Махсус тикшеренеүҙәр асыҡлауынса, ҡурай елеген ашаған ҡомаҡтар ҡыҙыл үңәс яман шеше менән күпкә әҙерәк ауырығандар. Һуңынан йыуан эсәк яман шеше менән сирләүселәргә ҡурай еләге онтағы биреү ҙә ыңғай һөҙөмтәгә килтергән. Шуға яман шешкә ҡаршы көрәшкәндә ошо татлы һәм бик файҙалы еләк хаҡында онотorға ярамай.

### Йәшел сәй

Йәшел сәй яман шеш күҙәнәктәренең үпкә һәм аш һеңдереү системаһын емереүенә ҡамасаулай. Ләкин бында һүҙ хәҙерге магазиндар кәштәһендә теҙелгән иҫәпһеҙ сәй төрҙәре тураһында түгел, ә Япониянан килгән ысын йәшел сәй хаҡында әйтелә. Шунлыҡтан, яман шештән һаҡланам тип йәшел сәй эҙләһәгеҙ, Азия магазиндарына юл тоторға тура килер.

### Помидор

Помидорҙың файҙаһы ҙур, шуға уны сей көйөнсә ашарғамы, әллә эшкәртепме - әллә ни мөһим түгел. Помидорҙы гел ашаған ирҙәр араһында простата биҙе яман шеше менән ауырыусылар иҫәбе 35 процентҡа кәмеүе күҙәтелгән.

### Куркума (һинд зәғферәне)

Һинд зәғферәне тын юлдары шешкәндә, һыуыҡ тейгәндә, йә тын ҡыҫылыуын дауалағанда ҡулланыла. Әммә яныраҡ ғалимдар тарафынан уның яман шеш менән көрәшеүҙә лә файҙаһы асыҡланды. Һиндостанда ирҙәрҙең биҙ яман шеше менән Америка Ҡушма Штаттарындағыға ҡарағанда әҙерәк ауырыуҙарын асыҡлау арҡаһында ошондай һығымта яһалған. Ғалимдар был айырмаға һинд халҡы ашаған аҙыҡ-түлек тәьҫир итә тип фаразлай.

**(Аҙағы. Башы 25-се һанда).**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Мамыҡас

**(Длиннохвостая синица (ополовник)**



Турғайҙарҙың тағы бер төрө. Бик ваҡ ҡош, ҡойроғо оҙон, баҫҡысланып тора, уның ҡарауы, суҡышы ҡыҫҡа һәм ҡеүәтле. Мамыҡ кеүек кенә кәүҙәһе ап-аҡ төҫтә, арҡаһы ҡара, ҡабырғаларында алһыу һыҙаттары бар, күҙҙәренән артҡа табан ҡара һыҙат үтә. Ҡойроғоноң уртаһынан - ҡара, ситенән аҡ төҫтәге ҡаурыйҙар урынлашҡан. Йыраҡтан ҡарағанда, мамыҡас оҙон тотҡалы бер бәләкәй генә йоморо сүмескә оҡшаған, русса икенсе атамаһы ла ошонан килеп сыҡҡан.

Урман зонаһында ҡатнаш һәм япраҡлы урмандарҙың барыһында ла тиерлек осрай. Япраҡлы ағастар үҫкән урмандарҙы ярата, йылыраҡ йылға ярҙары буйында йәшәй, кеше күҙенә салынып бармай, йәшерен йәшәү рәүеше алып бара. Әммә көҙөн һәм ҡышын уны күреү бәхете тәтергә мөмкин, сөнки тап ошо ваҡытта мамыҡастар "цици-ции" йәки үҙҙәренә генә хас "чәрр-чәрр" тип ҡысҡырып, тупҡа тупланып, урмандан урманға күсеп йөрөй башлай, ҡыуаҡ төптәренән, ағастарҙың аҫҡы ботаҡтарынан ризыҡ эҙләй. Ҡыҙылтүштәр менән бер тупҡа йыйылыуҙары ла ихтимал.

Ояһы шар кеүек, инә торған ере ҡабырғанан, ояны улар үрмәксе ауы ҡушып мүктән яһап ала. Ояһын зәңгәрһыу-йәшел ылымыҡтар менән дә тышлап ҡуя. Уны ағастың йыуан ботаҡтары киҫелешкән ерҙәрендә күрә алаһығыҙ. Алһыу ғына йоморҙҡалары 9-12-гә етә.

Көньяҡ Уралдың урмандарында бар, бигерәк тә ағастары ҡартайып бөткән ҡуйы әрәмәләрҙә, олоно өңөйеп бөткән ҡарт ағастар күп булған ерҙәрҙә ул гәзәти ҡош.

### Мыйыҡлы турғай

**(Усатая синица)**



Оҙон, баҫҡыслы ҡойроҡло ерән-көрәнһыу ҡош. Күҙҙәре һары. Ата ҡоштоң башы зәңгәрһыу-күк, суҡышының аҫтынан ғына ҡара ҡаурыйҙар - "мыйыҡтар" тырпайып тора. Тауышы сағыу, "чвинь" тип ҡысҡыра.

Беҙҙең төбәктә осрамай, республикаға иң яҡын ареал - Каспий алды. Ҡамышлы ерҙәрҙә йыл әйләнәһенә йәшәй. Ояһы - ҡамыш араһында йәки ҡыуаҡтар төбөндә эленеп торған зәңгәр "сынаяҡ". Ырымбур өлкәһендә оя ҡороп йәшәй, ә Силәбе өлкәһендә һирәк кенә булһа ла күренеп ҡала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**

**(Дауамы бар).**



## 20 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.40 Д/с "Победа". [16+]
13.40, 14.20, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Работа над ошибками". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 12.00.
12.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
18.00 "60 минут". [12+]
21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
21.30 Т/с "История его служанки". [16+]
23.40 Т/с "Богатые тоже плачут". [16+]
0.30 XXXV Международный фестиваль "Славянский базар в Витебске".
2.05, 3.30 Т/с "Чужое гнездо". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Асыш". Дети. [6+]**
**16.00, 3.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Формула здоровья. [12+]**
**17.15 На своей земле. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Д/с "Разноцветная планета". [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Здоровый смысл". [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд ТВ. [12+]**
**0.00 Хоккей. Золотые матчи ХК "Салават Юлаев". [6+]**
**2.00 Спектакль "Дочь степей". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 21 ИЮЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Работа над ошибками". [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Наперегонки со временем". К 75-летию Олега Газманова. [12+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "История его служанки". [16+]
23.40 Т/с "Богатые тоже плачут". [16+]
0.30 Торжественная церемония закрытия XXXV Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
2.25, 3.30 Т/с "Чужое гнездо". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Шулер". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**23.45 На своей земле. [12+]**
**0.00 Хоккей. Золотые матчи ХК "Салават Юлаев". [6+]**
**2.00 Спектакль "Ильгизар+Вера". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 22 ИЮЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Работа над ошибками". [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Бесстрашие таланта". К 80-летию Бориса Эйфмана. [12+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "История его служанки". [16+]
23.40 Т/с "Богатые тоже плачут". [16+]
2.25, 3.30 Т/с "Чужое гнездо". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Шулер". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45, 21.00 Материнство и детство. [12+]**
**17.00 Навигатор истории. [12+]**
**17.15 Полезные новости. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00, 3.30 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Здоровый смысл". [16+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2026". [12+]**
**0.00 Хоккей. Золотые матчи ХК "Салават Юлаев". [6+]**
**2.00 Спектакль "Пой, соловушка". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 23 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Работа над ошибками". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "История его служанки". [16+]
23.40 Т/с "Богатые тоже плачут". [16+]
2.25, 3.30 Т/с "Чужое гнездо". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Шулер". [16+]**
**11.00 Д/ф "Взгляд с высоты. Храмы Великого Новгорода". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Навигатор истории. [12+]**
**16.15 Полезные новости. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 "Тайные механизмы природы". [12+]**
**17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Хоккей. Золотые матчи ХК "Салават Юлаев". [6+]**
**2.00 Спектакль "Забытая молитва". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 24 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 Давай поженимся! [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Юбилейный концерт Стаса Михайлова. [12+]
23.40 Т/с "Диана де Пуатье". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе! Народный кастинг". [12+]
23.55 Х/ф "Холодное сердце". [12+]
3.25 Х/ф "Крепкий брак". [16+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Шулер". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15, 22.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Детей много не бывает. [6+]**
**16.00 Хазина. [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 На своей земле. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 Хоккей. Золотые матчи ХК "Салават Юлаев". [6+]**
**1.30 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 25 ИЮЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Наперегонки со временем". К 75-летию Олега Газманова. [12+]
11.10 Д/ф Премьера. "Улика из прошлого". Специальный репортаж. Ко Дню сотрудника органов следствия РФ. [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Наше всё. Сделано в России". [12+]
13.10 Х/ф "Анкор, еще анкор!". К юбилею Ирины Розановой. [16+]
15.10 Х/ф "Свой среди чужих, чужой среди своих". К 80-летию со дня рождения Александра Кайдановского. [12+]
17.00 Д/ф "Владимир Высоцкий. "Уйду я в это лето..." [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Своя колея". [16+]
23.30 Т/с "Диана де Пуатье". [16+]
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башҡортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Острое блюдо". [16+]
0.35 Х/ф "Расплата". [12+]
4.10 Х/ф "Судьба Марии". [16+]
5.53 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**8.15 Материнство и детство. [12+]**
**8.30 На своей земле. [12+]**
**8.45 Хазина. [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Атайсал. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Д/ф "Взгляд с высоты. Легенды русского Севера". [6+]**
**18.15 Полезные новости. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Хоккей. Золотые матчи ХК "Салават Юлаев". [6+]**
**2.00 Спектакль "Камикадзе". [12+]**
**4.00 Телецентр.**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 26 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Д/ф Премьера. "Наследие адмирала Ушакова. Формула победы". [12+]
11.10 "Жизнь своих". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Бесстрашие таланта". К 80-летию Бориса Эйфмана. [12+]
13.20 Д/ф "История российского флота". [12+]
15.55 "Русский мир". Концерт Олега Газманова. [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Т/с Премьера. "Скрытые мотивы".
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.55, 2.45 Х/ф "Терапия любовью". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.00, 11.00, 14.30, 17.00, 20.00 Вести.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.30 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 1.10 Д/с "Рассказы из русской истории". [12+]
12.50 Х/ф "Капитан четвёртого ранга". Ко Дню Военно-Морского Флота РФ. [12+]
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.30 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.55 Д/ф "Адмирал Кузнецов. Флотоводец Победы". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд ТВ. [12+]**
**8.15 Формула здоровья. [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.45 Тирмәкәй. [6+]**
**11.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Избранная судьба". Нугман Мусин". [12+]**
**14.15 Все песни о прекрасном… [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Честно говоря. [12+]**
**16.00 "Тайные механизмы природы". [12+]**
**16.30 Д/с "Разноцветная планета". [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 "Вдохновение на целый век". Концерт к 100-летию Муртазиной Миляуши Галиевны. [12+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**23.00 Концерт Сибайской филармонии "Вечные песни Рима Хасанова". [12+]**
**1.00 Хоккей. Золотые матчи ХК "Салават Юлаев". [6+]**
**3.00 Спектакль "Семейный портрет с посторонним". [12+]**
**4.30 Телецентр.**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1448 һижри йыл.*

| Июль (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (6) дүшәмбе | 3:37 | 5:05 | 13:30 | 18:56 | 21:39 | 23:09 |
| 21 (7) шишәмбе | 3:38 | 5:07 | 13:30 | 18:55 | 21:37 | 23:07 |
| 22 (8) шаршамбы | 3:40 | 5:08 | 13:30 | 18:54 | 21:36 | 23:06 |
| 23 (9) кесе йома | 3:41 | 5:10 | 13:30 | 18:54 | 21:34 | 23:04 |
| 24 (10) йома | 3:43 | 5:11 | 13:30 | 18:53 | 21:33 | 23:03 |
| 25 (11) шәмбе | 3:45 | 5:13 | 13:30 | 18:52 | 21:31 | 23:01 |
| 26 (12) йәкшәмбе | 3:46 | 5:15 | 13:30 | 18:51 | 21:30 | 23:00 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ШИФАЛЫ ЭСЕМЛЕК - ҠЫМЫҘ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**27-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Старт. Боланут. Мәтрүшкә. Йомшаҡ. Тәңре. Әнис. Аласыҡ. Унан. Евпатория. Улъя. Урта. Айыу. Мәрүәр. Әсҡәт. Ҡауҙы. Ағым. Уҫаҡ. Шүмән. Әбәк. Әрем.

**Вертикаль буйынса:** Тилермән. Меңъяпраҡ. Егет. Ата. Баяр. Ғәйрәт. Үгәй. Тәлгәш. Уҡмаш. Уяу. Үпкә. Әпсен. Урам. Тауыҡ. Әҫпе. Йылантамыр. Утрау. Шанс. Ҡырҡъяпраҡ.

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ЕЛДӘР АЯҠТАН ЙЫҠҺА ЛА...

## ҡылыҡтарыбыҙ йыҡмаһын

• Эсендә ни - тышында шул, уйында ни - телендә шул.

• Үҙең дә аҙағынаса атҡармаҫтай эште башҡаларға таҡма.

• Әсә илатҡанды һыу йотор, ата рәнйеткәндә ер убыр, изгелек эшләгән кеккә осор - кәрәкләһен үҙең һайла.

• Яуыҙлыҡ эшләгән закон язаһынан ҡотолһа ла кеше нәфрәтенән тайшанып ҡала алмай.

• Ҡағыҙ - ул күтәрелгән ҡылысты ҡынға һалырға, тамырҙарын тәрәнгә ебәргән имәндәй түрәләрҙе лә урындарынан осороуға һәләтле көс.

• Үҙ һүҙле ҡара тырыш, тиҫкәре кеше генә бар ғәләмде болғарға оҫта.

• Ҡарышҡыр утта яныр, ыңғайҙар күккә ашыр.

• Һәр кем үҙ һурпаһында бешә, сит ҡалаҡҡа урын юҡ.

• Тәрбиәле кеше ҡиммәтле аҡылға эйә - уның менән һөйләшеү үҙе бер ғүмер.

• Үҙендә хурлаусыға күп һүҙҙәр яуҙырма, тәрән мәғәнәле, әсе һүҙле бер һөйләмде һип өҫтөнә.

• Алаһы әйберенде яҡшылап ҡарап ал, алыусының ҡулына тоттор - икеһе лә аҙәплелек.

• Дуҫҡа барһаң, әрләп-өйрәтеп һыу эсерер, дошманға барһаң, маҡтап-ҡуптап ыу эсерер.

• Ҡото осҡанға ҡот ҡойҙор, ете ҡоҙоҡ һыуын эсер.

• Кеше бөйөклөккә лә менеүс, ҡурҡыныс түбәнлеккә лә тәгәрәүсе, замандың ҡаты һынауҙарына ла бирешмәүсе йән эйәһе икәнен онотмайыҡ.

• Ҡаты иҫкән ел аяҡтан йыҡһа йыҡһын, үҙ телең, үҙ ҡылығың ғына йыҡмаһын.

**Әминә МОНАСИПОВА.**

*БАҠСА*



# ЕЛӘК ҮҪТЕРЕҮ СЕРЕ

### Июль

Емеш биреп бөткәндән һуң еләктең бөтә иҫке, ауырыу һәм зыянланған япраҡтарын йолҡоп алырға. Етерлек итеп һыу ҡойоп, еләк төптәре тирәһендәге тупраҡты йомшартып, артыҡ мыйыҡтарын йолҡоп ташларға кәрәк.

Июль айында баҡса еләгенә ҡайын еләге талпаны төшөүе бар. Зыян күргән үҫентеләрҙең япраҡтарын ҡырҡып алып яндырырға кәрәк. Шунан бөтә түтәлгә 60 градус тирәһе эҫе һыу йәки марганцовканың эҫе иретмәһен һибергә. Әгәр ҙә үҫемлеккә башҡа төр ҡороҡос бөжәктәр эйәләһә, химик йәки биологик инсектицидтар һибергә кәрәк. Шулай уҡ халыҡ кәңәштәренә мөрәжәғәт итергә була. Был осорҙа еләк япраҡтарын таптар баҫа (төрлө ауырыуҙар сәбәпле), онло ысыҡ сире, күгәрергә мөмкин. Быларҙың барыһын да коллоид көкөрт ҡушылған 1 процентлы бордос шыйыҡсаһын һибеп (10 л һыуға 100 г препарат), бөтөрөргә була.

### Август

Йәй аҙағында еләк төптәрен тәрән ҡаҙып йомшартып, һәр төпкә берәр балғалаҡ комплекслы ашлама һалырға. Август аҙағына тиклем еләк мыйыҡтарын тупраҡҡа ултыртып, ҡыуаҡлыҡтарға даими рәүештә һыу ҡойоп торорға. Ғөмүмән, йәйҙең икенсе яртыһында - көҙ башында еләккә һыуҙы ваҡытында ҡойорға кәрәк.

### Сентябрь

Был айҙа киләһе йылда емеш бирә торған сәскә бөрөләре барлыҡҡа килә. Шуға күрә сентябрҙә еләккә һыу һибергә онотмау мөһим.

### Октябрь

Октябрҙә еләк ҡышты яҡшы сыҡһын өсөн унайлы шарттар булдырыуҙы хәстәрләйҙәр. Бының өсөн түтәлдәргә һыу ҡойорға, тупрағын йомшартырға, ҡый үләндәренән таҙартырға кәрәк. Еләк төптәрен торф, серемтә (перегной) йәки серетмә (компост) менән ҡүмәләр.

### Ноябрь

Тупраҡтың өҫкө ҡатламы туңыңҡыраһа (5-7 см-ға тиклем), түтәлдәргә мульча йәйергә кәрәк. Был үҫемлектәрҙең ерҙән йолҡолоп сығыуына ҡаршылыҡ тыуҙыра. Ә ҡар ятһын өсөн өҫтөнә сыбыҡ-сабыҡ, топинамбур япраҡтары, ҡурай еләге йәки кукуруза һабаҡтарын йәйеп һалалар. Был рәүешле еләк ҡышты яҡшы сыға.

**Бына ошондай тәү ҡарауға ябай, әммә мотлаҡ башҡарылырға тейеш тәрбиә эштәре баҡса еләгеп ауырыуҙарҙан һаҡларға, яҡшы уңыш алырға ярҙам итә.**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ФОЛЬКЛОР КӨНӨ - ШӘП САРА!



**Башҡортостанда йәшәүселәрҙе "Берҙәм фольклор көнө" акцияһында ҡатнашырға саҡыралар.**

17 июлдә В.Д. Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто башланғысы менән алтынсы тапҡыр "Берҙәм фольклор көнө" акцияһы ойошторола. Быйыл ул Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылына арналған. Акция Рәсәй халыҡтарының күп милләтле традицияларын һаҡлауға һәм популярлаштырыуға, шулай уҡ илебеҙҙең матди булмаған этномәҙәни байлығын һаҡлаусыларҙың эшмәкәрлегенә иғтибарҙы йәлеп итеүгә йүнәлтелгән. Ошо көндәрҙә илдә матди булмаған этномәҙәни байлыҡ объекттарының презентацияһы, фольклор байрамдары, концерттар, оҫталыҡ дәрестәре, йолаларҙы һаҡлаусылар менән ижади осрашыуҙар үткәрелә.

Республика Халыҡ ижады үҙәге Башҡортостанда йәшәүселәрҙе этномәҙәни сараларҙа ҡатнашырға, концертҡа йәки фольклор коллективының асыҡ репетицияһына барырға, халыҡ кәсептәре оҫтаханаһына һәм музейға инеп сығырға, ғаилә менән ауылда йәшәгән өләсәй-олатайҙарға ҡайтып килергә, ғаилә өсөн милли ризыҡтар әҙерләргә саҡыра. Ошо хаҡта клиптар, влогтар төшөрөп йәки фоторепортаждар эшләп, уларҙы хәштегы менән социаль селтәргә һалырға тәҡдим ителә.

# ИЖАДИ ҒАИЛӘЛӘР ЙЫЙЫЛДЫ

**Ошо көндәрҙә Ырымбурҙа, шулай уҡ Соль-Илецкиҙа "Рәсәй ғаиләһе. Ғаиләлә татыулыҡ - илдә берҙәмлек" тип аталған сара үткәрелде.**

Фестивалде асыу тантанаһында Башҡортостандан Ханнановтар ғаиләһе ҡатнашты. Баҡалы районынан Ханнановтарҙың ғаилә триоһы Башҡортостандың традицион музыкаль ижады менән таныштыра. Улдары Азамат ҡурайҙа һыҙҙыра, өҙләй ҙә. Атаһы Рөстәм Марс улы - ҡурайҙа, әсәһе Зөлиә Камил ҡыҙы думбырала уйнай. Әйткәндәй, Азамат Ханнанов -III Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһында Башҡортостандан ҡатнашыусыларҙың береһе.

Ырымбурҙағы фестивалгә илдең төрлө төбәктәренән ижади ғаиләләр йыйылды. Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылына бағышланған сара илдең 16 төбәгенән һәүәҫкәр ғаилә коллективтарын берләштерҙе. Фестивалдең төп идеяһы - ғаиләләрҙә мәҙәни традицияларҙы нисек һаҡлауҙы һәм быуындан-быуынға тапшырыуҙы күрһәтеү, һәм шуның аша күп милләтле Рәсәйҙең берҙәмлеген нығытыу. Ойоштороусылары - Ырымбур өлкәһенең Мәҙәниәт министрлығы һәм Ырымбур өлкәһенең Мәҙәниәтте үҫтереү төбәк үҙәге менән берлектә В.Д. Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто.

# ЙӘШТӘР ТЕАТРҒА ЙӨРӨҺӨН

**Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы "Пушкин картаһы" программаһы картаһының лимитын йылына 5 меңдән 7 меңгә тиклем арттырырға тәҡдим итте.**

Тағы ла бер яңылыҡ - циркка билет һатып алыу өсөн 2 мең һум лимит бүлеү. Бынан алдараҡ ил Президенты Владимир Путин Хөкүмәткә дәүләт цирктарының "Пушкин картаһы" программаһында ҡатнашыуын тәьмин итергә ҡушҡайны. Үҙгәрештәр ҡабул ителһә, улар 2026 йылдың 1 сентябренән көсөнә инергә тейеш. "Пушкин картаһы" программаһы 2021 йылда башланды. Был программа йәштәргә театрҙар, музейҙар, концерт залдарына һәм кинотеатрҙарға дәүләт иҫәбенә билет алырға мөмкинлек бирә. Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостанда Пушкин картаһы буйынса аҡса күләме Рәсәйҙә 4-се урынды биләй.

# "ЯРАЛЫ ТЫНЛЫҠ"

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә Махсус хәрби операция темаһына арналған "Яралы тынлыҡ" йыйынтығы баҫылып сыҡты.**

Китапта Башҡортостан журналистары һәм яҙыусылары Лариса Абдуллина, Мөнир Ҡунафин, Морат Рафиков, Гөлназ Ҡотоева, Миләүшә Ҡаһарманова һәм Гөлсирә Ғиззәтуллина-Ғайсарованың әҫәрҙәре тупланған. "Башҡортостан журналистары һәм яҙыусылары Махсус хәрби операция йылъяҙмаһын яҙа. Унда ошо һуғыш геройҙарының ҡаһарманлығы ғына түгел, ә ауыр фронт көнкүреше, уларҙың туғандарының һәм яҡындарының тылдағы уй-кисерештәре лә сағылыш тапҡан. Башҡортостан МХО-ла еңеү өсөн байтаҡ эштәр башҡара. Уның яугирҙары рәхмәтле ватандаштарыбыҙ хәтерендә ҡалырға лайыҡлы", - тип хәбәр иттеләр нәшриәттән. Бынан алдараҡ Өфөлә тәүге тапҡыр 112-се Башҡорт атлы дивизияһының бөтә фотоһүрәттәре менән китап сығарыуҙары тураһында хәбәр ителгәйне.

# ҠУРАЙ МОҢО ДОНЪЯНЫ ИҢЛӘЙ

**Ҡурайсы, Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле солисы Юлай Ҡасимов Ҡаҙағстанда үткән "Бөйөк дала моңо" халыҡ-ара конкурсында Гран-при яуланы!**

"Башҡортостанды, башҡорт моңон халыҡ-ара кимәлдә күрһәтеү - ҙур мәртәбә. Жюри һәм тамашасылар өсөн төрлө жанрҙағы программа әҙерләнем. Шулай уҡ сәхнәлә ҡурайҙы ҡамыштан (реброплодниктан) яһап, шунда уҡ уйнап күрһәтергә булдым. Был перформанс һәм тере тауыштың юғары баһаланыуына шатмын. Ҡаҙағстанға - бик йылы ҡабул иткәне, ә һеҙгә ярҙам һәм терәк булғаныгыҙ өсөн рәхмәт!" - тип яҙа ул социаль селтәрҙә.

ТЕЛҺӨЙӘР

# БАҘАМ БИҘЕ ШЕШКӘН

**Баҙарҡай касалаға өймәләм баҙам һалғандар. Быңдай баҙарлыҡ кемгә оҡшамаҫ? Баҙарлап кейенгән балалар көттөрмәй баҙам менән һыйланырға ла тотондо.**

**Баҙам.** Сәтләүек һымаҡ емешле көньяҡ ағасы һәм уның емеше. Миндаль. *Баҡсала баҙам ағасы сәскәгә күмелгән. Баҙам сәтләүеген ебетеп ашау файҙалыраҡ.*

**Баҙам биҙҙәре.** Ауыҙ ҡыуышлығындағы тыҡыма тупланмаһы. *Тамаҡ ауыртыуы ҡайһы ваҡыт баҙам биҙҙәре шешеүенә бәйле була. Баҙам биҙҙәре ҡыҙарып тора.*

**Баҙарҡай.** Диалектта "биҙәкле" тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Урамды баҙарҡай йорт ҡапҡалары биҙәй. Баҙарҡай көйәнтәһенә баҙарҡай ҡунаҡтәрен элгән киленгә һыу юлын күрһәтерҙә.*

**Баҙарлау.** Баҙарланыу. Баҙарға барыу. *Кәрәк-ярак алырға тип, баҙарларға сыҡтыҡ. Баҙарланыуыбыҙ уңышлы булды.* Баҙарлауҙың тағы бер мәғәнәһе - әйберҙе, өҫ-баштьы ҡәҙерләп тотоу. *Ата-әсәнән ҡалған ҡомартҡы монаятты балалары баҙарлап тора. Үҙе яһаған биҙәүесте ҡыҙыҡай баҙарлап ҡына таға.*

**Баҙарлыҡ.** Баҙарҙан алып ҡайтҡан ҡүстәнәс була баҙарлыҡ. Затлы баҙарлыҡ. Баҙарлыҡҡа еләк-емеш алыу. Диалектта баҙарлыҡ "баһа, хаҡ" мәғәнәһендә лә осрай. *Матур һауытҡа һалыу, күркәм итеп төрөү тауарҙың баҙарлығын күтәрә.*

**Шулай итеп, баҙарлыҡҡа - муллыҡ, һүҙ-телмәргә оҫталыҡ теләйек.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТИБЕШҺӘҢ ДӘ...

## тиңең менән тибеш

Ир-ат өйҙә ултырһа ла күңеле тышта, ҡатын-ҡыҙ тышта йөрөһә лә күңеле өйҙә.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер йәш кеше мөгжизәләр тыуҙырыр ҡеүәткә эйә булырға хыялланған. Бейек тау башында ошондай һәләтле бер аҡһаҡал йәшәгәнен ишетеп, уны эҙләп киткән. Барып тапҡан һәм уның янында йәшәй башлаған, ҡартҡа төрлөсә хеҙмәт иткән: ашарына бешергән, йыуындырған, аяҡтарына массаж яһаған. Ҡарт йәш кешегә бик тә рәхмәтле булған, әммә унан ул белгән мөгжизәләр тураһында һорағанда гел генә: "Мин ябай кеше һәм бер ниндәй мөгжизә лә ҡыла алмайым", - тип яуап бирер булған. Ә йәш кеше үҙенсә һығымта яһаған: "Уның яуабы - аҡһаҡал аҡылының бер билдәһе. Мөгжизәләр ҡыла белгән кеше бер ваҡытта ла "беләм" тип яуап бирмәҫ..."**

**Күп артынан күп үткән. Йәш кеше һаман да аҡһаҡалға хеҙмәт иткән. Берҙән-бер көндө ҡарттың аяҡтарына массаж яһап ултырғанда ул тағы ла баяғы мөгжизәләр тураһындағы һорауын биргән. Ҡарт уның һорауын ишетмәмеш булып, йоҡларға теләүен белдергән һәм массаж яһауҙы туктатырға бойорған. Егет тыңларға ла теләмәгән. "Мөгжизәләр тураһындағы серегеҙ менән бүлешмәһәгеҙ, аяҡтарығыҙҙы ыҫҡындырмайым", - тигән. "Ярай, - тигән аҡһаҡал, - һиненсә булһын. Мин һиңә бик ҡеүәтле бер тылсым доғаһы өйрәтәм. Һин уны ниндәйҙер теләк теләгәндән һуң туғыҙ тапҡыр ҡабатларға тейешһең. Шул саҡта һинең теләһә ниндәй теләгең тормошҡа ашасаҡ..." Йәш кеше шатланып, юлға йыйына башлаған. "Ашыҡма, - тигән шул саҡ аҡһаҡал, - бер шарт бар... Теләгең тормошҡа ашһын өсөн тынлыҡта ғына ултырып, бар иғтибарыңды шул теләгеңә йүнәлтергә тейешһең. Иң мөһиме, һин һары маймыл тураһында уйламаҫҡа тейешһең..." "Ниндәй һары маймыл! - тип ҡысҡырып ебәргән йәш кеше. - Мин, ғүмүмәң, бер ниндәй маймыл тураһында ла уйлағаным юҡ!"**

**Йәш кеше юлға сыға. Бара биргәс, күҙ алдынан ниндәйҙер йәнлектәр үтә башлағанын һиҙеп ҡала. Ләкин бик ныҡ ашыҡҡанлыҡтан, был хәлгә иғибар итмәй. Ул тиҙерәк өйгә ҡайтып етеп, тынлыҡта ултырып, тылсымлы доға ярҙамында үҙенең берәй теләген тормошҡа ашырырға ашыға. Тик... Өйөнә яҡынлашһа, уға тәҙрәнән әллә күпме маймыл ҡарап тора һымаҡ тойола. "Был ниндәй һаташыу?" тип уйлап ала ул, ләкин уны алда тағы ла нығыраҡ һаташыуҙар көткән була. Өйгә инеп, тынлыҡҡа сумып, аҡһаҡал өйрәткән доғаларҙы ҡабатлай башлауы була, бар тирә-яғын маймылдар уратып алыуын күрә, уларҙың үсеклəп ҡысҡырыуҙарын ишетә. Үҙеп торғоһоҙ була был хәл. Төнө буйы керпек тә ҡаҡмай сыҡҡас, иртән инде унда бер ниндәй мөгжизә ҡайғыһы ла булмай. Тик йоҡлау ғына була уйында. Әммә маймылдар уны көндөҙ ҙә эҙәрлекләүҙән туктамай. Йәш кеше кисен аҡһаҡалдың өйөнә ҡоско килеп йығыла. Ә уныһы уны көтөп торған була. "Нимә, маймылдар бимазаланымы?" тип көлөп һорай ул йәш кешенән. Егет уға үпкәһен белдерә лә: "Минең аңымды, зинһар, тылсымлы доғағыҙҙан азат итегеҙ. Мине мөгжизә ҡылырға өйрәтеү урынына, аңыма маймыл һындары индереп урынлаштырҙығыҙ", - ти. Аҡһаҡал еңелсә йылмайып, былай ти: "Һин үҙең ғәйепле. Мин һиңә "Бер ниндәй мөгжизә лә белмәйем", тип әйттем бит. Унан тыш, мин һиңә аҡылыңдың ниндәй дәрәжәлә үҫешмәгән һәм баҫылған икәнен күрһәтергә теләнем. Иң тәүҙә, аҡылыңды үҫтереү менән шөғөлләнергә кәрәк һиңә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Башҡортостан Республикаһы буйынса Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығында теркәлде:
**ПИ №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.**
1 582218 911006 26028

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 16.07.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 16.07.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 17.07.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2487
Заказ - 1239